ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-3 апрель-май (алағарай-һабанай) 2019

№ 17 (851)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Байрам артынан байрам,**
уларҙан булдыҡ хайран



3

**Иң матур әкиәт…**



Ленин бабай ине

6

**Бөтөн рухи ҡиммәттәр ҙә…**
һинең йәнеңдә һаҡлана бит



8-9

**Илаһи ихласлыҡ**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***
***Әлеге мәлдә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2019 йылдың икенсе яртыһына - 624 һумға, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тингә; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I - II группа инвалидтары - 563 һум 40 тингә, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур баҫмалар һәм Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы менән бүләкләнер. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Бөгөн атай-әсәйҙәр балаларын замандың яман шауҡымынан ғына түгел, ә хатта хеҙмәттән дә ҡурсалай, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

***Минитдин СӘЙҒӘФӘРОВ, Мәләүез районы, фермер:*** Һәр ата-әсәнең бурысы балаға бәхетле бала саҡ бүләк итеү. Өҫтәлдә аш-һыуҙың төрлөлөгөн, етәрлек кейем-һалым, физик һәм рухи үҫеше өсөн шарттар тәьмин итеү менән бер рәттән, уларҙың иңендә балаларын замандың насар күренештәренән һаҡлау бурысы ла ята. Хәҙерге замандың иң яман шауҡымдары - интернет һәм телевизор. Балалар ундағы юҡ-барҙы ҡарап, кәрәкмәгәнгә өйрәнеп ултырғандарынса хеҙмәткә күнегеп үҫһендәр, тип һанайым. Беҙҙең ғаиләлә 3 ҡыҙ һәм бер малай үҫә. 13 һәм 10 йәшлек ҡыҙҙарыбыҙ беҙҙең ҙур ярҙамсылар. Фермер исемен йөрөтһәк тә, эшселәр ялламайынса үҙ көсөбөҙ менән донъя көтәбеҙ. Ҡурала 10 һыйыр, 5 ат, башмаҡ-быҙауҙар, ҡолондар менән байтаҡ мал-тыуар бар. Иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем уларға тиҫтәләгән ҡош-ҡорт ҡушыла. Шулай уҡ баҡса эштәре лә бик күп ваҡытта ала. Шуға күрә ҡыҙҙарҙың эше күп. Уҡыуҙан ҡайтып ашап-эсеп алғас бер сәғәт ял һәм 3-4 сәғәт тышта үҙҙәренә тәғәйен эште башҡаралар. Унан дәрес әҙерләү һәм йоҡо. Әлбиттә, бер кем дә уларҙы армиялағы кеүек ҡаты дисциплина менән эшләтмәй, ни тиһәң дә улар әле бала ғына. Ләкин ҡушылғанды урын еренә еткереп, сифатлы итеп башҡарыу мотлаҡ.

Ярты көн тынсыу мәктәптә уҡып, унан һуң тағы ла өйҙә бикләнеп телефонға текәлеп ултырған балаларҙы ла, ошоно рөхсәт иткән ата-әсәләрҙе лә аңламайым. Саф һауа, нормалаштырылған физик эш баланың бөтә яҡлап үҫешенә ярҙам итә. Ауылдарҙа хәҙер бесәнгә йөрөгән йәштәр ҙә әҙәйеп бара, ҡыҙғаныҫҡа күрә. Бөтә эште техникаға йәки ялланған эшселәр елкәһенә һалып, төнө буйы тышта йөрөп, иртән йоҡлап ҡалған йәштәрҙе күп беләм.

Минеңсә, хәҙерге заман балаларының үтә лә мөсһөҙ булыуы, төрлө ауырыуҙарға тиҙ бирешеп барыуҙары нәҡ ошо физик эш етмәүҙән. Ир балалар тыштағы, ә ҡыҙҙар өйҙәге бөтә эште лә урын еренә еткереп башҡара белергә тейеш. Ашарына ла бешерә белмәйенсә буй еткергән ҡыҙҙан, ишеге төшкән шкафты ла йүнәтеп ҡуя алмаған егеттән ни фәтүә. Бала хеҙмәт тәмен татып үҫһә, оло тормошта уға күпкә еңелерәк буласаҡ. Балаларын үтә лә әпәүләп, эштән ҡурсалап үҫтергән ата-әсәләр ошоно аңламай, күрәһең. Ә ундайҙар бөгөн етерлек. Шуға күрә мин һорауҙы әҙерәк үҙгәртеп, бөгөнгө заман ата-әсәләренең күбеһе балаларын замандың яман шауҡымынан да һаҡламай, хеҙмәткә лә өйрәтмәй, тип әйтер инем.

**(Дауамы 2-се биттә).**




*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# АУЫЛДА ТЕРКӘЛЕП,

## ҡалала йәшәгәндәр ситләтелмәһен ине

**Ошо республикала йәшәгән халыҡ булараҡ, үҙебеҙҙең йортҡа, йә булмаһа ауылға һәм ҡалаға ҡағылышлы булған ғына мәсьәләләрҙән ары үтеп, тотош Башҡортостан тураһында ла уйларға бурыслыбыҙ. Кемдеңдер теге йәки был проблеманы килеп хәл итеүен көтөп ятыу мәғәнәһеҙлек. Шуға күрә, булған мәсьәләләрҙе ваҡытында күмәкләп күтәреп, уның хаҡында тейешле органдарҙы билдәлелеккә ҡуйып, ҡулдан килгән тиклем осона сығыуға булышлыҡ итеү һәр кемебеҙҙең бурысы. Әлегә тиклем быңдай мәғлүмәт менән бүлешеү бөтөнләй юҡ тиерлек ине, хәҙер битараф булмағандар интернет селтәре аша ла, ауыл һәм район хакимиәте башлыҡтарына шәхсән яҙып та мөрәжәғәт итә ала. Ә мин үҙем яратҡан "Киске Өфө" аша уй-фекерҙәремде еткергем килә.**

Баш ҡаланан алыҫ урынлашҡан Хәйбулла районында йәшәйем. Беҙгә бер ҡасан да Өфөгә яҡын райондарға булған тиклем иғтибар булманы. Әле лә уның артҡанын артыҡ тоймайым. Шулай ҙа был хәл үҙгәрер һәм беҙҙең тарафтарға ла ҙур етәкселәрҙең хәстәрлеге килеп етер, тип ышанам. Ҙур ҡалаға яҡын булған районда йәшәүселәрҙең хәле барыбер беҙҙәге кеүек үк түгелдер ул. Ни өсөн тигәндә, йөрөп эшләргә лә мөмкинлек бар, үҙең етештергән аҙыҡ-түлекте лә һатырға алып барып була. Ә дөрөҫөн әйткәндә, бөгөнгө көндә республиканың бөтә ауылдарында ла эшһеҙлектән йонсойҙар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# АУЫЛДА ТЕРКӘЛЕП,

## ҡалала йәшәгәндәр ситләтелмәһен ине

(Башы 1-се биттә).

Эше булмаған кешенең аҡсаһы ла юҡ, кеҫәлә шылтырамағас, йәшәүгә дәрте лә һүлпән. Ғәмһеҙлек, битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ, эскелек - бөтә бәләләрҙең дә башы ошо эшһеҙлектә. Ир-аттың ҡырға китеп эшләүе сара түгел. Улар күп ваҡыт өйҙә булмау сәбәпле, балаларын тәрбиәләүҙә ҡатнашмай тиерлек. Бөтә тәрбиә, йорт-ҡура тирәһендәге эш ҡатын-ҡыҙ иңендә. Шунан аптырайбыҙ ҡайҙан мәмәй улдар үҫә, тиеп. Шуға күрә, иң беренсе хәл итәһе мәсьәлә тотош республика буйынса эшһеҙлекте бөтөрөү.

Хәҙер баш ҡалалағы хәлдәр тураһында. Улыбыҙ ғаиләһе менән Өфөлә йәшәй. Хәҙер күп фатирлы йорттарға идара итеүсе компаниялар "хужа" бит инде. Шуларҙың эшмәкәрлеген ҡаты контролдә тотоу кәрәктер, тигән фекерҙәмен. Мәҫәлән, улымдың йорто ҡараған идарасы компания бигерәк "шашты". Әллә ниндәй түләүҙәр уйлап сығарып яҙа, пеняләр өҫтәй һәм башҡалар. Сүп-сар ҡабул итеү компанияһы менән килешеү төҙөлгән булыуына ҡарамаҫтан, квитанцияға сүп өсөн түләүҙе ҡуҙаллаған пунктты ла индереп ебәрергә тырышалар. Ай һайын улар менән килеп тыуған мәсьәләне тикшертеп йөрөргә эшләп йөрөүсе кешеләрҙең ваҡыты ла, теләге лә юҡ. Шуға күрә, идарасы компаниялар өҫтөнән тикшереүҙе уҙғарып, эштәрендәге кәмселектәрен һәм етешһеҙлектәрен бөтөрөүҙе талап итеү дәүләт кимәлендә башҡарылырға тейештер, тип уйлайым.

Тағы ла бер мөһим проблеманы билдәләп үткем килә. Ауылда тыуып үҫеп, хәҙерге ваҡытта ҡалала йәшәүсе йәштәр ике уртала тороп ҡалған. Эштәре ҡалала, ә теркәлгән урындары ауылда булыу сәбәпле, улар республика йәки федераль кимәлдәге бөтә программаларҙан да ситләтелә. Йәшәгән урындары буйынса хакимиәттә "Бында теркәлмәгәнһегеҙ", тип кире борһалар, районДағылар "Бында йәшәмәйһегеҙ бит", тигән формулировка менән ниндәй ҙә булһа исемлеккә теркәүҙән баш тарта. Йыл да уҡыу йортон тамамлаған меңәрләгән белгес ауылға ҡайтып төпләнә алмай бит инде. Шулай уҡ ҡалала теркәлеү өсөн дә мөмкинлек юҡ. Ошо мәсьәләне хәл итеүҙең ниндәй ҙә булһа юлын табырға ине, сөнки ҡайҙа йәшәүҙәренә һәм эшләүҙәренә ҡарамайынса, уларҙың барыһы ла үҙебеҙҙең республика мәнфәғәтен ҡайғырта, ҡаҙнаға һалым түләй. Ваҡытында "Шамонино" ауылы проекты ярҙамында әллә күпме кеше йортло булды. Хөкүмәтебеҙ, бәлки, тағы ла ошондай программа ҡабул итеү яйын табыр?..

Зиннәт ЛАТИПОВ.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн атай-әсәйҙәр балаларын замандың яман шауҡымынан ғына түгел, ә хатта хеҙмәттән дә ҡурсалай, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

***Фидаил УСМАНОВ, Стәрлетамаҡ ҡалаһы, вахта менән эшләүсе:*** Күптән түгел ҡалабыҙҙа балаларҙың юл буйындағы ҡоймаҙы буяп йөрөүҙәре айҡанлы ҡупҡан шау-шыу бер кемдең дә иғтибарынан ситтә ҡалманы. Йәнәһе лә, балаларҙың һаулығына буяу еҫенән зыян килә. Һүҙ булмағанда һүҙ булһын тип, яу ҡуптарған кеүектәр. Әлләсе, заманында беҙ үҙебеҙ тотош класты буяп, аҡлап, унан һуң тыштағы баҡса рәшәткәләрен тәртипкә килтереп ҡуя инек. Бер ата-әсә лә быға ҡаршы сығыу тураһында уйлап та бирмәне. Шул уҡ мәктәп тирәләй ҡар таҙартыу, ағас ултыртыу, йәй буйы баҡса ҡарау, көҙөн уныш йыйып алыу - барыһы ла уҡыусыларҙың "елкәһендә" булды. Ә кластағы дежур итеүҙәр һуң! Бигерәк тә күнеленә яҡын ҡыҙ менән дежурға ҡуйһалар, бер класты түгел, тотош мәктәпте йыуып-йышып сығырлыҡ ҡанаттар ҡуныр ине. Бер кемгә лә бындай эш терапияһының зыяны теймәне. Өләсәйем әйтмешләй, "Эшләгәнең, балам, кеше өсөн булһа ла, өйрәнгәнең үҙең өсөн". Ә хәҙер уҡыусынан таҡтаны һөрттөргән өсөн уҡытыусыны прокуратураға саҡыртып бөтәләр. Ошондай ғариза яҙған саҡта атай-әсәй нимә уйлай икән? Балаһының алдынан алып, уға белем биргән уҡытыусыны ғәфү үтендереп, уның күңеләндә ололарҙы ихтирам итмәҫкә, һанға һуҡмаҫҡа ла була, тигән фекерҙе тамырландырғанын аңламайҙармы, әллә ҡыландыраларМы? Бындай тәрбиәнең аҙағы билдәле - иртәме-һуңмы үҙҙәренән аша ҡарап торған балаларын һүҙ менән дә, ҡул көсө менән дә тыйлата алмаясаҡтар. Шуға күрә ата-әсәләргә балаларын хеҙмәттән ҡурсаларға түгел, күберәк эш менән "күмергә" кәрәк.

***Лилиә ХӘЛИСОВА, Әбйәлил районы, 5 бала әсәһе:*** Үҙемдә иҫләгәнем бирле ниндәйҙер эш менән булыштым. Хеҙмәт төшөнсәһе шул тиклем ҡанға һеңгән, балаларға ла ошоно аңлатырға тырышам. Ауылда йәшәгәндәр мал көтә, ә уның эше бөтмәҫ-төкәнмәҫ. Шуға күрә ауыл балалары эштен уртаһында ҡайнап үҫә. Шәхсән үҙем балаларын хеҙмәттән ҡурсалап ултырғандарҙы күргәнем юҡ. Быны ҡалала үҫкән балалар эшһеҙлектән йонсой. Иҙәнде робот-санһурҙырғыс йыуа, һауыт-һабаны машина ялтыратып ҡуя, керҙе лә техника өйрәлтеп ала. Энергияларын ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә, улар виртуаль донъяла баҡса "үҫтерә", мал "ҡарай", йорт "һала", ғөмүмән, кнопкаға баҫып ҡына эш бөтөрә башлай. Йомғаҡлап әйткәндә, ауылда йәшәүсе балалар нисек һәм ниндәй кимәлдә булһа ла хеҙмәткә ылыҡтырыла. Ә ҡаланыҡылар, ысынлап та, хеҙмәттән ныҡ ҡурсаулылар. Ләкин уларҙың бында гәйебе лә юҡ, сөнки ата-әсәләр, ғөмүмән, ҡала тормошо уларҙың тормошон "еңеләйтә".

***Раушания ИШКОЛОВА, Межгорье ҡалаһы, шәфҡәт туташы:*** Мин баламды маҡсатлы рәүештә хеҙмәттән ҡурсалайым. Үҙем ат һымаҡ егелеп йөрөп эш эшләнем бала саҡтан. Нимә тип сибек кенә ҡыҙ баланы ул ҡәҙәрем эшләткәндәрҙер, хәҙер уйлайым да иҫем китә. Ауыр-ауыр тоҡтарҙы күтәреү булһынмы, һарыкты ҡырҡыр өсөн уларҙы бер үҙем йығып һалыуымы, көбән ҡойғанда бер күбәне тиерлек күтәреп биреүме һәм башҡа ошондай ауыр эштәр һаулығымды ҡаҡшатып, әлеге тормошомдо ауырлаштыра. Эске органдар төшөп бөткән, ҡан баҫымы күтәрелеп аптырата, геморрой һәм башҡа бала саҡ "бүләктәре" һанап бөткөһөҙ. Шуға күрә ҡалаға күстем һәм ҡыҙым ауылға барғанда ла ауыр әйбер күтәрмәһен, һыуыҡ йылғала кер саймаһын, мунсаға утын ташығында 2-3-тән артыҡ алмаһын, тип ҡарап ҡына торам. Минә һауһаҡ, ырғыта баҫып йөрөгән бала кәрәк. Әйткәндәй, ирҙәргә лә тик һау ҡатын-ҡыҙ кәрәк. Улар үҙҙәре 36,7 градус температурала үлер хәлгә етеп мыжыһа ла, эргәләрендә ауыртыныуынан йөҙө сытырайған, һәр ваҡыт кеҫәһендә дарыу йөрөткән ҡатынды өнәмәйҙәр. Шуға күрә мин ҡыҙымды ауыр хеҙмәттән һаҡлайым, ләкин ҡатын-ҡыҙҙың өй эсендә белергә тейешле эштәрен өйрәтәм.

Гөлназ МАНАПОВА
яҙып алды.

УЙЛЫҒА - УЙ

# БЕРҘӘМ БУЛҺАҠ...

## ишетерҙәр, ихтирам итерҙәр

**Байтаҡ йылдар элек балам китапхананан бер китап алып ҡайтты. Уны бергәләшеп уҡыныҡ. "Сказка про Слона Хортона" тип атала ине ул әкиәт. Йөкмәткеһе лә хәтергә уйылып ҡалған.**

"Бер кескәй генә сәскә тажында күҙгә күренмәгән бик кескәй генә халыҡ йәшәгән, ти. Шул сәскә үҫкән яланда бәләкәй генә күҙле, ҙур ҡолаҡлы Хортон исемле фил йөрөгән. Бер көндө уның ҡолағына ниндәйҙер тауыш ишетелгәндәй була. Хортон туҡталып, тыңлап тора. Әммә хәүефте белдергән аңлайышлыҡ өндәрҙең айышын төшөнә алмай ҙа ҡуя икән. Баҡһаң, теге сәскәгә һәм унда йәшәүсе теге халыҡҡа ҙур фажиғә янай икән. Ҡайҙандыр килгән ҡорттар ул сәскәнең тамырҙарын ҡоротоға, һабаҡтарын кимерергә итә, имеш. Күҙгә күренмәгән халыҡ вәкилдәре ярҙам һорап, тағы ялбара башлай. Хортон ул сәскәне эҙләргә тотона, тик таба алмай. Шул саҡ ул күҙгә күренмәгән халыҡҡа: "Барығыҙ ҙа берҙәм йыйылып ҡысҡырһағыҙ, мин һеҙҙе ишетермен һәм табырмын", - тигән. Сәскә халҡы майҙанға йыйылып, бергәләшеп ҡысҡырған. Артабан Хортон тегеләргә: "Тағы ла кемегеҙҙер ситтә тороп ҡалдымы әллә? Һеҙҙе ишетәм, тик һүҙҙәрегеҙҙе аңлап еткермәйем", - тип өндәшкән. Сәскә халҡы йүгереп йөрөп ситтә тороп ҡалыусыны эҙләгән. Ҡараһалар, бер баҡсала ике бала гәмһеҙ генә уйнап йөрөй икән. Уларын да алып килеп, тағы ла бергәләп ҡысҡырғандар. Тик шунан һуң ғына фил уларҙы табып, хәлдәрен күреп, аңлап, сәскәне һаҡ ҡына тамырынан һурып ала. Һурып ала ла, ҡорттар һәм башҡа ҡороҡҡостар булмаған таҙа тупраҡлы яланға сығарып ултыртып ҡуя..."

Был әкиәттә ҙур филдең кескәй генә сәскә халҡына ярҙам итеүе, уны ҡотҡарыуы һоҡландыра, әлбиттә. Әммә бында төп фекер икенсе: халыҡ берҙәм булһа ғына, уның һәр вәкиле халыҡ яҙмышы өсөн борсолоп йәшәһә генә, уны ишетерҙәр, ихтирам итерҙәр, ҡолаҡ һалырҙар, ярҙам итерҙәр, һис юғы, ҡамасауламаҫтар.

Ә беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ үҙ-үҙенә бикләнгән. Беҙ бит джунглиҙа йәшәмәйбеҙ, Уралтауҙа көн күрәбеҙ. Халҡыбыҙ ошо ерҙә бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған икән, бында тик берҙәм булыуыбыҙ ғына ярҙам иткән. Сәскә һынлы сәскәлә йәшәп тә, күҙгә лә күренмәгән халыҡтың хатта филде лә туҡталып ҡалырға, үҙенә ҡолаҡ һалырға мәжбүр итеүе күп нәмә хаҡында уйландыра...

Фәүзиә ЯХИНА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағында 2020 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙы үткәреү буйынса комиссия ойошторолдо. Тейешле ҡарарға республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы. Комиссияны Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин етәкләй.

✓ Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 25 йыллыҡ юбилейына арналған сараларҙы әҙерләү һәм үткәреү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Республика Ҡоролтайының 25 йыллығы унайынан юбилей саралары 2020 йылдың мартында була.

✓ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы әүҙем йәштәрҙе Халыҡ-ара йәштәр форумына саҡыра. Йәштәр советы 2019 йылдың 28 апрелендә Өфө ҡалаһының "Торатау" конгресс-холында уҙа. Майҙансыҡ Башҡортостан һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән 220 вәкилде берләштерә. Мәскәү һәм Силәбе вәкилдәре өсөн телекүпер ойоштороla, ә конференц-бәйләнеш системаһы аша эшлекле һөйләшеүгә Ҡаҙағстан, Германия, Швейцария, Бөйөк Британия, Франция һәм Италия делегациялары ла ҡушыла.

✓ Төркиәнең КОНСИАД сәнәғәтселәр һәм эшҡыуарҙар ассоциацияһы Башҡортостан менән сауҙа һәм инвестиция мөнәсәбәттәре урынлаштырырға теләй. Уның президенты Кемаль Челик Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров менән осрашыуҙа ошо хаҡта белдерҙе. Төркиә республиканың төп ун партнеры иҫәбенә ингән. Төбәктә төрөк капиталы ҡатнашлығында ойошторолған 45 предприятие эшләй.

✓ Башҡортостанда 430 мең гектар ужым ашлығының әлегә 74,4 мең гектары, йәки 17,2 проценты янынан сәсеү хәүефе аҫтында ҡала. Ауыл хужалығы министрлығы ошо сәбәпле гәзәттән тыш хәл индерергә уйлай. 20 апрелгә Башҡортостандың 14 районы иртә яҙғы культуралар сәсеүгә төшкән. 15 мең гектар майҙан сәселгән. Быйыл яҙ республикала сәсеү кампанияһын 15-20 көн эсендә тамамлау ҡуҙаллана.

✓ ***Боронғо донъя тарихын өйрәнеүсе белгестәр ҡеүәтле Рим империяһының емерелеү сәбәптәре араһында идара итеүсе ҡатламдың туҡтауһыҙ барған байрамдарҙан айный алмауын да атай.***



*ИШАРА*

# БАЙРАМ АРТЫНАН БАЙРАМ,

## уларҙан булдыҡ хайран

**Был фани донъяла әҙәм балалары өсөн ниндәй ҙә булһа эш башҡарыуҙан да файҙалы нәмә юҡтыр ул. Боронғо Тәүрат тәглимәтенә ярашлы, Бөйөк Илаһ гонаһлы Әҙәмгә оло ғәйебен эш менән аҡлау бурысын йөкмәткән, "Ейер ризығыңды тир түгеп табасаҡһың", тиелгән уға. Аллаһы Тәғәлә үҙе лә әҙәм затын тап эшкә ҡулайлаштырып яралтҡандыр, моғайын. Юғиһә, эш башҡарыр өсөн кешеләрҙең оҫта ҡулдары ла, аҡылға бай баштары ла булмаҫ ине. Хайуани заттарҙың бындай мөмкинлектәре юҡ, шулай ҙа улар үҙҙәренә һалынған тәбиғи программаға ярашлы, үҙ "эш"тәрен еренә еткереп башҡарыу ҡеүәһенә эйә.**



Ваҡытында марксизм классиктары ла кешене хеҙмәт эшмәкәрлеге генә кеше итә алыуы тураһында бик хаҡ һығымта яһаған. Тап шуның өсөн кешелек тарихын уның эшмәкәрлек тарихы, тип тә атап булыр ине.

Әммә кеше тормошо барыбер эштән генә ғибәрәт түгел. Эшләп йонсоған кеше ваҡытында ял итмәһә, уның эшмәкәрлеге һөҙөмтәле булмаясаҡ. Ял итә белеү - мәҙәнилектең туранан-тура сағылышы ул. Ә ял итеүҙең кеше өсөн иң ылыҡтырғыс һәм үҙенсәлекле - байрам итеү. Ғөмүмән, боронғо һәм хәҙерге байрамдар - халыҡтар мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ бер өлөшө.

Уйлап ҡараһаң, байрамдарҙың ниндәйе генә булмаған кешелек тарихында. Ошо тарихи йола байрамдарын өйрәнеп кенә лә теге йәки был халыҡ тураһында бик күп нәмә белергә була. Мәҫәлән, башҡорттарҙа никах туйы йолаһын атҡарыу үҙе бер фәһемле халыҡ драмаһы күренешенә тиң булып, ифрат бай поэтик һәм эстетик мираҫ сифатында хәҙерге быуындарға килеп еткән. Никах туйы ғаилә ҡороу тантанаһы сиктәренән сығып, тотош ырыу, хатта ырыуара байрамға әүерелер булған. Әлбиттә, туйҙа ҡунаҡ һыйлау хужаларҙың иң ҙур бурысы булып, күңел асыу өсөн төрлө саралар ҡулланылған. Уйынкөлкө, йыр-бейеү, төрлө көрәш-ярыштар менән биҙәлеп уҙғарылған туй баһалы булған. Буҙа, ҡымыҙ, әсе бал эсеү булған хәлдә лә, бер кем дә иҫергәнсе эсеп, әҙәм көлкөһөнә ҡалырға теләмәгән. Урыҫ туйында ҡунаҡтарҙы өҫтәл аҫтына тәгәрәгәнсе эсереп һыйлау нисек барлыҡҡа килгәндер, әйтеү ҡыйын, әммә бындай байрамдар йыш ҡына ныҡ ҡыҙған ҡоҙаларҙың "йоҙроҡ һуғышы" менән ҡуша барған. Хәҙер ҙә ҡайһы бер урыҫтарҙан "Туй нисек үтте?" тип һораһаң, "Ҡыҙығы булманы, бер кем дә һуғышманы", тип шаяртыуы мөмкин. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең туй байрамдары ла күптән шул "урыҫ туйы"на әйләнеп бөттө инде.

Байрам, тигәс, байрамдың да төрлөһө була бит. Совет осорондағы идеологик "мейе томалау" сәйәсәте арҡаһында дини байрамдар бар тип тә беленмәһә лә, байтаҡ ҡына кеше ошо байрам йолаларын ярым-йәшертен тигәндәй үтәргә тырышты. Мәҫәлән, беҙ бала саҡтан уҡ Ҡорбан салыу һәм Ҡорбан ашына саҡырыу кеүек дини йолалар барлығын белеп күреп үҫтек. Бер заман хатта һабантуй һымаҡ халыҡ байрамын да ауыл хужалығы эшсәндәре көнө менән алыштырып маташтылар. Тап бына ошо халыҡ "гуляние"лары (был "байрам" урыҫса ошолай атала ине) кешеләрҙең күмәкләп алкоголле эсемлектәр эсеп, иҫерешеп байрам итеүенә сәбәп булды ла шикелле, сөнки әүәлге һабантуйҙарҙа бар әҙәм алдында эсеп, әҙәм мәсхәрәһе булып йөрөүселәр бөтөнләйгә булмаған бит.

Тора-бара совет осоро байрамдарын эскеһеҙ күҙ алдына ла килтереп булмай башланы. Минең студент йәшлегемә тура килгән 70-се йылдарҙа (Брежнев заманы) 7 ноябрь һәм 1 Май байрамдары демонстрацияларында ҡатнашҡан халыҡ хатта китеп барышлай, аяғөҫтө булһа ла эсеп алыуға әүәҫ булды. Коммунистик хеҙмәт ҡаҙанышы тип нарыҡланған субботниктарҙан да халыҡ ҡыҙмаса ҡайтыр ине. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, урыҫ мөхитенән башҡорт араһына ла килеп ингән үтә яман күренеш - байрамда иҫергәнсе эсеп, кәйеф-сафа ҡороу киң таралыш алды. Ошондай байрамдарҙың халыҡ әхлағын ауыһыҙ ҡаҡшатыуын, ғәҙәткә әйләнеп киткән байрам эскелегенең ғаилә һәм йәмғиәт именлегенә килтергән зыянын бер ниндәй ҙә идеологик йәки башҡа берәй маҡсаттар менән аҡлап булырлыҡ түгел. Күрәһең, был әлеге йәмғиәтебеҙ тарыған ауыр һәм оҙайлы дауам иткән бер сир булып, халыҡ күнелендә уға ҡаршы торорлоҡ "иммунитет" барлыҡҡа килгәнсе ауырыясаҡ. Әйткәндәй, ошо яман сирҙән азат булған йәш быуын башҡорттары күбәйә баргандай тойола, һәм, Алла бойорһа, улар башҡаларҙы ла айыҡ һәм сәләмәт тормош юлына сығара алыр, тигән ышаныс бар.

Байрам тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, тағы ла бер һорауҙы урап үтеп булмаҫ. Байрамдың бик һирәк булып, көтөп алынғаны ғына ҡәҙерлелер. Ауыр замандарҙа ла: "Бер саҡ беҙҙең урамға ла байрам килер", - тип, түҙемле һәм сабыр йәшәгән халыҡ. Бөгөн килеп, урамдарыбыҙ байрам артынан килгән байрамдан айнымай башланы. Әүәл берике көнлөк кенә булған Яңы йылыбыҙ 10 көнгә оҙайтылды: был Европаса булһа ла, беҙҙең халыҡ ошо көндәрҙә ни эшләргә белмәй, йөҙәп бөтә. Ярай әле был юлы шул канику лдарҙың бер көнөн май байрамына ҡуштылар - биш көн ял итәбеҙ 1 Майҙа. 23 февралде 9 май байрамына ҡушып, дүрт көн ял иттерәсәктәр.

Нисек кенә булмаһын, байрамдарыбыҙ күплегенән уңдыҡ. Ҡорбан байрамы ғына түгел, пасхаһы ла, башҡаһы ла бар беҙҙә. Теләһәң, көн дә байрам, көн дә туй: һәр һөнәр кешеһененең үҙ көнө, үҙ байрамы бар. Һөнәрҙәр һаны бер йыл эсендәге көн иҫәбенән дә күберәк булғас, бер көндә бер юлы бер нисә байрам ойоштороп та буласаҡ. Һис шикһеҙ, байрам тип, хайран да, вайран да булырлыҡ беҙҙә. Тик шуны оноторға ярамайҙыр: байрам - ваҡыт бит ул, ҡәҙерен һәм самаһын белмәһәң, ғүмереңдең бушҡа, елгә оҫҡан өлөшөнә әйләнә лә ҡуя. Буш һәм ҡотһоҙ байрамдар кешегә генә түгел, илгә лә ҙур зыян килтерә. Мәҫәлән, боронғо донъя тарихын өйрәнеүсе белгестәр ҡеүәтле Рим империяһының емерелеү сәбәптәре араһында идара итеүсе ҡатламдың туҡтауһыҙ барған байрамдарҙан айный алмауын да атай. Илдә ни тиклем күп ваҡыт бушҡа сарыф ителә, шул тиклем эш башҡарылмай, матди һәм рухи һөҙөмтәләр булмай, үҫеш туҡтала. Әле бөтә донъяны биләп алған иҡтисади көрсөктөң башында ла эшмәкәрлек менән түгел, ә биржаларҙа төрлө финанс уйын-махинацияларын ҡулланып, буштан-бушҡа байығырға ынтылыу яталыр ул...

Эш һәм байрам тураһында уйланғанда, мин ауыл кешеһен өлгө итеп ҡуйыр инем. Ул - тәбиғәт ҡосағында йәшәй ҙә, эшләй ҙә, байрам да итә. Ә тәбиғәт үҙ ҡанундарына ғына буйһона: уға байрам ни ҙә, ябай эш көнө ни. Шуның өсөн ауылда ғүмер иткән кешегә байрам да эш менән ҡуша килә, шунһыҙ ул үҙенең бер өҙлөкһөҙ дауам иткән тынғыһыҙ хеҙмәтенең һөҙөмтәһен күрмәҫ ине. Ауыл эшсәнәнә мал ҡарап, баҡса бағып, иген игеп тапҡан хәләл ризыҡын татыуҙан да олораҡ байрам да юҡтыр ул. Шулай булғас, һәммәбеҙгә егәрле һәм эшлекле милләттәштәребеҙ кеүек, тырыш һәм иҗади хеҙмәттең, тир түгеп башҡарған көндәлек эштең татлы емештәренән ҡыуаныс табып, эшмәкәрлек һәм байрам гармонияһына өлгәшергә яҙһын ине, тим.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ "Юлдаш" радиоһы хәбәрсеһе Зөһрә Арсаева журналистика өлкәһендә ТӨРКСОЙ Халыҡ-ара премияһын алды. Премия ошо көндәрҙә төрки донъяһының баш ҡалаһы тип иғлан ителгән Ош ҡалаһында тапшырылды. Журналистика өлкәһендә ТӨРКСОЙ премияһы 2010 йылда булдырылды. Сувенирҙа "Берҙәмлектә - тормош" тип яҙылған, был тамырҙары, тарихы, теле һәм мәҙәниәте уртаҡ булған төрки халыҡтарының дуҫлығын һәм берҙәмлеген аңлата.

✓ 12 июндә яңы Ағиҙел күперенә тәүгә таш һалыу күҙаллана. Проект буйынса, өс һыҙатлы ҡоролманың оҙонлоғо 668 метр була. Хәҙер 1984 йылда һалынған күпер биш хәрәкәт һыҙатынан тора, йәғни бынан һуң һигеҙ хәрәкәт һыҙаты булдырыла. 1956 йылғы күперҙең ҡатмарлы торошта булыуын иҫәпкә алып, бөгөн төрлө варианттар ҡарала. "Ул йәйәүлеләр күпере булыр, моғайын", - тиҙәр республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында. Тәҙәлеш ваҡытында күперҙәр ябылмаясаҡ.

✓ Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Олег Ханов Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының художество етәксеһе вазифаһын ҡалдырҙы. Театрҙа хәбәр итеүҙәренсә, художество етәксеһе вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп Иршат Фәйзуллин тәғәйенләнде. Олег Ханов туған театрында актер булып эшләүен дауам итә.

✓ Булат Йософовтың "Беренсе республика" нәфис фильмы XII Чебоксар халыҡ-ара кинофестиваленең конкурс программаһында ҡатнашыу өсөн саҡырылған. XII Чебоксар халыҡ-ара кинофестивале 20-24 майҙа Сыуашстандың баш ҡалаһында уҙа. Фестиваль этник һәм төбәк киноһына арналған.

✓ Башҡортостан статистары Өфөләге яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензиндың ҡиммәтләнеүе һәм дизель яғыулығының арзанайыуы тураһында мәғлүмәт бирҙе. АИ-98 маркалы бензиндың бер литры уртаса 49,25 һумға еткән. Бензиндың башҡа маркаларының хаҡы үҙгәрмәгән. Шуның менән бергә Өфөлә дизель яғыулығы 0,3 процентҡа арзанайған - бер литры уртаса 46,41 һум.

✓ Өфөлә тәүге таҡкыр яңы футбол стадионының дизайны күрһәтелде. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, спорт объекты Затонға илткән юлда төҙәлә. Икенсе урыны - "Мега" сауҙа комплексы янында. Эштәрҙе башлау һәм тамамлау ваҡыты әлегә билдәһеҙ. Проектты ВДНХ-ла барған "Яҙғы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм төҙөлөш форумы" экспозицияһында күрергә мөмкин.

БЫНАҒАЙЫШ!

**Ошоға тиклем ябай халыҡтың хәленә инеү урынына, "Аҡса юҡ. Һеҙ унда түҙегеҙ инде!" тип ағымлы ҡул болғап, йә бәләкәй эш хаҡына зарланған уҡытыусыларға эшҡыуарлыҡ юлы менән аҡса эшләргә кәңәш биреп ҡотола килгән ил Премьеры Дмитрий Медведевты ошо араларҙа алыштырып ҡуйҙылармы ни! "19 млн рәсәйле фәҡирлек сигендә йәшәй. Уларҙың күптәренә бик ауыр, ҡайһылары һуңғы сиккә еткән", - тип белдерҙе Премьер хөкүмәт эшмәкәрлеге хаҡында Дәүләт Думаһына отчетында. Әммә ләкин ул үҙе әйткән был һанға әллә һаман ышанып етмәнеме - һүҙҙе шундуҡ икенсе юҫыҡҡа бора һалды: "...фәҡирлек кимәле төрлөсә һәм һәр берешенең үҙ сәбәптәре" , - тине ул һәм һәр осраҡ буйынса айырым шөғөлләнеү кәрәклеген, бының өсөн ғаиләләрҙең килеме генә түгел, ә сығымдары ла иҫәпкә алынырға тейешлегенә баҫым яһаны.**

# СЫҒЫМДАРЫҢ КҮПМЕ?

Ә, бына ҡайҙа бара тел төбө! Бынан алдараҡ, 15 февраль Сочиҙа үткәрелгән инвестиция форумында фәҡирлек кимәлен билдәләү ысулына ҡарашты үҙгәртеү кәрәклеге хаҡында Д. Медведев һүҙ башлабираҡ ҡуйғайны инде: ярлы тип иҫәпләнгән ғаиләләрҙең килеменән алда сығымдарын тикшереү дөрөҫ булыр, донъя практикаһы шулай эшләй, тигәйне ул. Уның был фекере йәмәғәтселектә һәм айырыуса интернет селтәрҙәре менән файҙаланыусылар араһында ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырғайны, ләкин рәсми матбуғат сығанаҡтары был теманы игтибарһыҙ ҡалдырҙы һәм беҙ, "болот" үтеп китте, тип уйлап, яңылышҡаныбыҙҙы аңланыҡ. Хәйер, бындай һаҡ һәм аҫтыртын белдереүҙәрҙең һәр ваҡыт берәй "кармағы" булмай ҡалмай, әлбиттә. Ихтыяждар саманан артып китмәһен, тип, сығымдарҙы сикләргә маташыумы, әллә фәҡирҙәр һанын "кәметеү ысулы" шулай атҡарыламы хәҙер - әйтеүе ҡыйын... Һәр хәлдә, Премьерҙың был "кармағында" алтын булмаһа ла, ташый ҙурлыҡ ҡына бер "балыҡ" ҡарпый ине: "Килемгә түгел, сығымдарға ҡарап фекер йөрөтөргә. Шул саҡта бәләкәй балалар һәм өлкәнәйгән яҡындары менән йәшәүсе ғаиләләрҙең килеме йәшәү минимумынан 1 һумға артыҡ булған өсөн генә лә пособиенан мәхрүм ителеү кеүек осраҡтар булмаясаҡ..."

Бынан тыш, ярлы халыҡ ҡатламын "әнәһенән ебенә тиклем" күҙҙән үткәреп, уның "социаль портретын" төҙөргә ҡуша Премьер үҙенең ярҙамсыларына. Фәҡирҙәр... уй, ғәфү, фәҡирлек менән көрәшеү өсөн, ти Д. Медведев, фәҡирлек шарттарында йәшәгән кеше хаҡында күберәк белергә кәрәк: уның белеме, һаулыҡ торошо, ихтыяждары һ.б. Шул саҡта мохтажлыҡ кисереүселәргә адреслы ярҙам күрһәтергә мөмкин буласаҡ икән. Бик хуп, бәхет булмаҫ ине - бәхетһеҙлек ярҙам итте, тигәндәй, бындай "ысулдың" да берәй файҙаһы тейеп ҡуйыр, бәлки: берәмтекләп тикшереү, ихтимал, фәҡирлектә көн күреүселәрҙең ике тиҫтә миллиондан артып китеүен дә асыҡлап ҡуйыуы бар бит әле... Әйҙә, уларҙың һәр берәһе "адреслы ярҙам" алһын, тик башҡаса Премьер "Аҡса юҡ, бирешмәгеҙ унда!" тигән һүҙҙәрен генә ҡабатламаһын һәм йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултырта күрмәһен һәм йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултырта күрмәһен.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҠЫРЫМДА

**Ҡырым Республикаһында үткән V Ялта халыҡ-ара иҡтисади форумында Башҡортостан айырым майҙансыҡ итеп күрһәтелде. Форумдың пленар ултырышында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров сығыш яһаны.**

Радий Фәрит улы Ҡырым башлығы Сергей Аксенов менән осрашты һәм Сибай балаларының Евпатория балалар шифаханаһындағы ялы өсөн рәхмәт белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, балалар бик ҡәнәғәт, күнелдәре күтәрелеп ҡайтҡан. "Беҙ Ялта халыҡ-ара иҡтисади форумында ҡатнашырға саҡырыуығыҙҙы ҙур теләк менән ҡабул иттек, республиканың вәкиллеке делегацияһы килде. Хәҙер, барлыҡ сәйәси мәсьәләләр хәл ителгәс һәм иҡтисади үҫеш һыҙаттары билдәләнгәс, бөтә йүнәлештәр буйынса үҙ-ара килешеп эш итеүҙе көсәйтергә мөмкин", - тине Радий Хәбиров. Ҡырым башлығы Сергей Аксенов үҙ сиратында ике төбәк араһындағы килешеүҙең эш документы булыуын, уның буйынса реаль эш алып барылыуын, квартал һайын йомғаҡ яһалыуын, туризм һәм ауыл хужалығы юҫығында ҙур инфраструктура проекттары әҙерләнеүен билдәләне. Республика етәксеһе Ҡырымдың Башҡортостанға тапшырған Евпатория шифаханаһы буйынса бөтә тейешле ҡарарҙар ҡабул ителеүен дә билдәләне. "Хәҙер беҙ проектлау стадияһында, шифахана Евпаторияның биҙәге булыр һәм балаларыбыҙға, республикала йәшәүселәргә Ҡырымда дауаланыу, ял итеү өсөн өҫтәмә мөмкинлек тыуыр, тип ышанабыҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе.

## ЙҮГЕРҘЕЛӘР!

**21 апрелдә "Аструм Сибай марафоны" башланды. Йүгереүселәр колоннаһын Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров етәкләне. Унда 1100-ҙән ашыу ҡатнашыусы 2, 10 һәм 21 саҡрым арауыҡты йүгереп үтте.**



Сибайҙар өсөн был ярыммарафон ысын байрамға әүерелде. Ҡатнашыусылар бүләккә футболкалар һәм беләҙектәр алып ҡына ҡалманы, ҡыҙғылт һары йүгереүселәрҙән айырылып тороу өсөн ҡулдарына флагтар һәм башҡа предметтар ҙа тотҡайны. Һеҙөмтәлә 21,1 саҡрымлыҡ арауыҡта беренсе урынды 21 йәшлек Максим Сосегов, 10 саҡрымда - 22 йәшлек Рәлиф Хизбуллин, 2 саҡрымда 27 йәшлек Арсен Хәмиҙуллин яуланы. Финишта республика етәксеһе Радий Хәбиров урындағы халыҡ менән аралашты һәм селфиға төшөүҙән дә баш тартманы. Бынан алда "Башинформ" агентлығы Сибайҙа Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын билдәләүҙәре, ә республика Башлығы вазифаһын башҡарыусының халыҡҡа түҙемлектәре өсөн рәхмәт белдереүе тураһында хәбәр иткәйне.

## ҺАУЛЫҒЫҢДЫ ТИКШЕР!

**Башҡортостанда "Сәләмәт республика" акцияһы башланды: төбәктең төрлө мөйөштәренә күсмә Һаулыҡ үҙәктәре юлланды. Акция республика башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса уҙғарыла, тип иҫкә төшөрҙөләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.**

Уға күсмә фельдшер-акушерлыҡ пункттары, флюорографтар һәм маммографтар, Республика клиник дауаханаһының һәм кардиоүҙәктең күсмә диагностикалау үҙәктәре, республика стоматология поликлиникаһы модуле йәлеп ителгән. Акция 10 октябргәсә дауам итә. Был айҙа сәләмәтлек автопоездары Ҡырыҫҡалы (22-24 апрель - Боҙаяҙ, 25-26 апрель - Һәүәләй, 27-28 апрель - Ҡабаҡ, 29-30 апрель - Прибельский), Архангел (22-24 - район үҙәге, 25-26 - Максим Горький, 28-30 - Баҡалды), Благовещен (22-23 - Ильино-Поляна, 24-25 - Новонадеждино, 26-27 - Бедеева Поляна, 28 - Удельно-Дыуанай, 29-30 - Николаевка), Шишмә (22-24 - Әлкә-2, 25-26 - Шиңгәкҡул, 27-28 - Дурасов, 29-30 - Иҫке Муса), Салауат (22-25 - Малаяҙ, 26-28 - Нәсибаш) райондарында эшләй.

## ЙӘМӘҒӘТСЕЛЕК КҮТӘРЕЛӘ

**"Башинформ" агентлығы хәбәр итеүенсә, март айынан республиканың барлыҡ муниципалитеттарында спиртлы эсемлектәрҙең законһыҙ әйләнешенә ҡаршы көрәш мәсьәләләре буйынса граждандар сходтары уҙа. Бындай сходтарҙың инициаторы булып Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров сығыш яһаны.**

Әлшәйҙә алкоголгә ҡаршы форумдың дауамы булып бутлегерҙарға ҡаршы көрәш буйынса бик күп сходтар уҙғарыла. Ошо көндәрҙә генә урындағы халыҡ менән 80-гә яҡын осрашыу үткәрелгән, сходтарға 5,5 мең кеше килгән. "Раевкала спиртлы эсемлектәрҙең законһыҙ әйләнешенә ҡаршы көрәш ойоштороу буйынса ҙур форумда имам-хатиптар алкоголь менән сауҙа иткән йорттарҙа, шулай уҡ үҙ-үҙенә ҡул һалған кешеләргә дини йолаларҙы башҡарыуҙан, шул иҫәптән Ҡөрьән уҡыуҙан, балаға исем ҡушыуҙан баш тартыуҙары тураһында әйтте. Районыбыҙҙың ҡайһы бер ауылдарында имам-хатиптар бындай йорттарға инмәй башлаған. Сходтарҙа "Хәмерҙе йәшертен һатҡандарҙың өйөнә барып, "етте, яуызлыҡ менән сауҙа итеүеңде туҡтат" тип әйтһендәр өсөн ауылдың өс-дүрт хөрмәтле кешеһенән торған инициатив төркөмдәр ойошторорға кешеләр үҙҙәре тәҡдим итә. Ундай кешеләргә тыңлайҙар, сөнки хөрмәт итәләр. Улар алкоголь менән сауҙа иткәндәрҙең өйҙәренә йөрөнө, ынғай һөҙөмтә бар", - тип хәбәр итте Әлшәй район Советы секретары Шамил Сәлимов. Әлшәй районы башлығы Дамир Мостафин спиртлы эсемлектәр һатыусылар исемлегендәге 160 кешегә "аҡылға килеүҙәрен һәм сауҙаны туҡтатыуҙарын һорап хат ебәргән". Ҡайһы бер бутлегерҙар район башлығының һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, йәшертен сауҙа итеүҙәрен туҡтатҡан, тип өҫтәне Шамил Сәлимов.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө делегацияһы Ҡаҙанда үткән "Туризм һәм спорт" XXIV Халыҡ-ара махсуслашҡан күргәҙмәлә ҡатнашты. Быйыл унда Рәсәйҙең 18 төбәгенән һәм 36 ҡалаһынан, Ҡытайҙан, Төркиәнән, Венгрия һәм Ҡаҙағстандан 100-ҙән ашыу компания үҙ мөмкинлеген күрһәтте. Сара сиктәрендә үткәрелгән эшлекле һөйләшеүҙәр барышында төбәк туризмын үҫтереү перспективалары, туристарҙы ылыҡтырыу буйынса берлектәге проекттар, ваҡиға туризмын үҫтереү юлдары буйынса фекер алышынды.

✓ Быйыл Өфөлә 12400 гектар майҙанда - парктар, скверҙар, ҡала урманларында - дератизация саралары уҙғарыласаҡ, кеше күп йөрөгән урындарҙа "Һаҡ булығыҙ! Талпан!" йәки "Хәүефле территория! Геморрагик биҙгәк!" тигән иҫкәртеүле щиттар урынлаштырыласаҡ. Дератизация эштәре 22 апрелдән башланып, талпандарға ҡаршы эшкәртеү - 9 майға, кимереүселәргә ҡаршы 31 майға тиклем тамамланырға тейеш.

✓ "Махсуслаштырылған хеҙмәтләндереү комбинаты" МБУ-һы дөйөм майҙаны 493 гектар булған 9 ҡала зыяратын хеҙмәтләндерә, уларҙың 413 гектары - ғәмәлдә. Комбинат инициативаһы менән индерелгән www.pomnim.me электрон эҙләү системаһы ҡәберҙәргә барыуҙың ҡыҫҡа юлын табырға ярҙам итә. Әлеге ваҡытта Мосолман, Көньяҡ зыяраттарында сенсорлы экран ҡуйылған шундай павильондар эшләй, киләсәктә ул Төньяҡ зыяратта ла барлыҡҡа киләсәк.

✓ Өфө "Нур" татар дәүләт театры ҡаршыһында татар яҙыусыһы, шағир, тәнҡитсе һәм тәржемәсе Ғабдулла Туҡайға һәйкәл асыу тантанаһы уҙҙы. Тантанала Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров, Татарстан Президенты Рөстәм Миңлеханов, саҡырылған ҡунаҡтар ҡатнашты. Һәйкәл Мәскәүҙә ҡойолған. Бейеклеге өс метрҙан ашыу тәшкил итә. Туҡайҙы уң ҡулында - ҡаурый ҡәләм, ул әҙәби ижад һәм шиғриәт символын күҙәләндерә.

✓ 20 апрелдән "Трамплин" туҡталышы янында урынлашҡан пассажирҙар аҫылмалы канат юлы эшләй башланы. Граждандар өсөн түбәндәге хаҡтар билдәләнгән: 45 һум - ҡулаҡса, контактһыҙ түләү функцияһы менән банк картаһы буйынса; 35 һум - Өфө ҡалаһы Муниципаль электр транспорты идаралығының электрон пластик карталары буйынса. Льготалылар, пенсионерҙар, уҡыусылар өсөн - 20 һум.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# УРЫНБАҪАРҘАР ҠЫҪҠАРТЫЛА...

**Республика Хөкүмәтендә үткән сираттағы "Сәләмәтлек сәғәте"ндә һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә тормошҡа ашырылған эштәр тураһында БР һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин сығыш яһаны.**

Отчеттан мәғлүм булыуынса, беренсе кварталда табиптарҙың ҡабул итеүҙәре кәмегән. Быны ҡабул итеүгә яҙылыу мөмкинлеге түбәнәйеүе менән аңлатырға мөмкин. Мәҫәлән, педиатрҙарға мөрәжәғәт итеүселәр аҙайған, әммә ҡабул итеүгә сиратты бер аҙнанан да ашыу көтөү осраҡтары артҡан. 16 меңдән ашыу бала педиатрға - аҙна дауамында, ә 68 меңе нормативта ҡаралған 24 сәғәт эсендә инә алмаған. Терапевтарға мөрәжәғәт итеү 62 меңгә артҡан, шул иҫәптән 20 меңе алты көндән ашыу үҙ сиратын көткән.

Шундай уҡ хәл-торош махсуслашҡан белгестәргә консультация яҙҙамына яҙылыуға ла ҡағыла. 3176 табиптың аныҡ расписаниеһы һәм ҡабул итеүгә яҙыу мөмкинлеге булмаған. Ғәмәлдә улар пациенттарҙы шул көндә барлыҡҡа килгән сират буйынса ҡабул иткән. Ведомство етәксеһе фекеренсә, был күрһәткестәр бүлексә мөдирҙәренең контроле булмау сәбәпле. Һөҙөмтәлә, кадрҙар ҡеүәтен дөрөҫ файҙаланмау арҡаһында күп ваҡыт юғалтыла һәм файҙалы кәңәш ваҡытында алынмай ҡала.

"Мин хакимиәт башлыҡтарын эшләргә мәжбүр итәм, тармаҡҡа кадрҙар йәлеп итеү менән үҙем шөғөлләнәм, ректорҙар менән һөйләшеүҙәр алып барам. Һөҙөмтәлә табиптар буйынса кире трендты туҡтаттыҡ, балалар поликлиникаларын япмайбыҙ, ә табипҡа эләгеү күрһәткесе насарая. Эшләп еткермәйһегеҙ. Мине был мәғлүмәт ҡәнәғәтләндермәй. Әгәр проблеманың айышына төшөнөп, хәл-торошто туҡтатмаһағыҙ, һеҙҙең менән хушлашырға тура киләсәк. Ошо квартал эсендә тәртип булдырыуығыҙҙы - баш табип пьедесталынан төшөп, ваймыһыҙ белгестәр менән аңлашыуығыҙҙы, эште һөҙөмтәле ойоштороуығыҙҙы һәм закон буйынса бурыстарығыҙҙы башҡарыуығыҙҙы талап итәм", - тип ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе Забелиндың сығышын тыңлағандан һуң БР Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров.

Сәләмәтлек сәғәтендә шулай уҡ дарыуҙар һатып алыу эшмәкәрлеген оптималләштереү мәсьәләһе лә ҡаралды. Мониторинг йомғаҡтары дауалау препараттарына, медицина изделиеларына, төрлө медицина учреждениелары буйынса хаҡтарҙың төрлөсә булыуын асыҡлаған. Шуға бәйле, заказдарҙы берләштереп, продукцияны бер төрлө, кәмерәк хаҡҡа алыу мөмкинлеген булдырыу, шулай уҡ төрлө коррупцион схемаларҙы ҡулланыуға кәртә ҡуйыу өсөн берлектәге аукциондар үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Дауаханаларҙа, поликлиникаларҙа капиталь ремонт үткәреү ваҡыттары ла яҡшы ҡараш талап итә. Был маҡсатта Башҡортостан бюджетынан 1,2 миллиард һум бүленгән. Ҡайһы бер медучреждениелар йә ваҡыт буйынса һуңға ҡала, йә капиталь ремонт үткәреүгә тейешенсә ҡарамай.

Радий Фәрит улы шулай уҡ һаулыҡ һаҡлау учреждениеларының "ҡыуыҡ" кеүек тултырылған административ штатына ла иғтибар йүнәлтте. Бөгөн штат расписаниеһында баш табиптарҙың 420 урынбаҫары бөрәмегә ҡаралған. Ҡайһы бер дауаханаларҙа уларҙың һаны хатта 9 кешегә етә. Был штаттарҙы оптималләштергәндә 176 баш табип урынбаҫары штаты ҡыҫҡартыуға эләгә һәм медицина хеҙмәткәрҙәренә түләү өсөн 78 миллион һумдан ашыу сумма экономиялана. Медицина учреждениеларындағы оптималләштереү эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә вазифаһынан түбәнәйтелгән медицина белеме булған урынбаҫарҙарға табип вазифалары тәҡдим ителәсәк.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Республика етәкселегә алышынып, бер аҙ хәҡиҡәт эҙләнә башлағас, инцидент системаһына зарлы ялыуҙар яуа башланы, әммә күптәр һаман да ҡурҡыу тойғоһо менән йәшәй. Ләкин фекерҙәрен аноним булһа ла социаль селтәрҙәргә һалыусылар ҙа бар. Түбәндә шундай аноним мөрәжәғәттәрҙең бер миҫалы. "Өфө районының 21-се дауаханаға ҡараған поликлиникалары, амбулаториялары тураһында яҙырға теләйем, - ти авторы. - Етәкселеккә беҙҙең райондың медицина тороштo бар ни, юҡ ни. Улар табиптарҙың эш хаҡы - 60, урта медицина персоналыныҡы 30 мең һум тип отчет бирә, ғәмәлдә, табиптар - 30-35, шәфҡәт туташтары 17-18 мең һум эш хаҡы ала. Ауыл түләүҙәрен алыуыбыҙға һылтанып, стимуллаусы түләүҙәрҙе алып ташланылар. Әммә ауылда йәшәгән өсөн түләү - айына 2 мең һум. Бүлек мөдирҙәренә өҫтәмә түләү ҙә ни бары 2 мең һум! Килешеү буйынса ауылда йәшәгән өсөн дә, стимуллаусы түләүҙәр ҙә бирелергә тейеш. Һөҙөмтәлә, ауылда эш хаҡын ҡалаға ҡарағанда күпкә әҙерәк алалар. Әлбиттә, шундай айырмалыҡ булғанда медицина университетын тамамлаған йәштәрҙең күбеһе медицинала эшләргә теләмәйәсәк.

Участкала норма буйынса бер терапевҡа 1700 кеше тура килә (ауыл ерендә - 1300), ғәмәлдә бер белгес 2 меңдән ашыу кешене хеҙмәтләндерә, шул уҡ ваҡытта уларға өҫтәмә түләүҙәр ҙә, яңы ставка ла бирелмәй. Ул ғына ла түгел, ҡағыҙ, елем, ручка, блокнот - барыһын да үҙ аҡсаңа һатып алырға тура килә. Хатта тейешле күләмдә медицина изделиялары бүленмәй, дарыуҙар, медицина бирсәткәләре, шприцтар юҡ, анализға ҡан алыу үҙе бер проблема - йылына биохимик анализ өсөн 2 мең генә пробирка бирелә. Уның 1200-ө - план буйынса вичскринингы алыуға. Ҡалған 800-ө - хроник сирлеләргә, инвалидтарға, операцияға әҙерләнеүселәргә. Пробиркалар етмәй, етәкселек биохимик анализ тапшыртмаҫҡа ҡуша, ә кешеләрҙе нисек дауаларға? Әгәр дарыуханала ниндәйҙер препарат 100 дананан кәм икән, уларға рецепт яҙыуҙы тыялар. Яҙып та, дарыуҙар етешмәгәнлектән, пациент уны алып өлгөрмәй икән, рецепт ваҡыты оҙайтыла, йәғни пациент препаратты алыуға сиратҡа ҡуйыла, ә табип бының өсөн 21-се дауаханаға аңлатма яҙырға тейеш. Махсуслашҡан белгестәргә ҡабул итеүгә яҙып булмай, ультратауышлы тикшереүгә талондар бирелмәй. Пациенттар тикшереүҙәрҙе аҡса түләп үтә. Көндөҙгө стационарҙа система ҡуйыу өсөн препараттар юҡ, етәкселек көндөҙгө стационарға йөрөүселәрҙе таблеткалар менән дауаларға ҡуша..."

СӘЙӘСИ КҮҘӘТЕҮ



**Украина яңы президент һайланы. Һайлауҙың һөҙөмтәһе бер кемде лә аптыратманы, сөнки күптән үк был алышта Зеленскийҙың еңәсәге көн кеүек асыҡ ине. Ә тәүҙәрәк юмор артисының үҙ кандидатураһын ҡуйыуына тик көләмһерәп кенә ҡарайҙар һәм уның ниндәй ҙә булһа уңышҡа өлгәшеүенә ышанмайҙар ине. "Йылғаны аша һикереп сыҡмайынса "һоп" тип әйтмәй тор", тиеүҙәре тап ошондай ситуацияға ҡағылалыр инде.**

# УКРАИНАЛА...

## яңы башлыҡ

Порошенконың власҡа ниндәй юл менән килеүен барыһы ла хәтерләй. Кеше ғүмерҙәре өҙөлгән Майҙандың эҙемтәләрен Украина әле булһа үтеп сыға алмай. Һәм бындай ҡанлы ваҡиғаның хәтерҙән сығыуы мөмкин дә түгел. Ошо һәм ил менән етәкселек иткән осорондағы башҡа ҡылыҡтары үҙенең халҡы алдында ғына түгел, ә уға кураторлыҡ күрһәткән башҡа илдәр алдында ла дәрәжәһен түбән төшөрҙө. Ни тиһәң дә, тотош ил менән идара итеү уйын түгел шул.

Шулай итеп, Зеленский еңеп сыҡты. Әйтергә кәрәк, был еңеү өсөн уға хатта ниндәйҙер ҡиммәтле кампаниялар үткәреү ҙә, ялҡынлы телмәрҙәр менән сығыш яһау ҙа кәрәкмәне. Уның өсөн барыһын да оппоненты Петр Порошенко үҙе эшләне. Ни өсөн тигәндә, уның һайлау алдынан алып барған эшмәкәрлеге үҙенең һөҙөмтәһеҙлеге, уйланылмаған булыуы һәм сәйәси кимәлдәге тәртипһеҙлеге менән күҙгә ташланып торҙо. Быны хатта әлегә тиклем уның яғында булғандарҙың да күбеһе аңланы һәм етеҙ рәүештә ҡаршы яҡ командаға күсә башланы. Ә эргәһендәгеләрҙе лә ышандыра алмаған кеше тотош ил халҡын нисек үҙ һүҙҙәренә инандыра алһын инде.

Украина, Донбасс һәм Луганск халыҡ республикалары, Рәсәй генә түгел, ә тотош донъя артабанғы ваҡиғаларҙың ниндәй юлдан китеүен күҙалларға тырыша. Ә уны аныҡ ҡына әйтеп булмай. Ни тиһәң дә, Владимир Зеленский сәйәси аренала яңы кеше. Уның һәм артында торғандарҙың башында ниндәй уйҙар ҡайнауын аңлауы ауыр. Зеленский президент булып һайланғас та тәү сиратта Рәсәйҙә ҡулға алынған моряктарҙы ҡайтарыу һәм Мәскәү менән мөнәсәбәттәрҙе яйлау буйынса шөғөлләнәсәге тураһында белдергәйне. Донбастағы конфликтты "көслө мәғлүмәти көрәш" менән хәл итәсәге тураһында ла әйтеп ысҡындырғайны. Шулай ҙа уның Донбасс һәм Луганск халыҡ республикалары халҡын "әҙәм аҡтыҡтары" тип атауы был йәһәттән әллә ни ҙур өмөттәр бағалау урынһыҙ икәнлегенә ишаралай, буғай.

Владимир Зеленский йәш әле. Ә йәштәрҙең ни тиклем ҡыҙыу ҡанлы булыуы һәм "Ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫ" тигән мәҡәлде әллә ни һанға һуҡмауы барыһына ла мәғлүм. Ләкин ул йәш кенә түгел, ә аҡыллы ла. Шуға күрә уның иле һәм халҡы өсөн хәүефле буласаҡ аҙымдар эшләмәйәсәгенә ышанырға урын бар. Ил нисә йыл барған граждандар һуғышынан арыған, йонсоған һәм бөлгән. Уны кире аяҡҡа баҫтырыу өсөн көстө күршеләр менән низағлашыуға түгел, ә ил иҡтисадын яҡшыртыуға ташларға кәрәк икәнен яҡшы аңлай яңы президент. Үҙенең генә башы етмәһә, уның артында торған ҙур бағажлы сәйәсмәндәр һәм эшҡыуарҙар төшөндөрөп бирәсәк. Ләкин ошо уҡ күләгә аҫтында булған, әммә ысынбарлыҡта бөтә ваҡиғалар менән идара иткәндәр быға тиклем алып барылған сәйәсәтҡә тағы ла ҡуҙ өҫтәп ебәрергә лә мөмкин. Тимәк, артабанғы ваҡиғаларҙың нисек ҡабарыуын аныҡ ҡына әйтеүе ауыр. Ләкин һәр яңы башланғыстың һөйбәт эҙемтәләргә алып килеүенә ышанырға кәрәктер. Ваҡыт күрһәтер.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һоло бутҡаһы

❖ Был бутҡа матдәләр алышыныуын яҡшырта, эсәктәге файҙалы бактериялар тигеҙлеген булдыра. Еңел үҙләштерелә, ашҡаҙан стенаһын тотош ҡаплап алып, ундағы ауыртыуҙарҙы баҫа, тәндәге зыянлы матдәләрҙе сығара.

❖ Һоло бутҡаһында тире торошон яҡшыртыусы Н витамины бар, ә В төркөмө витаминдары төрлө ауырыуға бирешеп барыуҙы, тире ҡыҙарыу, ялҡынһыныуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә.

❖ Бутҡаны 10-15 минут эсендә әҙерләргә мөмкин, ныҡ файҙалы булһын өсөн йогурт һалып, 1-2 сәғәт торорға кәрәк.

### Тары бутҡаһы

❖ Тарыла витамин күп түгел, әммә унда башҡа ризыҡтарҙа һирәк осраған матдәләр - һөйәк һәм тештәр төҙөлөшө өсөн файҙалы ҡомташ бар.

❖ Марганец матдәләр алышыныуын яйлай. Баҡыр мускулдарҙы һығылмалы итә.

❖ Шулай ҙа иң мөһиме - тары ярмаһы организмды калийға һәм РР витаминына байыта. Был витаминдар йөрәк эшмәкәрлегенә ярҙам итә, ҡан тамырҙарына яҫы төйөрҙәр ултырыу ҡурҡынысын кәмета.

❖ Тары ярмаһы холестеринды кәметә, ҡан тамырҙарын таҙарта.

❖ Тары бутҡаһы файҙалы, тик ул эс ҡатыуға килтерергә мөмкин. Артыҡ ашау ауырлыҡты арттыра. Тарыла әсе матдәләр күп, шуға ла бутҡаны оҙаҡ һаҡлап булмай. Самалап ашау кәрәк.

### Быуын, һеңер өсөн

❖ 1 ҡалаҡ йондоҙаҡ (звездчатка) үләненә 1 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойоп, термоста 10-15 минут төнәтергә, термос ҡапҡасын япмаҫҡа. Һыҙлаған урындарға төнәтмәне һөртөү менән бер рәттән, көнөнә 4 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

**Көньяҡ-көнсығыш балаҫтары буй балаҫ тип атала. Улар төрлө төҫтә һуғылған нигеҙҙәрҙән буй-буй биҙәктәр һалына, шуға ла башҡа төр балаҫтарҙан айырылып тора. Бөгөн аҫалы балаҫтарға иғтибар көслө, ә бына буй балаҫтар онотолдо.**

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

Буй балаҫ өсөн айырым-айырым һуғылған нигеҙҙәр буйғау тип атала. Арҡау өсөн ике ҡатлы киндер еп ҡулланылған, уға ҡайһы саҡта кәзә ҡылы өҫтәлгән. Һөҙөмтәлә буй балаҫ ялтырап торған.



*Йәйләүгә килгән ҡунаҡтарҙы балаҫ йәйеп һыйлағандар. Башҡортостанды өйрәнеү буйынса йөмғиәт материалдары буйынса. 20-се йылдар аҙағы.*

Таҙа йөндән генә һуғылған балаҫтар ҙа булған. Балаҫ һуғыусының оҫталығы иң тәүҙә буйлау һуғыуҙа күренгән. Тап ошо мәлдә төҫлө буйҙарҙың тәртибе билдәләнгән.



*Ауыл өйөндә балаҫтар һәм кейеҙҙәр. Белорет районы Баҡый ауылы. 1977 йыл*

Боронғо балаҫтарҙа аҡ-ҡара-һоро йәки аҡ-һоро төҫтәрҙе ҡулланыу йыш осрай. Ҡайһы саҡта был төҫтәр ҡыҙыл йәки һары буй менән йәнләндерелеп ебәрелгән. Ошондай балаҫтарҙың береһен 1907 йылда Беренсе Эткол ауылынан Руденко Рәсәй этнография музейына алып киткән. Ул тәбиғи асыҡ һәм һоро төҫтәр һәм буялған ҡыҙыл йөнептән һуғылған. Бер төҫтәге нигеҙҙе икенсеһе алыштырған мәлдә килеп сыҡҡан биҙәктәр - "баҫҡыс"тар, "сылбыр"ҙар тип атала.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ХӘТЕРКИТАП*



**Мин 1982 йылда тыуғанмын. Бәләкәй саҡтан атай-әсәйемде, туғандарымды, әммә уларҙан да бигерәк Ленин бабайҙы яраттым. Мәктәпкә төшөргә өлгөрмәгән балала "ҡыҙыл хәрәкәттең" юлбашсыһына оло мөхәббәт ҡайҙан килгән, әлегә тиклем аңлай алмайым. Күрәһең, атайым, олатай - өләсәйемдән, ололар һүҙенән, телевизорҙан алғанмын был мәғлүмәтте. Кис ятыр алдынан, әкиәт урынына Ленин тураһында һөйлә, тип ҡаңғырта инем өйҙәгеләрҙе. Владимир Ильичтың фотоларын бик ҡәҙерләп һаҡлай инем, бигерәк тә кескәй сағындағы бөҙрә сәсле, йылмайып торған рәсемен яраттым. Һин әлдә генә тыуғанһың, булмаһаң, мин дә ҡот оскос хәйерсе булып йәшәр инем, тип, уға рәхмәттәр уҡый, эс серҙәремде һөйләй инем. Ахыры, балалыҡ аңымда Ленин Алла дәрәжәһенә күтәрелгән булған.**

# ИҢ МАТУР ӘКИӘТ...

## Ленин бабай ине

Әле һаман күрше ҡыҙы "Һин кулак", тип үсекләгәс, әсенеп, "Юҡ, мин-крәҫтиән", тип һамаҡлай-һамаҡлай илағаным, атай-әсәйгә ҡайтып ошаҡлашҡаным хәтерҙә. "Кулак"тың бар мәғәнәһен аңлап бөтмәһәм дә, ул минең өсөн иң насар һүҙ ине.

Иң матур әкиәт - ул атайымдың коммунизм тураһында һөйләүе булды. Ул ваҡытта бөтә нәмә бушлай, аҡса кәрәкмәйәсәк, бөтә кеше бәхетле, эшләмәйенсә йәшәйәсәк, тигәнгә ышана инем. Мин коммунизм менән бәйле хыялдарым иҫ киткес күп һәм ҙур ине. Ул көндәр бик яҡын тойола: иртәгә, йә иртәнән һуң, мин йоҡонан тороуға, коммунизм етер кеүек. Хыялдар хыял булып ҡалды, әммә аҡсаға булған кире мөнәсәбәт артымдан ҡалмай, эйәреп йөрөй. Тере аҡсаларҙы ҡабул итеүе ауыр, әлдә кредит карталар бар. Күрәһең, улар миңә хыялымдың бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаясағын иҫкәрткән кеүектәр.

Мәктәпкә төшөп, уҡый башлағас, иң тәүҙә балалар өсөн яҙылған Ленин тураһындағы китаптарҙы уҡып сыҡтым. Әктябряттар сафына алынған көндә күңелемдә ҡайнаған хистәрҙе бөгөнгөләй хәтерләйем. Түшемдә балҡыған ҡыҙыл йондоҙҙо, бөтәһе лә күрһен, тип, һалҡын һауа торошона ҡарамай, куртка төймәләрен элмәй, шапкамды ҡулыма тотоп, яланбаш йүгереп ҡайттым.

Һуңынан пионерға инеүҙе түҙемһеҙлек менән көтә башланым. Әсәйемдән илап тигәндәй аҡ күлдәк, гармунлы зәңгәр юбка, ҡыҙыл пилотка әллә ҡасан алдырып ҡуйҙым. Тик пионерға алынмайынса, уларҙы кейеп йөрөп булмай шул. Ни эшләптер вәғәҙә ителгән көндө, түҙемһеҙлек менән көтҡән тантананы кисектерҙеләр. Пионерия бөтәрәлә икән, тигән хәбәр ҡолаҡҡа сала-сарпы ишетелеп, йөрәккә шом һалды. Лениндың тыуған көнө, 22 апрелдә, пионерҙар сафына ҡабул итербеҙ, тип тынысландырҙы уҡытыусыбыҙ. Минең ғүмеремдә мөһим урын алырҙай иҫтәлекле ваҡиға беҙҙең синыфты урап үтте. Нисә тапҡыр үтекләп өлгөргән ҡан ҡыҙыл галстук етемһерәп кейем шкафында ятты.

Шул йыл ағайым көләш алды. Ҡыҙ янына барырға әҙерләнгән туйсылар янында мин дә буталып йөрөйөм. Бәй, ағайымдар йәлпелдәтеп бер йәшник араҡыны машинаға алып китеп баралар. Ә аҡ араҡы шешәһе баштарында минең пионер галстугымдан киҫкеләнгән ҡыҙыл таҫмалар, елгә тартҡылашып, бәлки, шундай мөнәсәбәткә ғәрләнеп, ярһып елпелдәй. Уларға оҙаҡ ҡарап торҙом, шул арала күңелемдә бөтә нәмә әйләнеп, баш түбән торҙо. Ҡапыл бер-нисә минут эсендә барыһын да аңланым шикелле - мин ҙурайҙым. Галстугымдың ҡыҙыл телдәре аҙаҡҡы тапҡыр, хушлашҡандай, моңһоу елпенделәр ҙә тынып ҡалдылар. Мин мал аҙбарына кереп, күңелем бушағансы, күҙҙәрем шешкәнсе, үкһеп иланым.

Шул ваҡиғанан һуң күңел төбөндә ниңәлер өҙөлдө. Һәр бер нәмәгә һаҡ ҡарай башланым, ниңәлер оло кешләргә булған ышаныс тойғоһон юғалттым. Кемдер мине һатҡан кеүек, үҙемде алданған итеп тойҙом.

Йылдар барыһын да үҙ урынына ҡуйҙы. Тормош асылына йәйлап-йәйлап төшөнә лә башланым. Ләкин аҡланмаған хыял, киләсәк өсөн булған үпкә ҡайһы саҡ ҡуҙғалып ҡуя. Бигерәк тә үҫмерлек осоронда, үҙем таяныр рухи ҡиммәттәрҙе, үҙ-үҙемде эҙләгәндә, тормошта юл һайлағанда ауырға тура килде. Киләсәк шул тиклем томанлы, ә атай-әсәйҙәр үткән юл ялған булып сыҡты. Матбуғатта, телевизорҙа кем нимә теләй, шуны яҙҙы, һөйләне. Буталсыҡ юлдарҙан күңел һорағанын, дөрөҫөн һайлауы, ифрат ҡыйын шул. Төн уртаһында һуҡыр шәм менән яҡтылыҡ эҙләгәндәй, абына - һөрөнә, һәрмәнеп, кескәй генә баҙлауыҡҡа ынтылаһың да ынтылаһың.

Шул ваҡытта ниндәйҙер көс менән ҡан-тамырҙарымда, асылымда һаҡланған атай-олатайҙарымдың рухы телгә килеп, милли аңымды, башҡортлоғомдо терелтте. Халҡымдың хәтер һандығында һаҡланған ҡиммәттәрҙе, йәшәйеш ҡанундарын эпостар, риүәйәттәр, легендалар, йыр-моңдар, төрлө арҙаҡлы шәхестәр яҙмышын бәйән итеүсе китаптар аша берәмтекләп үҙ йөрәгемә һеңдерә башланым. Бөгөн, Аллаға шөкөр, эҙләнеүҙәремдең һөҙөмтәһе - үҙем һайлаған, башҡа берәүҙекенән күсереп алынмаған, оҡшамаған, тик минеке генә булған үҙ юлым бар. Үҙ тормошомдоң хужаһы мин!

**Ләйсән ИСҠУЖИНА.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# БЕҘҘЕҢ БАҠСАЛА...

**Сабый балаларға ниндәй өлгө бирәһең, ниндәй эштәргә өйрәтәһең - ул шуны ҡабатлай. Беҙҙең балалар баҡсаһында, ошо хәҡиҡәтте алға һөрөп, балаларҙы изге эштәргә әйҙәүҙең төрлө алымдарын уйлап сығарабыҙ.**

Күптән түгел, ҡышҡы айҙарҙа, беҙҙең балалар ҡоштарҙы хәстәрләп, ата-әсәләре менән берлектә тағараҡтар эшләп, уларҙы баҡсалағы ағастарға элеп ҡуйҙы.Ошо ябай ғына күренгән эште кескәй бала күңеле оло итеп ҡабул итте, күңелендә ҡоштарға һаҡсыл ҡараш, тәбиғәткә һөйөү кеүек хистәр нығыны.

Беҙҙең ауылдың балалар баҡсаһында ике төркөм бар - "Ҡояшҡай" тигән өлкәндәр һәм "Кәрәҙ" тигән кескәйҙәр төркөмө. Минең "Кәрәҙ" төркөмөндә барлығы егерме бала иҫәпләнә. Быйылғы йылда кескәй балаларымдың ҡустылары, һеңлеләре тыуыуы беҙҙең өсөн бик ҡыуанmaslы ваҡиға булды. Рамаҙан тигән малайымдың яңыраҡ ҡына - һеңлеһе, Лиана исемле зирәк, аҡыллы ҡыҙҙың - игеҙәк ҡустылары, Әлфинәнең - ҡустыһы, ә Айдинә, Азалия тигән ҡыҙҙарҙың ғаиләһендә тағы бер ҡыҙ бала тыуҙы. Тағы ла бер нисәүһенең ғаиләһендә ошондай ҡыуанысы ваҡиға көтөлә. Тимәк, беҙҙең балалар баҡсаһына тағы балалар өҫтәләсәк, ауылыбыҙ һүнмәйәсәк, тормош дауам итәсәк, тигән өмөт менән йәшәйбеҙ.



Ә мин ошо сабыйҙарға башҡорт йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәтеп, матур-матур әкиәттәребеҙҙе сәхнәләштереп, милләтебеҙҙең ғорурлығы булған милли кейемдәребеҙ серҙәренә төшөндөрөп, барлыҡ көсөмдө ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлауға, атай-әсәй абруйын үҫтереүгә, кескәй сабый балаһың илһөйәр, телһөйәр булып үҫеүенә булышлыҡ итеүгә, башҡорт балаһының саф башҡорт телендә һөйләшеүенә һаласаҡмын. Был минең төп йәшәү маҡсатым.

**Рәғиҙә ӘХМӘТШИНА,**
**Баймаҡ районы Төркмән ауылы балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.**

✓ *Өфө-II ҡаласығы ҙур, быуаттар буйы йәшәгән, административ, сауҙа, һөнәрселек үҙәге, Урал-Волга буйы төбәге тарихының үҙәк пункттарының береһе булып торған.*



ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# ДОНЪЯ ҒАЛИМДАРЫ ЛА...

## Өфө-II ҡаласығының йәшен таный



### Ҡараҡая ҡалаһы хәҙерге Өфөгә тап килә

Иҙрисиҙең картаһы буйынса, Өфөгә бигерәк тә Ҡараҡая ҡалаһы тап килә. Ул Атил, йәғни Ағиҙел йылғаһына ҡойған, уның уң яҡ ҡушылдығы Ҡариҙелдә хәтерләткән урында билдәләнгән. Дөрөҫ, Өфө тип күҙалланған Ҡараҡая ҡалаһы хаталыҡ менән Ағиҙелдең уң яҡ түгел, һул яҡ ярында урынлаштырылған. Бында, әлбиттә, бер ваҡытта ла Башҡортостанда булмаған авторҙы ғәфү итергә мөмкин. Иҙриси: "Ҡараҡая - ағас өйҙәрҙән һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала, - тип яҙа. - Булғарҙар уларҙа даими баҫымсылыҡ яһап тора. Уларҙың араһы - 16 аралыҡ һәм улар араһында даими туҡтауһыҙ һуғыш бара..." Әгәр бер көнлөк аралыҡты 40 километр тип алғанда, Ҡараҡая ҡалаһы һәм булғарҙар араһы 640 километр тәшкил итә. Был Өфө менән Татарстандағы хәҙерге Булғар ҡалаһы араһына яҡын. Шулай итеп, Өфө-II археологик ҡомарткыһы Иҙриси үҙенең яҙмаларында яҙған Ҡараҡая ҡалаһына ниндәйҙер кимәлдә тап килә, тип раҫларға мөмкин.

XIII быуатта Башҡортостан Алтын Урҙа составына инә. Мәғлүм булыуынса, монгол хандары, ҡағыҙа булараҡ, яулап алынған илдәрҙең эске эштәренә ҡыҫылмай, уларҙан бары тик яһаҡ түләүҙе һәм кәрәк булғанда һуғыш алып барыу өсөн ҡоралы ополчение ғына талап итә.

### Башҡорт ҡалаһы: ыңғай һәм кире фекерҙәр

Көнсығыш Европаны берҙәм дәүләткә берләштергән Алтын Урҙа дәүерендә уның территорияһы буйлап сәйәхәт итеү быға тиклем булған быуаттарға ҡарағанда киң тарала. Батый батшалығына бөтөн донъянан сауҙагәрҙәр килә, ә генуэз негоцианттары Урҙала йәнлек тиреһе һәм бик күп сауҙа фактураһы табыуға концессияға эйә була. Күрәһең, тап уларҙың мәғлүмәттәре буйынса 1367 йылда бер туған Пициганиҙарҙың картаһы барлыҡҡа килә. Унда Кама йылғаһынан көньяҡ-көнсығышҡа табан "таҙа яланда" Пашкерти ҡалаһының пунсоны (шартлы билдәһе) күрһәтелә. Ваҡыт үтеү менән уның урынлашыу урыны аныҡлана. 1375 йылға Каталон атласында атап үтелгән ҡала Ағиҙел тип күҙалланған йылғаның һул яҡ ярында күрһәтелә. Пашкерти тағы ла анығыраҡ итеп билдәле фламанд картографы Герард Меркаторҙың картаһында күрһәтелә. Ул тап хәҙерге Өфө - Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙә урынлашҡан. Меркаторҙың атласы 1595 йылда автор вафат булғас донъя күрә. Әммә уға ингән карталар XVI быуаттың 30-70-се йылдарында, йәғни 1586 йылда рус ҡәлғәһе Өфө барлыҡҡа килгәнгә тиклем төҙөлә. Шулай итеп, Меркатор бер нисек тә Пашкертиҙы рус Өфөһө менән бутай алмай. XIV быуаттың ғәрәп ҡамуссыһы Ибн Халдун Алтын Урҙаны һүрәтләп, былай ти: "Үрҙә Сыңғыҙхан ошо дәүләтҡә нигеҙ һалыусы, уның Душы-хан (Джучи) исемле улы бар һәм ул батша, тип белдерелгәйне. Был батшалыҡ төньяҡта Хорезмдан Яркенда, Соғда, Һарайға, Маджар, Арран, Сарҙаҡ (Судак), Булғар, Башкурд һәм Джулманға тиклем. Был батшалыҡтың сигендә Ширван ҡалалары араһында Баҡы һәм уның эргәһендә Демир Капу (Дербент) тип аталған тимер ҡапҡалар бар". Нияз Мәжитов фекеренсә, атап үтелгән пассажда Башҡорт ҡалаһы, йәғни көнбайыш Европа карталарындағы Пашкерти ҡалаһы телгә алына. Урта быуаттарҙа ҡаланың этник өҫтөнлөклө халыҡ атамаһы буйынса йөрөтөләүе ғәжәп түгел. Волга Булғарының баш ҡалаһы ул ваҡытта Булғар тип аталыуын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Ул ваҡыттағы биләр ырыуының Биләр тип аталған ҡалаһы була. Хәҙерге сыуаштарҙың атаолаталары булған сувар ырыуының Сувар тигән ҡалаһы була. Мордвамокшаларҙың Мокша ҡалаһы була. Н. Мәжитовтың оппоненттары сығанаҡтарҙа биләмә түгел, ә Башҡортостан тигән географик атама тураһында һүҙ бара, тип, Башҡорт ҡалаһының булыуын инҡар итә. Уларҙың кеме хаҡлы икәнен ваҡыт күрһәтер. Әммә Урта быуат Башҡортостанда ҡалаларҙың, шул уҡ Намджан ҡалаһы булыуы факты - шикһеҙ. Шулай уҡ Өфө-II ҡаласығы урынында борон ҡала булыуы ла шик тыуҙырмай. Ул нисек аталғандыр - Ҡараҡаямы, Башҡортмо, Түрә-таумы йәки Өфөмө - артабанғы тикшеренеүҙәр предметы булып тора. Уның сәскә атыу осоро VII-XII быуаттарға тура килә. Монгол баҫмасылығы һөҙөмтәһендә ҡала йәйлап бөтә бара. Һуңғы һөжүмде уға 1389 йылда Башҡортостан буйлап ут һәм ҡылыс менән үткән Тамерлан яһай.

Һығымтала Өфө-II ҡаласығының фәнни әһәмиәте буйынса эксперт советының 2007 йылда ҡабул иткән резолюцияһынан өҙөмтәләр килтерәйек:

1) Өфө-II ҡаласығы уникаль археологик һәйкәл булып тора, уның әһәмиәтен соҡор артынҙағы ҡәберлек тағы ла көсәйтеп ебәрә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламы 4 метрға етә, был факт һәйкәлде Көнсығыш Европалағы шуға оҡшаш һәйкәлдәр араһында айырып тора.

2) Ҡаҙыныу һөҙөмтәһендә асылған археологик объекттар монументаль архитектура ҡоролмалары категорияһына ҡарай. Ҡаланың һаҡ өсөн тәғәйенләнгән диуары һәйкәл эшләгән осорҙоң иртә этабында төҙөлгән, алдан күҙалланған проект буйынса күтәрелгән һәм ұҙаллы үҙенсәлекле хәрби-фортификацион мәктәп булыуын раҫлай.

Шулай итеп, Эксперт советы ағзалары билдәләр комплексы буйынса беҙҙең эраның IV-XV-XVI быуаттарына ҡараған Өфө-II ҡаласығының юғары фәнни һәм мәҙәни әһәмиәтендә шикләнмәй. Өфө-II ҡаласығы ҙур, быуаттар буйы йәшәгән, административ, сауҙа, һөнәрселек үҙәге, Урал-Волга буйы төбәге тарихының үҙәк пункттарының береһе булып торған.

Эксперт советы ағзалары: Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, профессор, ТР Фәндәр академияһының баш ғилми хеҙмәткәре **Ф.Ш. Хузин** (Ҡаҙан); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының Урта быуат археологияһы төркөмө мөдире, профессор, тарих фәндәре докторы **И. Л. Кызласов** (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Сүрия археология экспедицияһының начальнигы урынбаҫары, тарих фәндәре докторы **Ш. Н. Әмиров** (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының һаҡланыусы ҡаҙылмалар бүлегенең Мәскәү эргәһе экспедицияһы начальнигы урынбаҫары, археометаллургия буйынса халыҡ-ара төркөм ағзаһы, тарих фәндәре кандидаты **И. А. Сапрыкина** (Мәскәү).

Эксперт советының резолюцияһына Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты директоры, академик **Н. А. Макаров** ҡултамғаһын һала. Йәғни **илдең әйҙәүсе археологтары Өфө-II ҡаласығын донъя әһәмиәтендәге һәйкәл тип таный, ә Башҡортостандың ҡайһы бер тарихсылары - юҡ.** Уларҙың ҡайһыһы шарлатан - үҙегеҙ һығымта яһағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.

(Башы 16-сы һанда. Аҙағы).

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

# БАШҠОРТ

Шул уҡ ваҡытта уларҙың Ғайса ғәләйһиссәләм тыуған замандарҙа уҡ бөгөнгө өлкәләрендә йәшәүҙәрен Птолемей географияһында (III, 5, 22 һәм IV 14, 9, 11)

Παγυσιται, Γηουιινοι, Ταβινοι, Βοσουςχοι, Σονβηνοι

(пагарите, гиуйни, тавини, воруски, соновини) рәүешендә яҙылған исемдәрҙә башҡорт һәм уның ғәйнә, табын, бурас һәм һыуын ырыуҙарының исемдәренә оҡшатып фараз итә алабыҙ. Башҡа яҡтан башҡорттарҙың ватаны Урал өлкәһендә булыуын Енисей ҡырғыҙҙарының ата-бабалары тураһындағы легендалар (Зәки Вәлиди Туған. Ибн Фаҙлан. 187-се, 327-се биттәр) һәм Уғыҙ дастаны (ҡарағыҙ: Рәшитәтдин. Париж, Милли китапхана. Фарс. 1364, 134-се (а) бит) раҫлай. Башҡорт "биш уғыр" һүҙенән барлыҡҡа килгән. Әммә Иран легендаларында таралған Хазар диңгеҙенең төньяғында гурксер (ҡорт (бүре); баш) исемле бер ҡәүемдең йәшәүе хаҡындағы риүәйәт был исемдең тирәһендә барлыҡҡа килгән ҡорт (бүре); баш > баш ҡорт (бүре) кеүек халыҡ этимологияһының бик боронғо булыуын күрһәтә. Юрматы һәм йәнәй исемле башҡорт ырыуҙары венгрҙар өҫтөнән хаким иткән төрки ырыуҙар араһында булған. Бынан тыш, уларҙың тағы XIII быуаттың тәүге яртыһында венгрса һөйләшкән һәм тик монголдар заманында ғына төркиләшкән венгрҙар булыуы хаҡындағы ҡараштар (Ҡарағыҙ: G. Nemeth, Magna Hungaria, s. 95. КСА, III, 73) Мәхмүт Ҡашғариҙың башҡорт һәм йәмәктәрҙең, йәғни төньяҡ ҡыпсаҡтарҙың телдәре бер-береһенә яҡын булыуы хаҡында бирген мәғлүмәт юҡҡа сыға. Әйтергә кәрәк, Әбүлғәзи Баһадир хан башҡорттарҙың күпселеген ҡыпсаҡтар тәшкил итеүен һөйләү һәм Шәмсетдин Димашки (1327 йылда үлгән) монголдар заманындағы башҡорттарҙы ҡыпсаҡ ырыуҙары араһында һанап китә. Боронғо ғәрәп яҙыусылары башҡорт исемен башжирт (Истахри), башгирт (Ибн Фаҙлан) рәүешендә яҙған кеүек, "Ходуд-әл-ғәләм" (КСА, III, 52 һ.б.) "ҡыпсаҡтарға күрше булған мажгариә" һәм "аҙ һанлы ҡыпсаҡтарға күрше булған ягсун ясу" тип әйтеп үтә. Истахри башҡорттарҙың таулы, урманлы һәм эсенә үтеүе ауыр булған бер мәмләкәттә йәшәүҙәрен һәм был өлкә үҙәгенең, ул замандарҙа улар менән идара итеүсе болғар ырыуынан, 25 көнлөк алыҫлыҡта булыуын һөйләй.

Бируни иһә XIII быуаттан Урал тауҙарын Башҡорт тауҙары тип атай. Башҡорттарҙың диндәрен, әхлаҡтарын, характерҙарын һәм өлкәләрен үҙ күҙҙәре менән күреп тикшергән Ибн Фаҙлан 922 йылда хәҙерге Урал өлкәһендә, элек уғыҙ бейҙәре йәшәгән районда, Яйынды (хәҙерге Яуынды) йылғаһынан аша үткәндә, унда йәшәгән көньяҡ башҡорттарҙың һөжүменә ҡаршы әҙер булыуҙары, Кинәле һәм Суҡ йылғаларын үткәндән һуң, йәғни болғар сигенә яҡынлашҡас, башҡорттарҙың тирмәләренә тап булыуҙары хаҡында һөйләй. Был автор хәбәр итеүенсә, башҡорттар мәжүси булған һәм уларҙың араларынан мосолманлыҡты ҡабул иткән береһе ғәрәп илселәр делегацияһын оҙатып барған (Ҡарағыҙ: Ибн Фаҙлан, 35 һ.б. 147-156).

**(Дауамы бар).**

✓ *Ул Өфө урамында бәләкәй генә баланың әсәһе менән саф башҡортса һөйләшеп килеүен тыңлап барған. Унан был икәү 20-се ҡала башҡорт мәктәбенә боролоп ингән һәм тап уның синыфына уҡырға килгән.*



КИНӘЙӘ

# ТЫҢЛАМАҺАҢ...

## ғәйбәтсенең ҡараһы йоҡмаҫ

Урыҫтарҙың бер әйтеме бар: "Мир слухом полнится..." Быны башҡортсаға "Донъя буйлап ләстит йөрөй" тип ауҙарырғамы, әллә "Ғәйбәтсе йөрөй" тип атарғамы? Бына ҡала буйлап йөрөп йыйған ләстит ҡапсығын төйнәп, кемдәндер адресымды табып алып, өйөмә килеп инде бер ҡатын һыныбындағы ғәйбәтсе. Килеп инеү менән тәтелдәй ҙә башланы. "Быныһы былай икән... Теге кеше тегеләй икән... Мине бында ла, тегендә лә рәнйеттеләр... Бөтә донъяны яуызлыҡ ҡына баҫып алған икән... Һине баһалайҙар, ә мине баһаламайҙар..." Тиҙ генә сәй эсереп, һыйлап оҙатып ҡуйыйым был саҡырылмаған ҡунаҡты, тип, һыйлап та ҡараным, тик уға тағы ла хәл кереп, тағы ла ярһыбыраҡ һөйләй ҙә һөйләй. Хәҙер инде уның хәбәрен аңларлыҡ рәтем дә ҡалманы. "Ғәфү ит, ауырыйым, ҡайт инде бар өйөңә!" тип оҙатып, ишегемде ябып, ваҡытҡа ҡараһам, сәғәт киске 10-ды күрһәтә. Биш сәғәт буйы тәтелдәгән был әҙәмдән, исмаһам, бер бөртөк кенә булһа ла матур хәбәр ишетмәнем.

Ҡаланың бер осонан икенсе осона тиклем, һалҡын тимәй, эҫе тимәй, йөрөй ҙә йөрөй шулай был ләститсе ҡатын. Йәшерәк саҡта "Миңә килеп йөрөмә!" тип тыйып, уға бер хат яҙғайным, күренекле татар шағиры Һаҙый Таҡташтың "Сукин сын" тип аталған шиғырын да һалғайным: "Ғәйбәтсе, һиңә әйтергә теләгән бөтә фекерҙәрем ошо шиғырҙа әйтелгән", - тип тә өҫтәгәйнем. Тик ғәйбәтсе ауырыуы тотошлайы менән уялап алған был ҡатындың телен дә, күңелен дә, ҡыҫҡаһы, барлыҡ булмышын. Үпкәләй ҙә, ғәрләнә лә белмәй ул. Күп өйҙәрҙән ҡыуып тигәндәй сығаралар, ә ул һаман килә лә инә, килә лә инә шул.

Ә бит кескәй сағында ул төҫкә күптәрҙән матурыраҡ ине, мәктәп йылдарында яҡшыраҡ, еңелерәк уҡыуы менән айырылып торҙо. Тик тормош юлын гел хәйлә ҡороп, еңелерәк үтергә тырышты. Бына инде олоғайғас, ҡартлыҡ баҫа башлағас, нәфрәтен һөйрәп, өйҙән-өйгә дау күтәреп йөрөй ҙә йөрөй. Ә бит күптәр, олоғайғас, үткән ғүмер юлын байҡап, йә тәүбә итә, йә изгелек ҡылып йәшәүҙәренән ҡәнәғәтлек кисерә. Ә был әҙәм үҙенең ғәйбәтсе шөғөлөнән кинәнес таба, башҡаларҙың тормошон ағыулауҙан арынырға теләмәй. Уның менән аралашырға мәжбүр булғандан һуң бысраҡ һыуҙа ҡойонғандай хис ителә. Абау!

Тағы ла Һаҙый Таҡташтың шиғыры иҫкә төшә. Ул "Моҡамай" тип аталған һағышлы шиғырҙы кем генә белмәй:

*"Ә бит бергә сабаталар үреп йөрөгән саҡта,*
*Һин оҫтараҡ минән үрә инең,*
*Минең матур үрә алмауымды*
*Булдыҡһыҙлығымдан күрә инең...*
*Ник һуң был былай булды әле,*
*Нисек һәләкәтең күрмәнең,*
*Ник, Моҡамай, һуң һин тормошоңдо*
*Сабатаңдай матур үрмәнең!".*

Эйе, һәр кеше яҙмышты уңмышҡа әйләндереп, матур итеп йәшәй ала. Матур йәшәү һәр кешенең үҙенән тора, тип уйлайым мин...

Әйткәндәй, баяғы ғәйбәтсе килеп киткәндән һуң байтаҡ ваҡыт уның ҡара энергетикаһын тойоп йәшәнем. Ул энергетиканан нисек ҡотолғанымды ла һөйләйем әле. Бына бер саҡ почтала сиратта торабыҙ. Гәзит, журналдар һатыусы ҡыҙыҡай ҡайҙалыр китеп оҙаҡланы. Сиратта баҫып тороусы бер ир: "Пенсиялабыҙ бит, ваҡытыбыҙ күп, тик бына пенсияға сығыуыма ете йыл үтһә лә, эшкә китер алдынан иртәнге күнекмәләргә ваҡыт ҡалмаған икән, тип төш күреп уянам", - тип беҙҙе көлдөрҙө. Шул саҡ бер апай: "Ҡайҙа ул ете генә йыл, мин инде ун биш йыл пенсияламын, һаман да эшкә һуңға ҡалам икән тип ҡурҡып уянам", - тип көрһөндө. Был бәйләнсек төштәрҙе күптәр күрә. Ошо ун биш йыл пенсияла булып та эшкә һуңға ҡалырға ҡурҡып уянған апайға: " Һеҙ төшөгөҙҙө ҡағыҙға яҙығыҙ ҙа, ваҡ ҡына итеп йыртып, унитазға ағыҙып ебәрегеҙ, йә яндырығыҙ, - тинем. - Тик бына мин үҙем бәйләнсек кешеләрҙән нисек ҡотолорға икәнен белмәйем шул", - тигәйнем, ул ҡатын миңә: "Һарымһаҡ турап, шәм яндырып, доға уҡып, фатирығыҙҙы ул кешенең энергетикаһынан таҙартығыҙ", - тип кәңәш бирҙе. Шулайттым. Еңелерәк булып ҡалды...

**Айгөл АХУНОВА.**

**Бөгөн ҡалала ла башҡорт рухы көслө ул. Тик был һәр саҡ шулай булмаған. Беҙҙең милләттең ҡайһылыр быуынына көсөргәнешле замандарҙа ла милли үҙенсәлектәрҙе һаҡлап, үҙ асылында ҡалып йәшәү йылдарын кисерергә тура килгән. Быны хатта ниндәйҙер йәһәттә ҡаһарманлыҡҡа ла тиңләргә була. Шундай быуын вәкиле - табип-офтальмолог Урал Сәфәрғәле улы ЙӘНТҮРИН менән һөйләшәбеҙ.**

# БӨТӨН РУХИ ҠИММӘТТӘР ҘӘ...

## һинең йәнеңдә һаҡлана бит



**Өфөлә тыуған бала булараҡ, был урыҫлашҡан йәмғиәт кешеһе түгел икәнегеҙҙе ниндәй йәштәрҙә аңғара башланығыҙ?**

- Атай-әсәйебеҙ башҡорт ауылдарынан сыҡҡан интеллигенция вәкилдәре. Баш ҡалаға уҡырға килеп, ошонда төпләнеп ҡалған тәүге быуын башҡорттары. Ғаиләлә мин һәм бер һеңлем Өфөлә тыуғанбыҙ, бәләкәс һеңлебеҙ инде Сибай ҡалаһы ҡыҙы булды.

Телем башҡортса асылғандыр. Башҡаса булыуы мөмкин түгел, сөнки балалар баҡсаһына барғанда мин урыҫса аңламай инем. Баҡсала башҡортса һөйләшкән дуҫым булды, шуның менән уйнаныҡ. Тик һаман урыҫ теленә ылыҡманым әле. Хатта мәктәпкә лә бары тик башҡорт телле генә булып барғайным. Уҡытыусым Гөлкәй Сәлмән ҡыҙы әйтеүенсә (хәҙер мәрхүмә инде), ул Өфө урамында бәләкәй генә баланың әсәһе менән саф башҡортса һөйләшеп килеүен тыңлап барған. Унан был икәү 20-се ҡала башҡорт мәктәбенә боролоп ингән һәм тап уның синыфына уҡырға килгән. Шул әсәй менән бала әсәйем менән мин булып сыҡҡанмын.

Балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә минең кеүек үк башҡортса ғына аралашҡан дуҫым булғайны. Әхәт Вилдановтың улы Аҙамат ине ул.

Шунлыҡтан, мин ниндәйҙер икенсе телгә мохтаж да булманым, ахыры. Шулай ҙа тора-бара рус телен дә ҡуллана башлағанмындыр, күрәһең, урамда, мәктәптә был тел яйлап ылыҡтыра бит бит инде үҙенә.

20-се ҡала башҡорт мәктәбендә уҡығанда бөтә класташтарым да башҡорт йәмғиәтендәге билдәле кешеләрҙең балалары ине. Динис Бүләков, Риф Мифтахов, Әнүр Вәхитов кеүек ағайҙарҙың ул һәм ҡыҙҙары менән бергә уҡырға тура килде. Шул минең менән уҡыған быуындың ҡусты-һеңлеләре минең һеңлеләрем менән дә һабаҡташ булды. Шунлыҡтан, мин һеҙ әйткән ул "урыҫлашҡан йәмғиәтте" белмәнем дә ул. Атай-әсәйҙәр, мәктәп, атай-әсәйҙәрҙең аралашҡан кешеләре беҙгә милли рухта үҫешерлек айырым бер йәмғиәт яһаны ла инде.

**Ул йәмғиәткә кемдәр инә ине? Нисегерәк үтә ине уларҙың аралашыу, күрешеүҙәре?**

- Атайым ғалим булһа ла, беҙҙә күберәк сәнғәт кешеләре булды.

***✓ Мин баш ҡаланың бик тә әүҙем, уңышлы башҡортомон. Миңә ошонда үҙ милләтем вәкиле булып йәшәргә берәү ҙә ҡамасауламай, берәү ҙә минең хоҡуҡтарымды сикләмәй. Сөнки уларҙы мин үҙем сикләмәйем.***

Ял көндәренә улар ҙа бала-сағалары менән беҙгә килә йәки беҙ кемдәргәлер барабыҙ. Ҡурайҙа уйнап, йырлашып, бейешеп, ниндәйҙер сығыштарға әҙерләнеп йыйылғандарын хәтерләйем. Ҡунаҡтар килһә, беҙҙән, балаларҙан концерт ҡуйҙыралар ине. "Шул ағайҙар, шул апайҙар, шуларҙың ғаиләһе килә" тип, номерҙар өйрәнеп, шиғырҙар ятлап йөрөгәнебеҙҙе хәтерләйем. Күршебеҙ Нина апай, ҡурай уйнап бейешә башлаһаҡ, аҫҡы ҡаттан батареяны туҡылдата торғайны.

**Һеҙ баш ҡалала башҡорт фольклоры менән сәхнәгә сыҡҡан беренсе ғаилә булғанһығыҙ. Ошолар хаҡында һөйләп китегеҙ әле?**

- Атайым "Аҡ тирмә" клубы ағзаһы булғанда әсәйем, һеңлеләрем менән ғаилә ансамбле төҙөп алғайныҡ. Хәтеремдә, "Эй, рәхәт донъя!" тип бейеп китә торғайныҡ. Атай ҡурайҙа уйнай, беҙ бейейбеҙ, йырлайбыҙ, йолалар күрһәтәбеҙ. Унан "Мираҫ" тип аталған төркөм булдырып, Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов ағай, Розалия Солтангәрәева апайҙар ҡушылып, бер ҙур концерт бирерлек коллективҡа әүерелдек. Төрлө яҡтарға сығыштарға, фестивалдәргә лә саҡыралар ине. Ҡаҙағстанда, Алматыла үткән "Азия тауышы" фестивалендә ҡатнашыуыбыҙ матур иҫтәлек булып хәтерҙә ҡалған. Ололар ҙа, балалар ҙа сәхнә тултырып йөрөнөк, беҙҙе ҡат-ҡат баш эйергә саҡырҙылар. Ниндәйҙер дипломдар ҙа алдыҡ, еңеүсе лә булдыҡ. Унан Тольяттила ла бер фестивалдә шундай уҡ уңышҡа өлгәшкәйнек. Ҡыҫҡаһы, ул йылдарҙа беҙҙең ғаилә лә, ансамблебеҙ ҙә республика һәм уның сиктәрендә ярайһы уҡ билдәлелек алған "артистар" булып киткәйне.

Үҙем бейеү менән шөғөлләндем. Әхәт Фәсхетдиновҡа ете йыллап бейеүгә йөрөнөм. Әхәт Әхмәт улы Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт бейеү ансамбленең бейеүсеһе ине. Унан ул хореография училищеһының директоры булып китте. Беҙҙең балалар бейеү ансамбле "Әкиәт" тип атала торғайны. Баш ҡалала был берҙән-бер башҡорт балалар бейеү төркөмө булғандыр, бөтөн дәүләт сараларында ла беҙҙе сығыш яһаталар ине. Бына шундай хәтирәләр һаҡлана күңелдә.

**Бала сағығыҙҙағы шөғөлдәрегеҙгә ҡарағанда һәм үҫкән мөхитегеҙҙән дә сығып, һеҙҙе сәнғәт кешеһе булырға тейештер, тип уйларға мөмкин. Ә һеҙ - табип.**

- Биология өлкәһендәге ғалим атайым йыш ҡына урман-ҡырҙарға алып сыҡҡанда үҙ шөғөлө менән ҡыҙыҡһындырырға тырышты. "Был үлән шулай атала, был үлән былай файҙаланыла", тип һөйләп, аңлатып йөрөй торғайны. Әммә мин туғыҙынсыла уҡығанда дауаханаға эләктем һәм данлыҡлы табип Наил Ғабдуллин менән таныштым. Ошо табиптың йоғонтоһо шул хәтлем көслө булды, мин башкөллө был һөнәргә ғашиҡ булдым һәм табип булырға ҡарар итеп, Башҡорт дәүләт медицина институтына (хәҙер ул университет) уҡырға индем. Институтты тамамлағас, Өфө күҙ ауырыуҙары фәнни-тикшеренеү институтына эшкә барҙым. Ул ваҡытта Марат Тәлғәт улы Аҙнабаев директор ине. Миңә шундай абруйлы, белемле ғалимдың ҡул аҫтында фән менән шөғөлләнеү бәхете тейҙе. Үҙемде уның уҡыусыһы тип иҫәпләйем. Үтә лә әүҙем, ҡыҙыҡлы йылдар булды унда эшләгән дәүерем, һәр ваҡыт шундай йылы тойғолар менән хәтерләйем. Артабан әҙиптең улы Булат Марат улының урынбаҫары булып, 25 йыл берлектә эшләгәндә лә һөнәри яҡтан да, шәхес булараҡ та үҫеш осоро кисерелде, уға сикһеҙ рәхмәтлемен. Унан һуң, замана-лар бер аҙ ауырайып китеп, ауырлыҡ иң беренсе бюджет өлкәһенә төшкәс, беҙ шул уҡ бер команда, шул уҡ медицина өлкәһендә, әммә икенсерәк юҫыҡта эш башланыҡ.

**Балаларығыҙ һеҙ үҫкән мөхиттә үҫәме, әллә бөгөнгө Өфө башҡорттары икенсерәк тәрбиәләнәме?**

- Күп нәмә ғаиләнән килә. Ояһында ни - осҡанында ла шул, тиҙәр бит. Беҙ ҙә балаларыбыҙҙы ниндәйҙер махсус методика менән тәрбиәләп ултырманыҡ. Улар беҙҙең өсәү. Бәләкәйҙән үҙ эштәре менән мәшғүл булып, айырым иғтибар талап итмәй, сос, әүҙем булып үҫтеләр. Күп нәмәләрҙә уларға тулыһынса үҙаллылыҡ бирелгән. Бары оло-лар ярҙамы кәрәк булған тәңгәлдә генә йә әсәләренә, йә миңә мөрәжәғәт итәләр.

Улым да медицина өлкәһен һайлағайны, әммә беренсе курстан һуң был фәнгә артыҡ ҡыҙыҡһыныуы юҡлығын аңлап ҡалды. Әле химия-биотехнология факультетында уҡый. Был осраҡта ла беҙ уға баҫым яһаманыҡ, ултырып һөйләштек тә, үҙ иркенә ҡуйҙыҡ. Һәр кеше ниндәйҙер ҡарарҙы эске теләгеН тыңлап яһарға хаҡлы. Баланы һаман да бала итеп, уның өсөн хәл итеп, алдына сығып йүгереп йөрөү уны боҙа ғына, тип уйлайым. Бигерәк тә малайҙарҙы - буласаҡ ир кешеләрҙе уйлап, хәл итеп, төрлө мәсьәләләрҙе сисеп өйрәтергә кәрәк.

**Өс бала - ул бит инде киләсәктең тотош бер йәмғиәте тигән һүҙ. Һеҙҙең ошо буласаҡ йәмғиәткә милли үҙаң һалынамы?**

- Миңә йәш сағымда атай-әсәйем "Башҡортҡа өйлән" тигән һүҙҙе әйтмәне. Шулай ҙа мин быны ҡайҙандыр белдем. Өйҙә милли рух шулай көслө булғанға микән, башҡа милләт ҡыҙын алып ҡайтыуҙы башҡа ла индермәнем. Бәләкәй һеңлем французға тормошҡа сыҡты, әммә унда ла туған телен онотманы. Бала саҡта күңелгә һалынған аң да, тел дә улай ғына онотолорға тейеш түгелдер ҙә инде ул. Француз кейәүебеҙ ҙә башҡортса һөйләшә генә түгел, башҡорт йырҙарын да оҫта башҡара, өҙләй, ҡумыҙҙа уйнай. Уларҙың ғаиләһендә дүрт телдә лә иркен аралашалар. Башҡорт, француз, инглиз һәм рус телдәрен һыу кеүек эсәләр. Шунлыҡтан мин икеһе лә башҡорт булып та, туған телдәрен аңлай алмаған йәштәрҙе шелтәләр инем. Балаларыма килгәндә, мин үҙемдә булған милли үҙаңды уларға ла күсергәнмен, тип иҫәпләйем. Улар менән туған телдә аралаша алам. Йыйылғаныбыҙҙа ҡурайҙа уйнап, йырлашып ултырабыҙ. Олатайҙары ла, мин дә, улым да уйнай ҡурайҙа. Милли темаларға һөйләшәбеҙ. Олатайҙары ла милли мәнфәғәткә хеҙмәт иткән кеше, шул турала улар ишетеп-күреп үҫтеләр. Шунлыҡтан, был өлкәлә миңә уларға нимәлер аңлатып, өйрәтеп ултырырға түгел. Уларға был генетик рәүештә һалынған.

**Бөгөн һеҙ эшегеҙҙә лә, фәндә лә ниндәйҙер үрҙәр яулағанһығыҙ. Баш ҡаланың шау-шыулы, ҡыҙыу һәм ярайһы уҡ ҡаты тормош шарттарында - мегаполиста йәшәйһегеҙ, эшләйһегеҙ. Үҙегеҙҙе баш ҡаланың бер кешеһе генә итеп түгел, ә уның автохон вәкиле - баш ҡала башҡорто итеп тояһығыҙмы?**

- Был ҡалала мин бәхетле булдым. Мәктәпкә ҙур теләк менән йөрөнөм, унан институтҡа ла үҙ теләгем менән барып, кинәнеп уҡыным. Аҙаҡ эшемдә лә һәр ваҡыт күңелем бөтөн булды, башҡарғаным оҡшаны, коллегаларым менән аралашыуҙан илһам алдым. Ҡыҙыҡлы, фәһемле булды эшләгән урындарым, шәхес булып формалашыуымда, һөнәрмән булып өлгөрөп етеүемдә лә йоғотоло булдылар. Был яҡтан мин, моғайын, уңышлымындыр. Сөнки тормошта үҙ-үҙемде, үҙ урынымды таба алмай йөрөгән йылдарым булманы. Нимә теләгәнемде, нимәгә ынтылғанымды һәр ваҡыт белдем һәм аңланым.

Бөгөн дә йәшәйеш тик эштән генә тормай. Спорт менән шөғөлләнәм, спорт залына йөрөйөм, саңғыла йүгерәм. Балалар менән йыш ҡына ҡырға, тәбиғәткә сығабыҙ. Элек беҙ сит илгә барып ҡайтыуҙы әллә ни күрә инек. Һуңғы йылдарҙа бына Башҡортостан эсендәге әллә күпме гүзәллектәрҙе күҙәтәбеҙ. Үҙебеҙҙә сит илдә булмаған хозурлыҡ бар бит. Шүлгәнгә, Торатауға, Салауат мәмерйәһенә, Мораҙым тауҙарына, Ирәндеккә, Иҫәнгә, Абҙаҡҡа йөрөйбөҙ хәҙер, яйлап республикала туризм да әүҙемләшеп бара. Унан ҡала, милли мәҙәни сараларҙан ситтә ҡалмаҫҡа тырышам. Бына шулай дөйөмләштереп әйткәндә, мин баш ҡаланың бик тә әүҙем, уңышлы башҡортомон. Миңә ошонда үҙ милләтем вәкиле булып йәшәргә берәү ҙә ҡамасауламай, берәү ҙә минең хоҡуҡтарымды сикләмәй. Сөнки уларҙы мин үҙем сикләмәйем. Бөтә нәмә лә әлеге һинең аңыңа һалынған төшөнсәләрҙән килә. Һәм шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алайыҡ: "Мин - башҡорт!" - тип күкрәк һуғыу аҙ, һин милләтеңдең атын күтәрерҙәй бер шәхесе бул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Урал Сәфәрғәле улы дөрөҫ әйтә, бөтә нәмә лә ғаиләнән һәм аңға һалынған төшөнсәләрҙән килә. Ауылда ла, баш ҡалала ла, хатта сит илдә лә һиңә үҙ милләтең вәкиле булыуға бер кем дә ҡамасауламай. Сөнки бөтөн рухи ҡиммәттәр ҙә һинең йәнеңдә, күңелеңдә һаҡлана.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# УСЫБЫҘҘЫ АСЫҠ ТОТАЙЫҠ!

**Минең күркәм холоҡло, сабыр, аҡыллы хеҙмәттәшем булды. Оло йәштәге апай эштә генә түгел, ғөмүмән, тормошта ла кәңәшсем, терәгем ине. Йәшлегем менән күп нәмәне аңлап еткермәгән йә дөрөҫ ҡабул итә алмаған саҡтарымда һәр саҡ уға мөрәжәғәт иттем. Кәрәк кенә кәңәшен биреүсе, барын да ипле генә итеп төшөндөрөүсе, уйҙарымды ыңғай көйләргә ярҙам итеүсе хеҙмәттәшемә әле лә рәхмәтлемен.**

Үҙе үтә лә киң күңелле, алсаҡ булғанғалыр, күптәр уға тартылып торҙо. Ҡулынан килгәнсә һәр кемгә ярҙам итте апай, йылы һүҙе, тәмле ризығы менән ихлас бүлеште. Матди ҡыйынлыҡтар кисереп йәшәгән осоро ине беҙ бергә эшләгән йылдар, шулай булыуға ҡарамаҫтан, һорап килгән кешегә үҙенең аҙаҡҡы аҡсаһын тотторoп сығарған саҡтарына йыш шаһит була торғайным. Баҡсаһында үҫкән емеш-еләген, тауығы һалған йомортҡаһына саҡлы беҙҙең менән уртаҡ ашаны. Өйөнә барһаң да, ҡайҙа ултыртып, нисек ҡунаҡ итергә белмәй бер була, оҙатҡанда иһә сумка тултырып күстәнәсен һала.

Үҫтергән гөлдәрен күсереп ултырта башлаһа, һәр ҡайһыбыҙға шуның ботаҡтарын таратып бирә. Яҡшы сифатлы орлоҡтарҙы почта аша яҙҙырып ала, шунда ла беҙҙе онотмай, үҙенә алғандарҙы беҙгә лә яҙҙыра. Хатта был хаҡта уларҙы ҡулға килтереп тотторғансы белмәй ҙә торғайныҡ. Уның магазиндан алған берәй әйберен оҡшатып ҡалып, миңә лә кәрәк ине, тиеүең була, үҙенә алғанын һис икеләнеүһеҙ биреп ҡуя, йә икенсе көндө үк магазиндан һатып алып килтерә.

Телеңде йоторлоҡ итеп әҙерләгән ризыҡтарынан да күп ауыҙ иттек апайҙың, ҡулы ҡотло булғанғамы, һәр ашы ашап туйғыһыҙ булды. Уларҙы нисек бешереүен һораһаң, ихлас итеп, тәфсирләп аңлата, улай ғына ла түгел, һәр кемебеҙгә яҙып бирә торғайны. Ә инде әҙерләп тә, унынса килтереп сығара алмаһаҡ, үҙе әҙерләп биреп ҡыуандырыр ине. Уның үҙе генә белгәнсә итеп кемгәлер кәбеҫтә, ҡыяр тоҙлап биреүҙәрен әле лә көлөп иҫкә алабыҙ. Бер ҡасан да ҡул ҡото китә, күҙ тейә, тип ҡурҡманы.

Сирләп торған саҡтарыбыҙҙа уның сумкаһында һәр ҡайһыбыҙҙың ауырыуына тәғәйен дарыу табылды. Табипҡа барғансы уҡ, ҡурҡыу, шик-шөбһәләребеҙҙе таратып, әллә ни ҡурҡыныс нәмә юҡлығын аңлатып, диагнозды ла беҙгә ул "ҡуйҙы", дауаханала иһә уныһының раҫланыуына күнеп тә бөткәйнек. Тора-бара ул өйрәткәнсә, артыҡ бошонмай, сәбәләнмәй генә хеҙмәттәшебеҙ кәңәш иткән дарыу йә үләндәрҙе эсеп һауыҡтыҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ: күп осраҡта табип та ул әйткән дауаларҙы яҙыр ине.

Сирләп дауаханаларҙа ятҡаныбыҙҙа ла иң беренсе булып ул килде. Үҙемде иһә ҡаты сирләп ятҡанымда хатта өйөнә алып ҡайтып дауаланы.

Ауылда атай-әсәйҙең мал-тыуары, ҡош-ҡорто сирләһә лә, унан шылтыратып һораныҡ, уларға ла тәғәйен дауаны апайыбыҙҙан алдыҡ.

Үҙенең бай тормош тәжрибәһе менән шулай ихлас, күңелен биреп бүлеште, кәрәк кенә урында кәрәк кенә һүҙҙе тик унан көттөк.

Яңғыҙ йәшәгән, мохтажлыҡ кисергәндәргә ит-майын, он-шәкәрен тейәп ебәрһенме, күрше-тирәһе берәй яҡҡа киткәндә донъяларын ҡарап ҡалһынмы, йә шуларҙың эт-бесәйҙәрен, ҡош-ҡорттарын үҙенә алып ҡараһынмы - кешеләргә ҡылған изгелектәрен һанап бөтөрөрлөк тә түгел инде.

Урамға сыҡһаҡ, хәйер һорап ултырыусыларҙың устарын һис ҡасан буш итмәй, яндарынан нисә үтһә лә, күпме бирә ала, шунса аҡса һалып уҙҙы һәм мине лә шуға өйрәтте.

Уның аҡыл тулы кәңәштәрен, төплө һүҙҙәрен күп ишеттем, тормошта килеп тыуған хәл-ваҡиғалар уларҙы йыш иҫкә алырға мәжбүр итә, ә шулай ҙа, бер кәңәшен әлегәсә күңелемдә һаҡлап йөрөтәм. "Усың һәр саҡ асыҡ булһын, - ти торғайны ул. - Кешеләргә күпме бирһәң, үҙеңә лә шунса әйләнеп ҡайтыр. Йомоҡ ус ҡотһоҙ, бәрәкәтһеҙ була. Был донъяла усыңды йомоп йәшәмә..."

Ҡай саҡ үҙенә сауап алыр өсөн генә кешегә хәйер тараткан, ниндәйҙер изгелек эшләп маташҡандарҙы күрергә тура килә. Шундай саҡтарҙа һәр ваҡыт өлкән хеҙмәттәшемде иҫкә төшөрәм. Уның һис кем менән иҫәпләшмәй ҡылған ихлас ғәмәлдәре, башҡаларға күрһәткән яҡшылыҡтары, донъяға һәр саҡ шарран асыҡ булған саф күңеле һоҡланыу тыуҙыра. Тормошобоҙ ҙа тап шундай кешеләр менән йәмле бит.

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

***✓ Шәғәле, бөтәһен дә аптыратып, янды аяҡтары менән кирә лә, ике ҡуллап керешен тартып ебәрә. Йән-көскә ысҡынған уҡ, дәһшәтле тауыш сығарып, тау башындағы ҡулса аша әллә ҡайҙа, алыҫҡа китеп, күҙҙән юғала.***




– Тамъяндарҙың ата-бабалары әүәле Димдең үрге ағымында йәшәгән. Һуңыраҡ улар көньяҡҡа, Ағиҙел буйына күсенгән. Бөрйән менән түңгәүерҙәр кеүек, Уралдың таулы-ташлы, ҡалын урманлы яғына килеп ултырғандар. Ҡалғандары Ағиҙелдең көньяғында, Нөгөш тамағында тороп ҡалған. Ҡыпсаҡлашҡан тамъяндар ҙа булған араларында.

- Ғәйфулла ағай, мин үҙем - Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуынанмын. Атай яғынан көҙәндәр араһы булып, Күсәк бей, Бабсаҡ бейгәсә быуындарымды яҡшы беләм. Әсәй яғынан Лоҡман-Хәкимгәсә яҙып алғанмын. Икеһенең дә шәжәрәһе Бикдархан тарханға барып тоташа. Тик, һин әйткәнсә, ҡыпсаҡлашҡан тамъяндар тигәнде ишеткән юҡ ине, - тип оло кеше күңелен уйламай әйтеп һалды Мөхәммәт.

- Баяғы Ҡытырыж-Уғатарҙы күргән, һөйләгәнен тыңлап, бер аҙ яҙып алған булһаң, бөгөн икенсерәк һөйләшер инең. Хәтергә икеләнмәһәң дә була. Уҡымышлы булмаһам да, үҙемде ҡыҙыҡһындырған, үҙемә ҡағылған ҡолаҡҡа ятышлы хәбәрҙе зиһенгә ятҡа бикләп барам мин.

- Улайһа, "Уғатар көйө"нөң һүҙҙәрен ниңә иҫләмәйһең икән? - Тағы бәхәскә инеп китте Мөхәммәт.

- Йырсы түгелмен. - Ғәйфулла туҡтап тора бирҙе. - Тоҡтомалдан ул турала һүҙ башламаным. Мин дә шул тамъян ырыуынанмын. Тамъяндар, инде Урал тауҙарында нығынғас-иткәс, Урал аръяғына күсенгән. Быуаттарын, ана шул китаптарындан ҡарап, үҙең бел. Нөгөш, Дим, Өршәк буйына кире күсенеүсе лә булған. Ҡайҙа бүленһәләр ҙә, ат алыштырып, дуға-дуға ҡунаҡҡа йөрөшкәндәр. Ерһенмәй, минең кеүек, кире Урал аръяғына ҡайтып төпләнеүселәр ҙә булған.

Оло Нөгөш буйында Брәтәк ауылы барлығын беләһең. Йылға башы - Бөрйән ырыуыныҡы. Биләмәһе - Ҡарағай-Ҡыпсаҡтыҡы, көнсығышта Тамъян-Түңгәүер ерҙәре башлана. Бына ошо ауыл урынлашҡан ерҙә Шаһман атлы уҙамандың өсөнсө ҡатынынан Шәғәле тигән улы тыуа. Елле тоҡомдан икәне билдәле: үҙенең тиңдәштәре араһында көсө менән айырылып тора. Малай сағында өлкән билбирмәҫ көрәшселәр ҙә шыртлап торор булған унан. Баһадир кәүҙәле Шәғәле батырҙарҙың батыры булып танылa. Ҡулдары көрәктәй, йоҙроҡтары сүместәй. Тарбаҡ имәндәй киң яурынлы, ҡая ташындай текә маңлайлы, ҡарсығалай үткер күҙле. Ул осор кешеләре эре һөйәкле була бит.

- Әйтәгүр, ағай! Мәсем тауына күтәрелгәндә Бөрйән батыры Ҡарағөләмбәттең уғын биш пар үгеҙ тартҡан. Кәүҙәһе нисә боттыҡ булғанын шунан самаларға була инде.

Байтаҡтан "бушҡа ваҡыт үткәрәм" тип ултырған Мөхәммәттә, ниһайәт, эҙәрмәнлек ҡомары уянды.

- Эйе. Төпкә айғыр егелгән пар аттың йөк арбаһына ике мискә төйөлгән сайыр тейәйһең - ярты тонна булыр. Шунан артығын беҙҙең юлдарҙа һөйрәй алмай аттар. Иҫәпләп ҡара инде ул уҡтың ауырлығын!

Башҡорттар Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем, әленән-әле ҡаҙаҡтар менән низағ ҡубып тора. Гел генә ыҙғышып йәшәгәндәр тигән һүҙ түгел бит ул. Тама ҡаҙаҡтары менән алыш-биреш тә көслө булған. Бер мәлде тамъян иленә ҡаҙаҡтар баҫып инә. Яу ҡайтарырға әҙерләнеп сығырға торғанда һағауылдар сапҡын килеүен әйтәләр. Ҡаҙаҡ яуы башлығы Шәғәлегә хәбәр һалған: алыҫлыҡҡа атышҡанда һинең уғың минекен үтә торған булһа, беҙ һеҙҙең ерҙәрҙән яуһыҙ боролабыҙ. Был ваҡиға ул мәл өсөн ҡәҙимге эш һаналһа ла, ике батырҙың уғатыш ярышында башҡорт еренең яҙмышы хәл ителергә тейеш була. Тамъян иле оло хафаға ҡала. Ил намыҫын яҡлау - ир иңендә. Яу таһыллығы, оһоллоғо буйынса Шәғәлегә тиңдәр юҡ!

Ҡаҙаҡ егете лә бирешкәндәрҙән түгел: батырҙың да батыры, ғәйрәтленең дә ғәйрәтлеһе, мәргәндең дә мәргәне икәне башҡорт иләндә билдәле. Ҡылыссан! Уғатышта ярыш туҡтаймы-юҡмы икәнен белгән кеше юҡ. Ҡылысҡа китһә, эш хана!

Дандары алыҫҡа таралған ике батыр - ҡаҙаҡ батыры менән башҡорт батыры алыҫлыҡҡа атыуҙа ярышырға тейеш! Ярыш майҙаны итеп ҡаҙаҡ батыры тигеҙлекте һайламаҡ итә. Шәғәле баҫып торған ер - олоно ҡолас иңлек яңғыҙ имән үҫкән сағыл. Килешеп, сағылды һайлайҙар.

Ҡаҙаҡ батырҙарын һөйләһәләр, ниңәләр, ғифрит кәүҙәле, яҫмаҡ битле, ер тырнап үкереп ултырған, тип өҫтәп ебәрәләр. Шәғәле менән ярышҡа сыҡҡаны мыҡты кәүҙәле, йыуан беләкле, һөйкөмлө һөйәкле була. Ҡиәфәтендә - үҙ-үҙенә ышаныс, йөҙөндә - һынсыл ҡараш. Йылғыр кеше аҙымынан билдәле: яҡынлап килгәнендә уҡ, баш осонан шыҡыйып үтеп, күккә, бейеккә күтәрелеп, нөктә булып ҡына күренгән ҡошто атып ебәрә - уныһы ҡауырһыны алланып, быларҙың аяҡтары аҫтына килеп төшә. Уның һыналған был алымы - ҡаршы яҡ дәғүәсеһе күңеленә шом һалыу, үҙенең мәргәнлеген иҫкәртеү сараһы.

Ажғырған айғырҙың өйөрөн күр тип, Шәғәле теге яҡҡа күҙ һала. Йылға ярында, улар ҡорған урҙайҙа, уҡ остары күренеп торған ҡорман элгән (уларса ҡорамсаҡ) 5-6 йәш егет баҫып тора. Күҙ күреме ерҙә, улар артында, ятаған менән ҡоралланған урта йәштәрҙәге ирҙәр төҫмөрләнә. Ике яҡтан да бағауылдар ҡуймаҫҡа килешелгән, әммә ҡаҙаҡтар уяулыҡты юғалтмайҙар, әҙер торалар икән! Тере ҡәлғә!

Уҡ-һаялы тамъян ырыуы ҡурайсыһы яндатып килеп баҫа. Башҡорт батыры яғынан сыраҡ башлы уҡтарының киҙеһен керешкә эләктереп, Шәғәләнең ағай-ҡустылары күҙ-ҡолаҡ булып тора.

*- Һай, ырыуыбыҙ батыры, Шәғәли Шаһман.*

*Уҡ атыуҙа, быға са, һиңә тиң тапмам.*

*Һыу һыйыры мөгөҙөнән һинең уҡ үә һаҙағың -*

*Был ҡоралды бары үҙең генә тартып алырың.*

*Күҙ күреме етмәҫ ергә осорһон уғың -*

*Бары шулай башҡорт ерен йолоп ҡалырһың,* - тип ҡеүәтләй ҡурайсы.

Ысынлап та, Шәғәле ҡулындағы ян эс яғын киртеп, һыу һыйырының мөгөҙөнән бөгөп эшләнгән ярҡа беркетелгән, эстән дә, тыштан да тарамыштар менән сырмалған булған.

Ыңғырсаҡлы йәйәле башҡорт һыбайлыһы һәм ҡаҙаҡ һыбайлыһы алыҫҡа, бейек тау башына, ҡулса мендереп ҡуялар, үҙҙәре күҙәтсе булып баҫалар. Ата алмағандың уғы алты ҡолас китер. Ә был батырҙар үҙ көстәренә ышана. Һәр ҡайһыһы үҙ илендә шөһрәтле.

Көсөргәнешле миҙгел тыуа, тирә-йүндә тынлыҡ урынлаша. Башта ҡаҙаҡ яуы башлығы атып ебәрә. Уғы, ҡулсанан үтеп, арыраҡ барып төшә. Сират башҡорт батырына етә. Шәғәле, бөтәһен дә аптыратып, янды аяҡтары менән кирә лә, ике ҡуллап керешен тартып ебәрә. Йән-көскә ысҡынған уҡ, дәһшәтле тауыш сығарып, тау башындағы ҡулса аша әллә ҡайҙа, алыҫҡа китеп, күҙҙән юғала. Күҙәтселәр ҙә аңғармай ҡала.

Аллаһы Тәғәләгә тәсбих әйткән ҡоштар тауышынан тирә-яҡ моңға сорнала, сағылдағы имән япраҡтары шыбырлаша, килке-килке күктә йөҙгән болоттарҙы етеҙ елдәр ҡыуып уйната - бар тәбиғәт еңеүҙе тантана итә.

Фарты юҡтың даны юҡ, тип тормай ҡаҙаҡ батыры: Шәғәле Шаһмандың еңеүен таный, һүҙендә тороп, ғәскәрен алып китә. Ана шулай башҡорт ере бер яуҙан йолоп ҡалына. Ил аралаған һынсы булыр, ер аралаған уҡсы булыр!

- Һыу һыйыры мөгөҙө, тинең бит әле, ағай! Ул ян ҡайҙан килеп эләкте икән? - Ниндәйҙер мөһим ваҡиғаны иҫенә төшөрә алмай, сытырайып ҡуйҙы Мөхәммәт.

- Әҙернә! Шәғәләнең яу әҙернәһе! Был ҡоралды Шәғәле Шаһман бары тик үҙе генә йөрөтә алған, башҡаларҙың көсө етмәгән. - Ҡырҡа әйтеп ҡуйҙы Ғәйфулла.

- Иҫкә төштө. Ул йәшәгән быуатта Төркиә солтаны Фәтих Оҡ-Майҙанда донъяның иң яҡшы уҡсылары өсөн уҡтан атыу буйынса ярыштар ойоштороған булған, - тип тарих менән "нығытмаҡ" булды фольклорсы.

Ғәйфулла Мөхәммәткә юл бирмәне, үҙе дауам итте:

- Солтан-молтанын, быуат-фәләнен белмәйем. Ете класс белемем булһа ла, ул турала тарихта өйрәтмәнеләр. Мин Уғатар хикәйәтен еткерҙем.- Тауышында үпкә тоны һиҙелде.

Оҙон тынлыҡ урынлашты. Мөхәммәт, Ғәйфулла ҡурайсының хәтерен ҡалдырҙым, ахры, тип борсолдо.

* * *

Көлгә бешкән картуф менән үлән сәйе эсеп алдылар. Ҡыҙыу көл өҫтөнә киҫкә ырғытҡас, өҙөлгән һүҙен дауам итте Ғәйфулла.

- Төрөктәрҙең Әҙернә ҡалаһына төрлө яҡтан сауҙагәрҙәр беше ағас, һыу һыйыры мөгөҙөн, биҙәү өсөн йылан тиреһен, кереш өсөн Ҡытай ебәген, йәнлек тарамышын, балауыҙ килтергәндәр. Дан әҙернәләр эшләү шунан ҡалған. Шәғәле Шаһман ошондай ярыштарҙың береһендә ҡатнашып, яу әҙернәһен бүләккә алған булған. Ауырып китеп, һуңғы көндәре яҡынлашып килгәнен белгәс, ҡоралды оло улына бирә: "Ошо ҡоралдан ата алған кеше башҡорт илен данға күмер", - ти. Әммә ундай батыр тойолмай әле.

- Ул ҡоралдың артабанғы яҙмышы нисек икән? - Әңгәмәне үҙ ағышына ҡуяйым, тиһә лә, түҙмәне, һорай ҡуйҙы Мөхәммәт.

- Атып ҡарамаҡ булып маташыусыларҙан берәү, йөйөнө өҙөлөп, үлеп ҡала. Башҡаса ҡоралға тейеп ҡарарға баҙнат итеүсе табылмай. Байтаҡ ғүмер үтә, илдә батыр егет тыуа. 14 йәшендә Салауат Шәғәле Шаһман йәйәһенең керешен тарттыра. Быға тиклем ҡорал Шәғәләнең олатаһының һандығында ятҡан, һәм уны тарттырырға бер кемдең дә көсө етмәгән булған. Шәғәлелә лә, Салауатта ла үҫеп ултырған ағасты ҡумшытып, төбө менән аҡтарыр көс булған. Салауаттың йәйәһенең керешен беҙҙең кеүектәрҙән унау ҙа тарттыра алмаған...

Ғәйфулла бабай киске һиллеккә кинәнеп ултыра бирҙе. Үҙән йылғаһы буйынан, таллыҡтан, көбө төбөн көжгөгәндәй сәйер тауыш ишетелеп ҡуйҙы. Тора-бара кемдеңдер көпшәгә өргәне айырым-асыҡ ҡына ҡолаҡҡа салынды. Ғәйфулла ҡурайсының йөҙөнә нур ҡунды.

- Һөйләүҙәренсә, теге яу әҙернәһен ҡуллана алмаһалар ҙа, бей тоҡомоноҡолар, бүре тарамышы ҡуйып, мөкәтә ян яһап алалар. Янында һыу һыйыры мөгөҙө лә, керешендә Ҡытай ебәге лә юҡ, мәгәр 4-5 боттыҡ тартҡандыр. Шәғәле Шаһмандың бүләләре Яусәй менән Тебекәй, тыуалары Ҡырсәй менән Ҡарасман йөрөтә быны. Аҙаҡ, быуындан-быуынға күрһәтер ҡомартҡы булһын тип, уны ла һандыҡҡа һаҡлыҡҡа һалып ҡуялар.

Ошо яу әҙернәһен Ҡытырыж-Уғатар бик бәләкәй сағында күргән була. Ғүмер буйы уны үҙе яһап ҡарау теләге ташламай. Был яҡтарға күсеп килгәнендә ҡатыны йәш, балаһы бәләкәй булһа ла, үҙе ир уртаһын үткәйне инде. Минең менән эшләй башлағас, төндәрен бандаркала йоҡларға ҡала башланы. "Ярар, йәш кәләштең көйһөҙөрәк сағылыр", - тип ҡыҫылманым. Шулай йылға яҡын бергә эшләп ташланыҡ. Бер көн был мине йоҙаҡҡа бикле торған келәткә саҡырҙы. Һөйләшер һүҙе барҙыр тип, киттем артынан.

Ғәйфулла бабай тағы тынып торҙо. Йөҙөнән һағыш күләгәһе үтте. Ултыра биргәс:

- Ҡарасман, аса тор әле! - тигәненән Мөхәммәт тертләп китте. Оло кешене арытып, эңергәсә тотто. Уныһы бер аҙ бутала башланы: әллә ҡайҙа, тарихта ҡалған Шәғәле заты Ҡарасманды саҡыра башланы.

- Ә үҙе һуң, Ҡытырыж-Уғатар үҙе ҡайҙа? - тип һораны Мөхәммәт.

- Ағас баҫты. Ҡуш йөрәкле булған икән - үҙе лә белмәй ғүмер иткән...

Тамағына тығылған төйөрҙө көскә йотоп, Ғәйфулла артынан эскә атланы Мөхәммәт. Зыңғыр итеп йоҙаҡ асылған тауыш ишетелде. Кисәге ҡурай күтәреп йөрөгән малай ("Ҡарасман" аты уға шөһрәт итеп бирелгән икән!), күҙе-башы ялтырап, келәтте асҡан да, ауыҙын йыя алмай ирәбе баҫып тора. Бер ҡулына үлән ҡурай тотоп алған!

Ғәйфулла бабай стенаға ҡатылған иң өҫкө кәштә янына барҙы. Мөхәммәтте саҡырып алды ла, икәүләп, кейеҙгә уралған ауыр йөктө иҙәнгә төшөрөп һалдылар. Ҡурайсы һаҡ ҡына кейеҙҙе тағатып ебәрҙе.

Алдарында боронғо башҡорт янының ысын өлгөһө! Беше ағасҡа ырып кейҙерелгән мөгөҙ ярҡаһы тышынан ҡайын туҙы менән уратылған. Ҡоралдың оҙонлоғо метрҙан саҡ ҡына артығыраҡ булыр. Кереше - йылҡылдап торған, ошоғаса күҙ күрмәгән ебәктән. Йәнәшәһендә - бөрөз, сыраҡ башлы уҡтар һалынған. Кәзә тиреһенән тегелгән ҡалъянда - туҙ ҡанатлы уҡтар.

Ҡайһы арала сығып киткән, ҡайһы арала хасил булған Ҡарасман һөрән һалып ебәрҙе :

- Олатай, мин дә уҡ эшләнем!

Ялп итеп, икеһе лә бер юлы боролоп ҡараны.

Бабай армы-тормо юнылған тәлтермәс уҡты яҡтыға ҡуйып ҡарап торҙо. Бармаҡ осо менән иплəп кенә һыйпаны ла сикәһенә терәне:

- Эй, балам, балам! Ә мин уғатарҙар тарихта ҡалды, тигән булам...

Ғәйфулла ҡурайсы сикәһе буйлап аҡҡан йәштәрен тыйманы...

**(Аҙағы).**

✓ *Минең халҡым кемдәргәлер*
*Ҡаҙна һымаҡ.*
*Байлыҡтарын уның һанап,*
*Бәғзеләрҙең нәфселәре*
*Аҙа һымаҡ.*



ЗАУЫҠ



*Лариса АБДУЛЛИНА*

# МИНЕҢ ХАЛҠЫМ...

## кешелеккә терәү инде

### Минең халҡым

*Башҡорт Автономияһының*
*100 йыллығына*

Минең халҡым кемдәргәлер
Ҡаҙна һымаҡ.
Байлыҡтарын уның һанап,
Бәғзеләрҙең нәфселәре
Аҙа һымаҡ.

Минең халҡым кемдәргәлер
Келәт төҫлө.
Шул кемдәрҙең рухиәтте
Урлап ташыу тигән маҡсат,
Ниәт көслө.

Минең халҡым кемдәргәлер
Архив һымаҡ.
Шәжәрәһен йолҡоғандар!..
Илаһ, һаҡла, һәләкәткә
Тарыр һымаҡ.

Минең халҡым кемдәргәлер
Иҫке һымаҡ.
Хасил булып бер тамырҙан,
Тик бер ҡуҙҙан яңырыуы -
Серле йомаҡ.

Минең халҡым кешелеккә
Терәү инде.
Мең хикмәтле асыл, рухы,
Иманы һәм ҡот-ырыҫы
Мөхәббәтле был Йыһанда
Берәү инде!

### Ҡомартҡы

*Атаҡлы башҡорт сәсәне*
*Мөхәмәтша Буранғоловҡа*

Ишетелде бик боронғо бер көй:
Сыға ине ул моң яҙманан.
Рух яҙыуын кем һуң һеңдергән дә,
Урал һүҙен беҙгә ялғаған?

Ул йөрәккә нисә дәүер һыйған!
Нәби ҡото һыйған рухына.
Ғәләмдәрҙе сайҡар ошо аһәң -
Әҙәп тәғлимәте барһына.

Аҡбуҙатмы бышҡырғандай итте,
Таралғандай итте ҡан еҫе.
Боронғо бер көршәк төҫлө рухы
Һаҡлай алған йәндә зат төҫөн.

Дәүерҙәрҙе дәүерҙәргә бәйләп,
Бәйғәмбәрҙең һаҡлап ҡеүәтен,
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ тип,
Кеше булһын затығыҙ тип,
Боронғонан килә был әйтеү!

Сәсән сылбырҙары рухын сәскән -
Беҙ тереләек Нәби һүҙенән!
Урал вариҫтары иҫән тиеп,
Йәштәр тамды Йыһан күҙенән!..

### Янсыҡ

*Нәфисә Вәлиди иҫтәлегенә*

Хәйерле юл, йәнем, хәйерле юл,
Иҫән генә йөрө һәр ерҙә.
Ҡайҙа ғына аяҡ баҫһаң да һин
Килһен бары яҡты хәбәрҙәр.

Хәйерле юл, Зәки, хәйерле юл,
Юлдаш булһын һиңә теләгем.
Ғилем асҡыстарын бирһен Хоҙай!
Һинһеҙ генә ҡалыу йәл бөгөн...

Ваҡытлыса микән был хушлашыу?
Түҙеп булыр кеүек уға ла...
Әллә ниңә төштәремдә һинең
Алыҫ офоҡтарҙа юғала...

Алыҫ офоҡтарҙа юғала ла,
Ҡояш булып ҡалҡа ҡабаттан.
Мин бит һине йәнә табыр өсөн
Мәңгелеккә, гүйә, оҙатам.

Хәйерле юл, йәнем, хәйерле юл!
Мөхәббәтем һине һаҡлаһын.
Әллә кемдәр һине һатҡанда ла,
Тыуған ерең генә һатмаһын!..

Һатмаҫ та ул һине тыуған төйәк,
Ай, төрлө шул илдә әҙәмдәр...
Ысын йөҙөн аса ҡай берәүҙәр
Аҡтарылған саҡта сиҙәмдәр.

Аҡтарылған саҡта кеше йәне,
Ҡалмағандай унда мәрхәмәт.
Монаятым һиңә бер им булһын,
Йөрәгеңә инһә йәрәхәт!

Хәйерле юл, янсыҡтағы йәнем
Дәрүиш кеүек бергә ил гиҙер.
Йылдар үткәс, беҙҙең мөхәббәттең
Бар тарихын илгә тергеҙер.

Хәйерле юл, исемкәйең менән
Ҡалам инде һөйөү ҡандырып.
Ә артыңдан утлы шауҡым- хәбәр
Күперҙәрең бара яндырып...

### Аҡтаныш

Серле әкиәттәй һинең яҙмыш,
Башҡорт ере, башҡорт төйәге.
Әле булһа әрнеп ята кеүек
Тупраҡ алған бабам һөйәге.

Әле булһа бында шәжәрәләр
Шыбырлаша төҫлө үҙ-ара.
Милләтемдең затлы вариҫтары
Башҡаларҙың ғәмен һуғара.

Етем бала кеүек ситтә ҡалғас,
Һағыналар микән баш йортон?
Күпме шулай Ерҙең күкрәгенә
Һибелергә була, башҡортом?

Һәр хәрефең йәнгә уйылған бит,
Һәр бер өнөң беҙгә бик таныш.
Беҙ бит һине бик яратып килдек,
Бик һағынып килдек, Аҡтаныш!

Мутин тоҡомдары был төбәктән -
Йәшәй микән халыҡ маҡтанып?
Ил улдарын бында таныйҙармы,
Беҙҙе таныйһыңмы, Аҡтаныш?

Беҙ йыр булып килдек мәркәздәрҙән,
Алып килдек милли фатиха.
Үҙ халҡына ҡабат ҡайтыуынан
Ниҙәр кисерәләр Илдархан?

Йөрәктәргә һеҙҙең һеңеп ҡалһын -
Рухи күперҙәргә юҡ кәртә!
Гәрәй тоҡомдары ҡырылды тип,
Золом зары беҙҙе иҫкәртә.

Серле әкиәттәй шартлы сиктең
Биктәре лә сығыр һис юҡҡа.
Шәхестәрең күпме ҡот ташыған
Милләт ғәме тигән усаҡҡа.

Әй, Аҡтаныш!
Яҡты һинең асман!
Ал ҡан менән тарих яҙылған.
Архивтарҙан күберәкте һөйләр
Ярҙарынан ташҡан был йылғаң.

Был урмандар күпте беләләр ул,
Иҫәнләште улар үҙ күреп.
Был убалар һис өндәшмәҫ ҡабат
Һыны ҡатҡас,
"Илдархан!" тип илап түгелеп...

Нәҙер һүҙен был тәбиғәт һаҡлай,
Васыяттар ергә яҙылған.
Ҡәүем тарихына һыйынығыҙ,
Киҫкен елдәр иҫһә сағылдан.

Әләм күтәрерлек көндәр тыуа,
Тик нимәлер эстән һыҡтаны...
Был быуатта милләт тарихын да
Бергә яҙыш беҙгә, Аҡтаныш!
Беҙ бит һиңә бик яратып килдек,
Бик һағынып килдек, Аҡтаныш!

### Ҡыҙҙарыбыҙ

*Халҡыбыҙҙың ғәзиз ҡыҙҙары - Рабиға*
*Ҡушаеваның, Һәҙиә Дәүләтшинаның,*
*Фатима Мостафинаның рухтары*
*шат булһын...*

Асмандарҙы нурлап ауаз килә -
Шишмә кеүек тауыш сыңынан
Ябыҡ шаршау асылғандай итә,
Баш ҡалҡыта йөҙҙәр яңынан.

Телмәрҙәрҙә ҡылыс сыңлап китә,
Быҕауҙарын өҙә халыҡтың.
Әй, Рабиға апай, Ҡушаева,
Милләтеңдең ҡайһы батырынан,
Нәҫелеңдең ҡайһы аҫылынан
Быуаттарға яңғырар һүҙ оттоң?

Кемдәр һалды һинең асылыңа
Гүзәл заттың хоҡуҡ тәҡдирен?
Башҡорт ҡыҙы майҙан тотҡанда ла
Һис һанламай булмаҫ үҙ ирен!

Бөтә донъя киңлектәре - алда,
Ул замандың сере асылды.
Үҙ яҙмышын үҙе яҙа ҡыҙҙар,
Азатлыҡ та һынай асылды.

* * *

Сигеү итеп сигелгәнме яҙмыш
Милләтеңдең хәтер зауҡына?
Һоҡланырһың!
Ҡабат һоҡланырһың
Һамарҙарҙың ҡыҙҙар халҡына!

Ниндәй нәзәкәтлек!
Ниндәй ҡөҙрәт!
Күкрәгеңә ҡыҫып яҙғаның
Быуаттарҙы быуаттарға ялғап,
Киләсәккә табан атланың.

Сәнғәт әҫәреләй һәр бер көнөң.
Тетрәндергес ғүмер һынауы.
Сабыр нәзәкәтлек өҙә алған
Ҡанлы мөһөр һалған бығауын.

Һәҙиәләй Ергә килгәнеңдә,
Һөйөү менән тулғас ҡарашың,
Күҙең йомғанда ла киткәнһеңдер
Был донъяны һөйөп, яратып.

Күҙең йомғанда ла Ырғыҙ йырын
Көйләгәндер һинең ирендәр.
Әүлиәләй генә асылыңа
Яҡты таңдар алдан күренгән.

Һин белгәнһең, һин тойғанһың бит ул
Һәҙиәле халыҡ яҙмышын.
Йөрәгемде мөхәббәткә сорнай
Ырғыҙҙағы яҡты һағышың!..

* * *

Ә мин һеҙҙе бик йыш күрәм кеүек -
Барған һайын ғәзиз мәктәпкә,
Әйтерһең дә, Һеҙҙең һынсыл ҡараш
Һәр бер килеүсене күҙәтә.

Әйтерһең дә, милли белем илен
Һаман ҡурсый Һеҙҙең рух, иман.
Ырғыҙ буйҙарынан - Һеҙҙең дарман!
Ғалим апайыбыҙ - Фатима!

Заманынан алда фекерләгән
Үҙ дәүерен ҡурсыр һүҙ табыр:
Ғәзиз ҡалаһында башҡорттары
Белем усағылай тоҡаныр.

Йырын йырып, бөртөк-бөртөк тамғас,
Хасил булған ана даръялар.
Һеҙҙең исем эргәһендә һәр саҡ
Башҡорт балалары йыйылыр.

Тик бер генә хыял ҡабынһа ла
Халыҡ тигән милли асманда,
Бары ошо нурға ынтылғандар,
Уның аша донъя асҡандар.

Мәғариф һәм бары белем эҙләп
Килгән Һеҙгә халыҡ һәр остан.
Һеҙ бөгөн дә милли белем ҡото,
Мостафина апай - министр!

### Йылайыр

*Тупраҡ - беҙҙең атабыҙ,*
*Тупраҡ - беҙҙең анабыҙ.*
*Ш. Бабич.*

Таң һыҙыла. Сөңгөлөнән күктең
Ергә ҡыҙыл таҫма һуҙылды.
Мең туғыҙ йөҙ ун туғыҙҙың яҙы...
Һауа
Ҡандай булды микән ул йылды?

Күк Ирәндек һырттарына ҡабат
Ятты микән зәңгәр монарҙар?
Хистәренән ташып, үҙәндәргә
Күҙ-йәш аҡты микән Һаҡмарҙан?

Ҡараштары нуры һеңде микән -
Бер балҡышы ҡалған офоҡта.
Һуңғы һулыш алған ере - был яҡ,
Йөрәкһетеп уйҙар ойота.

Йырлы булған өсөн был төбәкте
Йылайыр тип баба атаған.
Тик исемен ҡылыс телеп үткән:
Шиғыр көмбәҙенән ҡан тамған.

Йырлы ғына микән был Йылайыр,
Зарлы ғына микән был төбәк?
Йыназаһын күрмәй, һыҡрап-һыҡтап,
Ауаз биргән бынан мең һөйәк.

Йыры менән тупраҡ имләгәндер
Балаһының тәрән яраһын.
Ҡыҙылдар бит ҡыҙыл ҡанды ҡонған -
Ишетәһеңме һин, Илаһым?

Яҙғы таңдар үтә һалҡын була,
Ҡарға ятып илай яҙ еле.
Ҡылыс тауышынан бәндәләрҙең
Ауаздары ята күмелеп.

Нисәмә йыл бында ер иланы,
Фәрештәнең талды ҡанаты.
Ярамаймы артыҡ мөхәббәт тә:
Йөрәктәрҙе киткән ҡанатып.

Әүлиәләр уның асылдары -
Азат дәүләт өсөн көрәштә
Шиғырҙарға йөрәк моңон һалған,
Ул бер йәнен бүлеп өләшкән.

Ер илауын Күктәр ишетмәйме,
Тоймаймы ни халыҡ хәтерен?
Тамған ҡандай, йәндән һарҡып сығып,
Әйтә милләт бер көн әйтерен.

Илаймы ер?
Әллә йырлай микән?
Ясин сыға, ана, муллалар.
Табуттарға һалып аҫыл затты
Замандаштар яндан уҙалар.

Йырындарға тулған көрттө йырып,
Аҡһалдар атлай эркелеп.
Әйтерһең дә, ғәзиз шағирҙары
Бына бөгөн ҡайтҡан терелеп.

Һуңғы юлға оҙатыу ҙа, ана,
Әйләнгәндәй, оло табышҡа.
Уның рухы йәнә еңеп сыҡты
"Ваҡыт һәм йән" тигән алышта.

Нисәмә ҡат кире ҡағылһа ла,
Ул йылмайҙы, гүйә, Күктәрҙән.
Әйтә кеүек йәне: "Бынһын да
Сабыр ғына, өнһөҙ күтәрәм!"

Ишетелде ауаз, тирә-яҡҡа
Мандолина моңо ағыла.
Ниндәй хикмәт: зәңгәр һауаларҙа,
Ҡышты айҡап, бөркөт ҡағына.

Ғәзиз һөйәк ҡәҙер күрҙе тиеп,
Шатлығынан әллә йырлай ер.
Улым ҡайтты ҡосағыма тиеп,
Моңланғандыр әле Йылайыр.
Йырға тулышҡандыр ошо ер.

✓ *Бәлки, инәй минең тоғрологомдо тикшергәндер, бәлки, нимәгәләр ярһыған йөрәгем баҫырға теләп, тыуған яғының бер ярсығына, әсәһе яғынан туған тейешле булып сыҡҡан ҡыҙ балаға бер иҫтәлек ҡалдырмаҡсы булғандыр...*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙЫЛМАЙЫП ЙӘШӘ

■ Ғалимдар тоҙ ҡулланмай ғына риҙыҡҡа тәм бирә торған ысул уйлап тапҡан. Ғәҙәти тоҙҙо алыштыра торған ҡатнашмала кальций хлориды бар, әммә ул сәләмәтлеккә зыян килтермәҫлек күләмдә. Эксперимент барышында аҙыҡ-түлек сәнәғәтендә әле үк ҡулланылған ҡатнашмалар ҙа тикшерелгән. Улар нигеҙҙә кальций хлориды һәм калий хлориды булған ҡатнашмалар. Уларҙың икенсеһе даими ҡулланғанда ҡан баҫымын түбәнәйтә ала, әммә тәме насар. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларға 78 процентҡа натрий хлориды һәм 22 процентҡа кальций хлоридынан торған ҡатнашма оҡшаған. Тәме буйынса ул тоҙҙан айырылмай, тик ябай тоҙ кеүек ҡан баҫымын күтәрмәй.

■ Һуңғы мәлдә биотехнологик һәм аҙыҡ-түлек компаниялары яһалма күкрәк һөтө булдырыу менән шөғөлләнгән проекттарға күпләп аҡса түгә икән. Был балалар өсөн түгел, ә өлкәндәргә тәғәйенләнгән һөт буласаҡ. Күкрәк һөтөндәге файҙалы матдәләр ашҡаҙан-эсәк трактында кәрәкле бактерияларҙың артыуына килтерә. Хатта ҡайһы бер компаниялар бындай өҫтәмәләр уйлап тапҡан да инде. Эксперттар фекеренсә, аш һеңдереүҙе яҡшыртыусы саралар сегментында революцияны тап ошондай йүнәлешле ризыҡтар яһаясаҡ. Улар етештереүселәргә күп аҡса ла килтерәсәк, тип фаразлана, мәҫәлән, DuPont компанияһы уйлап тапҡан өҫтәмәһе өсөн йылына 5 млрд доллар аласаҡ, тиҙәр. Әлегә һүҙ һөт турағында ғына бара, әммә ризыҡтарҙың төрөн арттырып, килемде күбәйтеү мөмкинлеге бар, тип иҫәпләй эксперттар.

■ Кардифф университеты тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тамаҡ ауыртҡанда һура торған рецептһыҙ һатылған кәнфиттәр сирҙәрҙең антибиотиктарға ҡаршы тороусанлығын көсәйтә ала. Сөнки бындай ни дарыу, ни кәнфит булмаған сараларға антибиотиктар өҫтәйҙәр икән. Әммә шуға ҡарамаҫтан, улар ауырыуҙы дауалай алмай. Һөҙөмтәлә, бактерия тағы ла көслөрәк булып китә, нығыраҡ үҫешә һәм антибиотиктарға ҡаршы тора ала. Шуныһы ла бар, вирустар тыуҙырған сирҙәрҙе антибиотикλы саралар менән дауаларға ярамай.

■ Америка ғалимдары ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргән. Ул 50 йылға һуҙылған. Кешенең йөҙөндәге хистәре менән уның күңелендәге кисерештәре тура киләме икәнлеген өйрәнгән улар. Әгәр ҙә кеше йылмая икән, ул шунда уҡ үҙен бәхетле тоя башлай, ә күңелһеҙләнеп ултырһа, ысынлап та төшөнкөлеккә бирелә, имеш. Әммә был ғына тышҡы билдәләр, мәҫәлән, депрессияны дауалауға мөмкинлек бирмәй. Һәр хәлдә, тикшеренеүҙәр шуны дәлилләй: аң менән тән бер. Тик Америка ғалимдары менән бар эксперттар ҙа килешмәй. Әйтәйек, көсләп йылмайыу кәйефте яҡшыртмай. Бынан тыш, етди ҡиәфәт кенә кешене кәйеф ҡырылыуға килтерә алмай. Шуға ла был юҫыҡта бәхәстәр әлегә тамамланмай, ахыры. Нимә генә булмаһын, барыбер ҙә йылмайып йәшәү тормош ауырлыҡтарын еңелерәк кисерергә ярҙам итә. Быныһы инде күптән һыналған.

МАТУР ХӘТИРӘ

# ИЛАҺИ ИХЛАСЛЫҠ

**Зәйнәб инәйем тураһында мин күптән яҙырға тейеш инем. Әммә, үҙе әйтмешләй, "Аллаһ шаһит: уйҙарымдың сиге юҡ, ҡәләмемдең осо юҡ".**
**Ҡәҙимге аҙымдан - уның менән беренсе мәртәбә осрашыуҙан башларға кәрәктер.**



Мин Өфөлә 1-се республика мәктәп-интернатында (хәҙер Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты) уҡып йөрөгән мәл. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытыусыбыҙ Фәрзәнә Фәйзи ҡыҙы Абдуллина Зәйнәб Биишеваны балалар менән осрашыуға саҡырҙы. Тамаша залында үткән ҙур кисәнең барышын бигүк хәтерләмәйем. Бығаса уҡып-ишетеп кенә белгән оло яҙыусыны ҡаршымда күреү миңә ныҡ тәьҫир итте. Бигерәк тә шаҡ ҡатырғаны - уның минең Байауылында йәшәгән инәйҙәремә ныҡ оҡшаған булыуы... Тыуған яғын һағынып йөрөгән интернат балаһына бүтән нимә кәрәк? Мин ул һөйләгәндә инәйҙәремде, өләсәйемде уйлап тик ултырҙым. Өләсәйем мине, үтә ҡыҙыҡһыныусан һәм телдәр ейәнсәрен, "Зәйнәб апайым һымаҡ яҙыусы булыр әле", тип яратты. Байауылы минең тыуған ауылым Үргә Һаҙға алты саҡырымлап булыр. Ул Эйектең уң ярында, ә беҙ - һул яҡтағы һырттар аръяғында, һәр миҙгелдә төрлө төҫкә инеп, Уралтау армыттарын яҡтыртып, ҡабарып ятҡан Олотау итәгендә.

Эйек, тигәндән. Зәйнәб инәй ғүмере буйы ошо туған йылғаһына дан йырланы. Сәйгә йомшаҡ Эйек һыуы менән, гүйә, бөтә илде һыйланы, туғайының емеш тәмен бөтә Башҡортостанға тәмләтте. Иң мөһиме, Эйек буйында тыуып-үҫкән батырҙарҙы һәм матурҙарҙы, аҡыллы һәм шиғри күңелле инәйҙәрҙе, еңгәләрҙе, әхирәттәрҙе, тоғро һүҙле, саф йөрәкле егеттәрҙе оло әҙәбиәткә сығарҙы. Ул шундай мөғжизәле әҫәр тыуҙырҙы - уны Эйек буйында ғына түгел, бөтә Урал буйында, бөтә илдә йәшәгән кешеләр яратып ҡабул итте, сөнки Зәйнәб инәйҙең ижадында "кеше күңеле" тигән илаһи күренеш көҙгөләгә кеүек сағыла.

Мин дә Зәйнәб Биишева менән осрашыуҙа Эйек туғайҙарын яңынан кискәндәй булып ултырғайным. Кисәнән һуң Фәрзәнә Фәйзи ҡыҙы яҙыусыны мәктәп-интернаттың "Шишмә тауышы" түңәрәгенә йөрөгән, шиғыр-хикәйә яҙышҡан уҡыусылары менән айырым һөйләшергә класс бүлмәһенә алып инде. Бында аулаҡ, унлап ҡына бала. Зәйнәб инәй бөтәбеҙ менән рәттән танышып сыҡты. Исемде, ҡайһы яҡтан килгәнде һораны. Мин тыуған ауылымды әйткәс, һәйбәт, тип ҡуйҙы. "Байауылын беләһеңме?" - тип һораны. "Иң матур ауыл ул, бигерәк тә Эйек буйы. Һеҙҙең урында булһам, мин шунда йәшәр инем", - тип, алабарман хистәремде белгерттем дә ҡуйҙым. Инәйҙең төҫө үҙгәреп, моңһоуланып китте: "Матур ҙа ул, ҡайтып ҡына булмай... Унда миңә тигән өйҙөң тупһаһы юҡ, ишек-тәҙрә уйылмаған", - тине. Уның был һүҙенә мин шаҡҡаттым. "Нисек инде?" - тип һораным. "Белмәгәнең яҡшы ундай өйҙө", - тине ул. Артабан беҙҙекеләр уға шиғыр уҡый башланы. Иғтибар менән тыңлап ултырҙы инәй. Бер шағир малай менән нимәләр һөйләшеп китте. Минең фотоаппаратым бар ине. Ауылда уҡ атайым алып биргән "Чайка" тигән фотоаппарат бик әрһеҙ була торғайны. Плёнка ҡуйһаң, 72 кадр төшөрә. Аҡлы-ҡаралы булһа ла, фотолар үҙебеҙгә ифрат ҡәҙерле. Мин фотоға төшөрҙөм. Шунан яҙыусыны оҙаттыҡ. Хушлашып бөткәс, ул миңә: "Беҙгә килеп йөрө, ҡыҙым", - тине. Бына шулай таныштыҡ. Тик фотолар, нишләптер, сыҡманы.

Зәйнәб инәйҙең апаһы Хафаса инәй мәктәп-интернатта вахтёр булып эшләне. Мин уның янында һөйләшеп ултырырға ярата инем. Ул да мине, туған һөйөк, тип, тартып торҙо. Зәйнәб инәйҙең бөтә тормошон, булмышын, балаларын, дуҫ-иштәрен, уныш-мәшәҡәттәрен миңә һөйләне. Йылдар буйы йыйылған серҙәрен систе ул. Бер заман мин Зәйнәб инәйгә уның күҙлегенән, һыңар күҙе аша күргән ҡарашы менән ҡарай башланым хатта. Туғандарса, апайҙарса - йәлләп, шелтәләп, үпкәләп, ныҡ үҙ итеп ҡарау ине ул. Хафаса инәй мине бер нисә мәртәбә фатирҙарына алып ҡайтты. Береһендә Зәйнәб инәй ҙә өйҙә ине. Ҡайҙандыр ҡайтып төшкән. Хафаса инәй ғәйепле тауыш менән: "Беҙҙең туғаныбыҙ ул. Үргә Һаҙҙыҡы. Сәлих ағайҙың ҡыҙы Миңлебаныуҙың Гәүһәр тигән ҡыҙының ҡыҙы", - тип таныштырырға ашыҡты. Әммә Зәйнәб инәй мине онотмағайны. "Беҙ был һылыу менән таныш инде. Нишләп Байауылында йәшәмәйһең, тип, мине ауылға ҡыуҙы ул", - тип һалды. Мин йәнә аптырап киттем. "Ҡыуманымсы", - тигән булдым. "Һин ҡыумаһаң да ҡыуыусылар етерлек. Ҡояш сығармаҫтар ине. Кәйефем юҡ. Ҡайтып төшөү менән йән өҙгөс яңылыҡтар, йөрәк ярғыс хәлдәр ябырылды", - тине яҙыусы. Нимәгә был осрашыу ныҡ иҫемдә ҡалған, тиһәгеҙ, мин уны һүҙмә-һүҙ тиерлек көндәлегемә яҙып ҡуйғанмын. Артабан тағы бер фаһемле ваҡиға булды. Сәй эсеп бөткәс, Зәйнәб инәй мине икенсе бүлмәгә саҡырҙы. Тәҙрә төбөндә ике бәләкәй генә тоҡсай ята, кисет хәтле генәләр. Беҙҙең яҡта "моҡсай" тиҙәр. Зәйнәб инәй диванға барып ултырҙы ла: "Шул ике моҡсайҙы ла ас та эсендәген һана, күпме ҡалды икән?" - ти. Асһам, аптырап киттем. Көмөш тәңкәләр! Мин уларҙы ҡәрсәйемдең сәс үрмәсе осонда, камзулында ғына күргәнем бар. Ә бында - өс ҡуш ус самаһы булыр! Һананым. "Быларҙы нишләтергә булыр икән?" - тип һорай инәй. "Белмәйем. Былай ҙа матурҙар бит, нишләп боҙорға?" - тинем. "Юғалып ҡуймаҫ борон үҙемә алҡамы, беләҙекме эшләтәйемме икән, тик яталар ҡоро бушҡа". Мин ни әйтергә лә белмәнем. Шунан инәй ҡапыл ғына былай тине: "Ҡыҙым, ал бер-икаүһен, балдаҡ эшләтеп кейерһең". Үҙе миңә һынап ҡарап торғандай. Ә мин шундай матур сылтырап йырлап-уйнап торған боронғо көмөш тәңкәне ниндәйҙер балдаҡ яһап өсөн сағылдатып илатып йәмшәйтә һуғыусыны күҙ алдыма килтерҙем. "Юҡ, кәрәкмәй миңә балдаҡ", - тинем. "Ал, беләҙек эшләтерһең. Уның өсөн тәңкә күберәк китә китеүен, шулай ҙа ал", - тине инәй. "Юҡ, мин беләҙек яратмайым. Сәғәт тә таҡҡаным юҡ", - тием. Ҡыҫҡаһы, алманым, ҡырҡа баш тарттым. Рәхмәт тә әйтмәнем шикелле. Сөнки инәйҙең ҡыҫтауында "Йоморо-йоморо йомғағым" әкиәтендәге мәскәй әбейҙең ҡыҙҙы төрлөсә һынауын ишеткәндәй булдым. Берсә бейетә, берсә ҡоймаҡ ҡойҙорта, берсә һандыҡтарҙы һайлата... Эй, беҙҙең бөйөк өләсәйҙәр мәктәбе, халыҡсан, күңелсән, илаһи мәктәп! Бәлки, инәй минең тоғрологомдо тикшергәндер, бәлки, нимәгәләр ярһыған йөрәгем баҫырға теләп, тыуған яғының бер ярсығына, әсәһе яғынан туған тейешле булып сыҡҡан ҡыҙ балаға бер иҫтәлек ҡалдырмаҡсы булғандыр... Әйткәндәй, ҡыҙым, тип ауыҙ тултырып, ниндәйҙер аһәң менән өндәшә ине ул. "Их, һинең кеүек кенә бер ҡыҙым булһасы! Булманы шул. Бабайым: "Зәйнәб, беҙҙең тоҡом шулай - тәүҙә гел ир балалар тыуа ла, шунан ҡыҙҙар тыуа башлай. Бишенсеһе ҡыҙ буласаҡ, бишенсеһен алып ҡайтайыҡ, ҡыҙлы булайыҡ", - тип әйтә торғайны ла ул. "Ҡуй, кәрәкмәй, тағы малай була ул", - тип ризалашманым. Ярай, һин ҡыҙым булғас та шөкөр", - ти торғайны.

Ә көмөш йөҙөктә миңә Хафаса инәй бүләк итте. Мин бер каникулдан мәктәп-интернатҡа һуңлабыраҡ килдем. Ҡыҙҙар: "Хафаса инәй һине таптыра, Сәрүәр нишләп оҙаҡлай, нишләп юғалды, килмәй ҡуймаһын, ти..." - тип ябырылды. Мин тиҙ генә сисендем дә саптым инәй ултырған вахтёр бүлмәһенә. Бөрөшөп кенә тәҙрә буйында ултырған була, үҙе нишләптер бәүелеп-бәүелеп китә... Ҡарт ине бит инде Хафаса инәй. Пенсия аҡсаһы сыҡмаҫмы, тип, Зәйнәб инәй өлкәнәйгән апаһын эшкә урынлаштырҙы. Үҙе шуға ифрат ғәрләнде, апаһын йәлләне. Ҡартлыҡ өсөн генә пенсия бирелмәй, стаж кәрәк, имеш. "Эшләтһәм - кешенән оят, эшләтмәһәм - пенсиянан мәхрүм була", тип әсенә торғайны. Хафаса инәй мине күреп ҡыуанып китте, һикереп тороп ҡосаҡлап алды. Иланы. Һыңар ғына күҙенән тупырлап йәштәре ағып китте. Бер күҙе сәсәктән һуҡырайған, алып ташлағандар, Зәйнәб инәй яһатып биргән яһалма күҙе кейә алмай икән. Сәсәктән шаҙраланып ҡалған йөҙөнә, һуҡыр күҙенә мин бик ҡарарға тырышмай торғайным. Кешенең китегенә тура ҡарарға ярамай, тиҙәр бит. Әсәйем бер банка ҡаймаҡ ебәргәйне. Хафаса инәйгә шуны тапшырҙым. Ул ҡаймаҡты бармаҡ осо менән алып яланы ла тағы үкһей башланы. "Әллә нишләп һине, бүтән уҡырға килмәй ҡуйһаң, тип ҡурҡтым. Нишләп оҙаҡланың?", - тип һамаҡлай. Бер нисә көндән ул мине дәрестән үк ҡаршыланы ла бүлмәһенә алып инде. Йөҙә тантаналы, шат ине. "Ҡыҙым, һиңә бер нәмәкәй

✓ ***Зәйнәб инәйҙең тура һүҙле булыуы, ҡайсаҡ ҡаты бәрелеүе тураһында билдәле. Уратып-суратып тормай ине шул, теле - алмас, фекере йәшен кеүек салт ине. Кешене тиҙ танып-белә, теүәл характеристика бирә.***



бирәм. Ҡурҡма, үҙемдеке. Минән бер йәдкәр булһын. Зәйнәбкә әйтмәнем", - тине лә, бармағынан һурып алып миңә бер йөҙөк кейҙерҙе. Йәшел ташлы көмөш йөҙөк. Ул әле лә миндә һаҡлана.

Шулай, Зәйнәб инәй тураһында яҙам, тиһәң, уның ғаиләһе, туғандары, дуҫтары хаҡында телгә алмай булмай. Кешенән айырылмай ғына түгел, кеше менән ҡайнап йәшәне бит ул. Телефоны тынмай, кеше өҙөлмәй, фатирында тормош гөрләп торор ине.

Уҡыусыларҙы тамамлап, телевидениела эшләй башлаған та, мин Зәйнәб инәйгә киттем. Уның Мәскәүҙән ҡайтҡан ваҡытын саҡ көтөп алдым. Инәй мине ҡотланы. Ҡайҙа йәшәүемде һораны. Бер әбейҙә фатирҙа тороуымды әйткәс, ғәҙәтенсә, йәнә кеше ҡайғыртырға кереште: "Нишләп ниндәйҙер әбейҙә торабаһың, әйҙә, Заһир менән (ул ваҡытта сәнғәт институты ректоры булып эшләгән Заһир Исмәғилев - **С.С.**) һөйләшәм. Мине тыңлай ул, ятаҡтан урын бирер". "Куй, инәй, минең әбейем хатта һәйбәт, эшемә лә яҡын", - тием. "Юҡ, кешелә йәшәү анһат түгел, үҙ башымдан кисергәнмен. Фатирҙа торған кешегә лә, тотҡан кешегә лә Алла ярҙам бирһен", - тип, Заһир Исмәғилевҡа шылтыратты. Белеп торам, ятаҡ мәсьәләһе - мәңге наҡыҫ, мәңге икеле... Сәнғәт институты ятағын, нишләптер, өнәп тә бөтмәйем. Етмәһә, мин - мәктәп-интернатта дүрт йыл, вузда биш йыл, йәмғеһе туғыҙ йыл ятаҡта йәшәгән кеше, саҡ бисмиллаға аулаҡ ҡына фатир тапҡанмын. Телецентр артындағы ауыл өйөндә йәшәгән иҫ киткес бай күңелле Хапса Фазылова тигән әбейҙә торам. Уның баҡсаһы, тәҙрә тулы гөлдәре, манныйҙан бешергән ҡоймаҡтары, бигерәк тә төндәр буйы һөйләгән хикәйәттәре миңә шул тиклем оҡшай, китеү тураһында уйлаған да юҡ. Минең теләк ҡабул булды - ректор ағай инәйҙең һорауын кире ҡаҡты. Мин шатланып ултырам, ә инәй ҡара көйҙө. Әллә минең ятаҡһыҙ ҡалғаным өсөн көйөндө, әллә үҙенең һүҙе һүҙ булмаған өсөн гәрләнде. Иллә мәгәр ошо хәлдә ул үлгәнсе онотманы, минә күргән һайын Заһир ағайға үпкәһен әйтеп ҡуя ине.

Зәйнәб инәйҙең тура һүҙле булыуы, ҡайсаҡ ҡаты бәрелеүе тураһында билдәле. Уратып-суратып тормай ине шул, теле - алмас, фекере йәшен кеүек салт ине. "Минә үсегеп, үпкәләп йөрөйҙәр ҡайһы берәүҙәр. "Зәйнәб апай әрләй", тип, минең исемемде һаталар, теләһә кемгә һөйләп, ошаҡлап китәләр. Ахмаҡтар! Йән көйөктәре! Нишләп мин әрләйем, ти? Мин тураһын, дөрөҫөн әйтәм. Мин әйтмәһәм, кем әйтә ул алйоттарға? Дошман көлдөрөп әйтә, дуҫ илатып әйтә, тигәнде белмәй микән әллә улар?.."

Кешене тиҙ танып-белә, теүәл характеристика бирә. Ҡайсаҡ бер һүҙ менән кемдәлер йә ҡалҡыта, йә батыра. Мин уның үҙенең баһаһын белгәнең, ижадын алға ҡуйғанына гел һоҡландым. Икмәк түмен белмәгән һәйбәт икмәк бешереүсе булмаҫ, тел түмен белмәгән һәйбәт яҙыусы булмаҫ. Миңә йәшлек дәфтәрҙәрен дә уҡытты. Ауылдарҙа йөрөгәнендә нисек итеп һирәк осрай торған һүҙҙәрҙе тапҡан, мәғәнәләрен аңлаған, ниндәйҙер ваҡиғаларҙы, исемдәрҙе ҡыҫҡаса теркәп ҡуйған... Бигерәк тә башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады өлгөләрен йыйған - мәҡәл, әйтемдәр, йырҙар, легендалар, әкиәттәр... Үҙенә оҡшаған сюжеттарҙы әҙәби әҫәр итергә йыйынып йөрөй. Бигерәк тә бер әкиәтте ҡатҡат телгә ала. Ул да булһа - "Күкен" әкиәте. Күкен - кәкүк тигәнде аңлата. Етем ҡалып илаған сабыйға әсәһе кәкүк булып кире осоп ҡайта... Эй, был етемлектең хәсрәте! Өҫ йәшендә әсәйһеҙ ҡалған Зәйнәб инәйҙең ғүмер буйы йөрөгән һыҙлатҡан, өмөтөн наҙлаған һағыш-хыялы булған бит ул "Күкен"!

Үҙ ижадының баһаһын белде, тип тағы ҡабатлап әйткем килә. Үҙенең шундай ауыр замандарҙа ни мөғжизә менән иҫән ҡалыуына ул ғәжәпләнеп тә, ҡыуанып та йәшәне. Шуға күрәме, Аллаға ышанды, йәшәү көсө, тәме-сәме, ғәме-йәме тәрбиәләгән туған халҡына рәхмәтле булды. Шул халыҡҡа ул ижады менән хеҙмәт итергә үҙен бурыслы һананы. Был - уның өсөн ҡупырыҡ һүҙҙәр түгел ине. Әллә күпме йәшәгәс, күп нәмәне сағыштырып, төрлө дәрәжә, төрлө мөнәсәбәттәрҙе күреп, ул үҙенең ихлас ышанған совет власы түрәләренең ябай халыҡҡа һәм халыҡҡа фиҙакәр хеҙмәт иткән ҡайһы берәүҙәргә ғәҙелһеҙ ҡарашы менән ризалашманы. Ул туған халҡына, уның ғәзиз ул-ҡыҙҙарына аяҡ салған власть вәкилдәренә ҡарата ысын мәғәнәһендә баш күтәрҙе. "Улай ҙа мин әйҙә ултырам, юғиһә, мине лә күптән үлтертерҙәр ине", - ти торғайны ул үҙенең рухташ-көрәштәштәрен һағынғанда. Һәҙиә Дәүләтшина, Рәми Ғарипов, Сәғит Агиш, Баязит Бикбай кеүек уҙамандар уның теленән төшмәне.

Мин уға бик йыш бара алмайым, телевидениела эш тығыҙ бит инде. Уны ҡайҙалыр алып барғым, күңелен күтәргем килә. Телестудия директоры булып Фәнил Ҡоҙаҡаев эшләгән саҡ. Индем дә тураһын әйттем. "Инәй өйөндә яңғыҙ зарығып ултыра, баҡсаһына алып барып ҡайтайым, машина бирегеҙ". Рәхмәт Фәнил Шәмсетдин улына, бер һүҙҙән аңланы... Инәйҙе өйөнән алып сығып китеүе үҙе бер тамаша. Башта ул ризалашмай, һаулығына зарлана. Айвайына ҡарамайһың инде, ана, тиһен, машина көтөп тора, һинең өсөн генә бирҙеләр... Ниһайәт, юлға сығабыҙ. Ҡайҙа? Әлбиттә, Аҡманға! Яҙыусылар дачаһына! Инәйҙең йорто бар унда, баҡсаһы! Баҡсаһында - аласығы, аласығында - күмер самауыры!.. Мин унда электән булғаным бар. Хафаса инәй менән дә, Ғәзиз олатай, Тельман ағай менән дә барғыланым. Инәй бик ярата Аҡман урманын, ҡайынлыҡты, күршеләрен һағына...Мин юл буйы йырлайым. Уның һүҙҙәренә яҙылған ғәжәп матур, күренекле йырҙар бар бит. Абдулла Хәлфетдиновты инәй айырыуса йыллылыҡ менән телгә алды. "Ҡайтыр инем", "Алтын балдаҡ", "Миләш", "Гүзәлдәрҙәнгүзәл әсәләр", "Илап тыуһам да мин..." һ.б. Инәй үҙе лә йырлай ине. Фатирында ла, баҡсаһында ла оҙон башҡорт көйҙәрен талғын ғына көйләп йөрөй. "Төйәләҫ", "Зөлхизә", "Әллүки"... "Әллүки" тигәндән, Зәйнәб инәй Ғабдулла Тукайҙы бик ярата ине. Көтмәгәндә генә Тукай шиғырын ҡабатлап ҡуя:

*Ҡайтманы үс, бөттө кәс,*
*һынды кылыс - шул булды эш:*
*Керләнеп беттем үҙем,*
*донъяны паклай алманым.*
*Бармы ни беҙҙә ғөмүмән сын*
*кеше кәҙерен белеү?*
*Беҙ уны ҡайҙан беләйек,*
*мескен үлеп аңлатмағас!*

"Тукай шиғриәте - иң тәрән, иң нескә шиғриәт", ти ҙә, илһамланып, тағы шиғыр һөйләп алып китә. "Кәмһетелгәндәр" романының һәр бүлегенә эпиграф итеп Тукай һүҙҙәрен алған бит ул. Остазы һәм рухташы, серҙәше һәм таянысы булғандыр уға бөйөк шағир.

...Зәйнәб инәйҙең баҡсаһында иң ғорурланғаны - еҙәй ағастары (боярышник). Өйҙән дә бейек булып үҫеп киткән еҙәй уға бала сағын, Әйек туғайын хәтерләтә. Инәй еҙәй ярата. Үҙе ашай, үҙе һөйләй... "Беҙҙә ас үлемдән ҡотҡарыусы бит ул Әйек туғайы. Үлән, емеш ашап, тере ҡалдыҡ. Яҙ ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫтән яр башына барабыҙ. Һап-һары булып сукланып сәскә атҡан һарымсаҡ көтә! Әтмәкәй шундай тәмле, һутлы... Шунан китә кәзә һаҡалы, ҡуҙғалағы, кул йыуаны! Ҡуян тубығы - хан һыйы! Беҙ үлән ашап үҫтек. Йәй буйы туғайҙағы еләк, ҡарағат, муйыл - беҙҙеке, Хоҙай беҙ етемдәрҙе туйғансы һыйлай. Муйыл ашап, ауыҙҙар ҡап-ҡара булып бөрөшә, бөрләгән һутына буялып, биттәр ҡыпҡыҙыл була... Еҙәйҙе беҙ бала башы ҙурлыҡ итеп бер-берегенә йәбештерен йыябыҙ. Бына шундай ожмах баҡсаһы бит ул башҡорт иле. Шунан нисек уны ситяттарға бирһен беҙҙең батырҙар? Бирмәй! Йәнен аямай! Уралын бирмәй, Әйеген бирмәй башҡорт! Эй, халҡым ғынам минең!.."

Зәйнәб инәй Биишева тураһында бик күп һөйләргә, бик күп яҙырға була. Ул үҙе ни хәтле генә көслө рухлы, батыр йөрәкле булмаһын, күңеле ифрат нескә, йыйы һүҙгә, иғтибарға мохтаж булды. Бигерәк тә әҫәрҙәрен уҡыусыларҙан, төрлө милләт кешеләренән килгән рәхмәт хаттарына һөйөнөр ине. Һуңғы йылдарҙа күк ҡабағы асылғандай, хөкүмәт башлыҡтары тарафынан уға лайыҡлы ҡараш булды. Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың иғтибарына яҙыусының күңеле күл булды, башы күтәрелеп, ҡарашы асылып ҡалды. Ил башлығының Ил инәһенә мөнәсәбәте ысынында шулай булырға тейеш, әммә элеккерәк ҡайһы бер түрәләр уның йәнен ҡыйнай алғансы ҡыйнаған, күрәһең. Уларға сикһеҙ рәнйеүен йәшерә лә алманы, йәшерергә теләмәне лә.

Инәйҙең мине нисек итеп ҡаршылауын һәм оҙатыуын гел хәтерләйем. Үҙе бер тамаша, үҙе бер һабаҡ ине улар. Беҙҙең халыҡтың ҡунаҡсыллығы, ихласлығы, бөтмөрлөгө менән ҡаршы ала ине ул. Шатлығын йәшермәй, ҡайғы-хәсрәтен бушата. "Һәәй, ҡыҙым килгән дә инде! Яраткан ҡыҙым. Көттөрөп кенә килә бит ул, инәлтеп кенә килә! Йәнәһе, берәү эш эшләй, донъя көтә. Йәнәһе, берәүҙең балалары күп. Миңә оҡшап, өҫ ул тапҡан булған бит әле, эшкинмәгән! Шәп булғас, ҡыҙ тап һин. Ҡыҙ кәрәк! Малайҙар нимәгә ул? Ҡатынына китә лә бара, ә ҡыҙым һине ҡарай..." Шулайтып, шаянын-ысынын бергә ҡушып, ул мине кухняһына саҡыра. Унда ыҡсым самауыры тызылдап ҡайнай башлай. "Инәй, ҡана тиҙ генә иҙәнде һөртөп алайым", - тиһәм, ҡырҡа ҡаршы төшә. "Минең иҙән йыуҙыра торған ҡыҙым һин түгел. Мин һине һөйләшеп ултырырға, ҡара-ҡаршы ултыртып сәй эсерергә саҡырҙым", - ти. Шунан ул миңә арнап, үҙенең яратҡан аштарын бешерә. Табикмәк, һурпа, сөсө көлсә... Мин быларҙы маҡтанып та, ваҡланып та яҙмайым. Инәйҙең изгелекле, кешелекле, ихлас үрнәкле рухы алдында баш әйеп яҙам.

Ул һәр саҡ кешене ҡайғырта белде. Миңә кейенеп йөрөргә ҡуша, командировкаларға һаҡ йөрөргә өгөтләй. "Ярай, ҡыҙым, беҙҙең кеүек ир ҡараған, балалар үҫтергән, хөкүмәт эшендә йөрөгән бисәләр шул 40-50 йәштәргә кеше булып китһә, бик тә яраған", - тигән була ине. Ул әлеге лә баяғы яҙыусылыҡты күҙ уңында тотоп әйтә. "Ҡыҙым, яҙғандарыңды килтер. Уҡып ҡарайым әле. Союзға рекомендация яҙырмын..." -ти. Уның янында ваҡыт үткәне һиҙелмәй ҙә ҡала. Ҡайтырға ваҡыт етһә, ул һуҡрана башлай. "Тағы оҙаҡҡа юғалырһың инде. Юғалма, ҡыҙым, шылтыратып тор", - ти. "Инәй, хәлең нисек, тип һораһам, булмаған хәлдең нимәһен һорайһың, тип ҡыҙмаҫһыңмы һуң?" - тиһәм, рәхәтләнеп көлгән була. Мине ишектән сығарып ебәргәнсе арҡамдан һөйә, сығып киткәс, кире тартып индереп, тағы тупылдатып һөйә... "Ҡыҙымды, ҡыҙымды ғына... Инәйең һағына ла башланы инде, ҡыҙырас ҡыҙыкай, ил ҡыҙырып тик йөрөйһең", - тигән була.

Бына шундай ихлас Кеше ине ул Зәйнәб инәйем. Уның бөтә көсө лә шул ихласлыҡтан ине. Ихлас мөхәббәттән һәм ихлас нәфрәттән... Илаһи ихласлыҡтан.

**Сәрүәр СУРИНА,**
**драматург,**
**Зәйнәб Биишева исемендәге**
**премия лауреаты.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Тын алыу аша таҙарыныу

Тотош организмға саф һауа кәрәк булған кеүек, ул күҙҙәргә лә мотлаҡ. Был хаҡта иҫтән сығарырға ярамай. Күҙҙәр кислород менән тәьмин ителергә тейеш. Күптәр тынсыу бүлмәләрҙә эшләй, бәғзеләр иһә йылы бүлмәләрҙә бикләнеп ултырыуҙы хуп күрә. Шунан да аҡылһыҙлыҡ ғәмәл булыуы мөмкинме икән? Йоғтар, әгәр үпкәләрен елләтеү йәки таҙартыу ихтыяжын һиҙһә, яратҡан тын алыу формаһын башҡара. Күп күнегеүҙәрҙе ошо тын алыу менән тамамлай. Мин тәҡдим иткән вариант иһә үпкәләрҙе еләтә һәм таҙарта, үпкә күҙәнәктәре эшмәкәрлеген ҡуҙғытып ебәрә һәм барлыҡ тын алыу ағзаларына көс бирә, уларҙың сәләмәтлеген һаҡлай. Бынан тыш, ул тотош организмды сафландыра.

Үпкә тултырып тын алығыҙ. Уны бер нисә секунд эстә тотоп тороғоҙ. Ирендәрегеҙҙе һыҙғырырға әҙерләнгән кеүек бөрөгөҙ, әммә уртығыҙҙы ҡабартмағыҙ. Иренегеҙҙә ҡалған ярыҡ аша һауаны ҙур булмаған порциялар менән, әммә көслө итеп сығарығыҙ. Бер аҙға туҡтап тороғоҙ, тын алмағыҙ, һәм тағы ла ҡабатлағыҙ. Был күнегеүҙе үпкәгеҙҙәге барлыҡ һауа сығып бөткәнгә тиклем эшләгеҙ. Тынды көслө итеп сығарырға кәрәклеген онотмағыҙ.

Таҙартыусы тын алыу күнегеүҙәрен күҙҙәрегеҙ көсөргәнешле эшләгәндә 2-3 тапҡыр туҡтап ял иткән ваҡытта эшләргә кәрәк. Күнегеүҙең оҙайлығы - 3 минут.

## Паразиттарҙан таҙарыныу

Күҙ ҡабаҡтарында һәм күҙ эсендә йәшәгән паразиттарҙан ҡотолоу өсөн 30 көн дауамында сирек стакан һыуға 8-10 тамсы әрем төнәтмәһен йәки ҡәнәфер майын (бер киҫәк икмәккә 3 тамсы) эсергә кәрәк. Был курсты йылына 2-3 тапҡыр ҡабатлағыҙ.

## Күҙҙәргә файҙа булһын өсөн нисек уҡырға

Ваҡ хәрефте әҙләп уҡыу күҙҙәр өсөн файҙалы икәнлеген аңларға кәрәк, сөнки улар күнекмә характерына эйә. Әре хәрефте яҡтылыҡ ныҡ булмағанда, китапты күҙҙәргә яҡын килтереп уҡыу енел. Ә бына ваҡ хәрефте улай итеп уҡып булмай, бының өсөн күҙҙәрҙе көсөргәнештән арындырырға кәрәк. Ваҡ хәрефле тексты күҙҙәргә яҡын килтереп уҡыу уларға көсөргәнештән арыныу һөҙөмтәһен бирә. Күрәш пациенттарға ваҡ хәрефтәрҙе ҡарау күнегеүҙәрен тәҡдим итергә була. Һөҙөмтәлә миопия түбәнәйәсәк.

Бер нисә минут ваҡ хәрефле тексты уңайһыҙ шарттарҙа уҡығандан һуң, ҡәҙимге шрифты ғәҙәти шарттарҙа уҡыу еңелерәк буласаҡ. Был ысул менән бер нисә секунд эсендә күҙҙәрҙең ауыртыуын бөтөрөргә мөмкин. Сағыусыларҙы яуаплы ярыштар алдынан күнекмә үтергә тауҙарға ебәрәләр. Унда кислород әҙерәк, күнекмәләр ҡатмарлы, гипоксия шарттарында үтә. Уның ҡарауы, ярыш алдынан тауҙан тигеҙлеккә төшкәс, улар үҙҙәренең дистанцияһын еңел, бер һулышта үтә.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Ҡартайыу сәнғәте шунда: йәштәргә кәртә түгел, таяныс бул; дошманы түгел, уҡытыусыһы бул; вайымһыҙ түгел, аңлаусы бул.*

*(А. Моруа).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ХАЛЫҠ АРТИСТАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**14-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тәнәфес. Ҡаф. Һарытау. Әсмә. Ләйсән. Азимут. Ишәк. Ҡан. Аманат. Урама. Карап. Брахма. Ғәбитова. Акростих. Тула. Рима. Етди. Ниәт. Лиза. Быу.

**Вертикаль буйынса:** Абдуллин. Әмирханова. Айғыр. Һәптән. Отелло. Куб. Нәҙерғолова. Ирина. Талаҡ. Хи. Сафиуллина. Балҡантау. Азамат. Сәкән. Набат. Алма.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 апрель "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**30 апрель "Урал батыр".** Үлемһеҙлек тураһында ҡобайыр. Башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 14.00 12+

**30 апрель "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), драма 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 апрель "Яуҙы еңгән мөхәббәт"** (М. Кәрим), комедия. 12.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**27 апрель "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00 0+
**27 апрель "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). 18.00 16+
**28 апрель "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**28 апрель "Маленький гном"** (И. Альмухаметов). 16.00 0+
**2 май "Большой секрет"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**3 май "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер). 12.00, 14.00 0+



Башҡортостандың халыҡ шағиры
**Рауил Бикбаев**
оҙайлы ауырыуҙан һуң
81-се йәшендә вафат булды.
Ошо айҡанлы халҡыбыҙҙың, әҙиптең туғандарының һәм яҡындарының оло ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

**"Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БЕЙЕҮ ЕҢДЕ

**Стәрлетамаҡ бейеү театры Ҡырғыҙстанда Халыҡ-ара бейеү конкурсының икенсе премияһын яуланы. Башҡортостан артистары "Ағиҙел тулҡындары", "Беләҙектәр" сағыу хореография композицияларын, шулай уҡ "Халҡыма" яңы йыр-хореография композицияһын тәҡдим итте.**

Конкурс 2019 йылда Төрки донъяһының мәҙәни баш ҡалаһы тип иғлан ителгән Ош ҡалаһында уҙҙы. Төрки халыҡтары дәүләттәре үҙҙәренең этник бейеүҙәрен күрһәтте. Конкурста Әзербайжан, Төркмәнстан, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан һәм башҡа илдәрҙән артистар ҡатнашты. Сараны ойоштороусы - ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы. "Беҙҙең өс номер ҙа жюриҙың юғары баһаһын һәм тамашасылар араһында танылыу алды. Бында етәксенең - баш балетмейстер, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Эльвира Дауытованың һәм бейеү театрының һәләтле артистарының хеҙмәте ҙур", - тип белдерҙеләр Стәрлетамаҡ театр-концерт берләшмәһендә.

# АБДРАЗАҠОВТАР ЙЫРЛАЙ

**4-5 майҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Дж. Вердиҙың "Аттила" операһының премьераһы була.**

"Аттила" операһы - ике тапҡыр "Грэмми" эйәһе, Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы, "Алтын битлек" театр премияһы лауреаты Илдар Абдразаҡовтың тәүге режиссерлыҡ эше. Артисты донъяның опера сәхнәһендә Аттиланы кәүҙәләндереү һаны буйынса рекордсы тип әйтергә мөмкин. Төп партияны башҡарыусы Илдар Абдразаҡов ҡатнашлығындағы опералар Нью-Йоркта, Римдә, Барселонала, Монте-Карлола, Санкт-Петербургта, Астанала ҡуйылды. 2018 йылда Ла Скала опера миҙгелен Вердиҙың "Атилла"һы менән асты, төп партияны йәнә Илдар Абдразаҡов башҡарҙы. Премьераның тәүге көнөндә һәм 5 майҙа төп ролде - Илдар Абдразаҡов, икенсеһендә - Башҡортостандың халыҡ артисы Аҫҡар Абдразаҡов, өсөнсөһөндә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Артур Ҡәйепҡолов башҡара. Опера өсөн 400-ҙән ашыу костюм тегелгән, театр оҫталары уларҙы ҡул менән биҙәгән. Әлеге ваҡытта Дж. Вердиҙың "Аттила"һы Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры тарихында иң күләмле опера булмаҡсы. "Миңә режиссер булып сығыш яһарға нимә этәргес бирҙе һуң? Тәү сиратта, атайым Әмир Ғәбделмән улы Абдразаҡов - режиссер. Был спектаклде атайыма бағышлау тип әйтергә лә мөмкин. Быйыл ул үҙенең 85 йәшен билдәләр ине. Ҡәҙерле тамашасыларым өсөн үҙемсә интерпретация эшләгем килде", - тине Илдар Абдразаҡов.

БАҠСА

# ҮҪТЕНТЕГӘ "ТИҘ ЯРҘАМ"

**Был мәлгә, ғәҙәттә, баҡсалағы бар үҫентеләр ҙә уянып, буйға һуҙыла башлай. Әммә араларында яҙғы сағыу ҡояшҡа янған ылыҫлылар, ҡышҡы һыуыҡтарҙа бер аҙ туңған раузалар, сейә ҡыуаҡтары, ботаҡтары һынған алма-грушалар, һис уянырға теләмәгән сәскәләр, йәки тамырҙары кипкән яңы ултыртылған ағастар барҙыр.**

Уларҙың бөрөләре бар, тик ниндәйҙер сәбәптән артабан үҫешергә теләмәйҙәр. Ошо мәлдә ниндәйҙер сара күреп өлгөрмәһәң, был бөрөләрҙең кибеүе һәм үҫентенең һәләк булыуы ихтимал. Уларҙы ҡотҡарыу өсөн 10 л йылы һыуға 1 ҡалаҡ карбамид (мочевина) һалып, зарарланған үҫентенең тамырына ҡойорға кәрәк. Көн йылы булырға тейеш. Бер аҙнанан һөҙөмтә күренер. Һынған ағастарҙа бөрөләр күренер, раузаларҙың да туңған бөрөләре тулышып, үҫә башлар. Һары төҫкә ингән ылыҫлылар ҙа йәшелләнер. Был ысулды бер тапҡыр ҡулланыу ҙа етә. Әгәр ҙә кәрәк тип тапһағыҙ, 10 көндән тағы ҡабатларға була.

Ошо рәүешле насар ҡышлаған күп йыллыҡ сәскәләрҙең, ағастар һәм ҡыуаҡлыҡтарҙың йәшәү көсөн тергеҙеп ебәрә алаһығыҙ. Быны майҙа, ҡабаттан ҡырауҙар төшөү ҡурҡынысы үткәс, эшләгеҙ. Шулай уҡ яңы ултыртылған ҡыуаҡ һәм ағастарға 1-2 аҙнанан һуң һибегеҙ. Йәй аҙағында, шулай уҡ бер миҙгелдә бер нисә тапҡыр былай туҡландырыу тыйыла.

✓ *Ҡырҡҡа тиклем донъяны ҡырырмын, ҡырҡтан һуң бары менән торормон.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәлә).*



ХӘТЕРКИТАП

# ОЛО ТАЛАНТ ЭЙӘҺЕ

**"Кабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" проектының сираттағы геройын - оло талант эйәһе, шағир, ғалим, йәмәғәт эшмәкәрен күптәр белеп тә бөтмәйҙер әле. Башҡортостандың 20-30-сы йылдарҙағы әҙәбиәт, мәҙәниәт, фән һәм йәмәғәт тормошонда ғәйәт ҙур урын алған шәхестәрҙең береһе. Уның "Һәтес-һәтес-һәтес тә! Бигерәк матур бәпес тә!" кеүек халыкcан балалар шиғриәте лә авторһыҙ көйө беҙҙең арала бөгөн дә йәшәүен дауам итә. Проектта шәхестәрҙең тарих архивтарынан, фәнни хеҙмәттәрҙән, музейҙарҙан тупланған фотолары һәм костюмдар буйынса рәссам Әлиә Байрамғолованың кинорежиссер Булат Йософовтың "Беренсе Республика" тулы метрлы тарихи нәфис фильмын төшөрөү майҙансығынан яһаған фотолары тәҡдим ителә.**



*Ғабдулла Амантай.*
*Актер Фәнил Толонғужин.*

**Ғабдулла Сәхипгәрәй улы АМАНТАЙ** (актер Фәнил Толонғужин уйнай) - 1907 йылдың 23 декабрендә Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Үрге Ҡунаҡбай ауылында (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Красногвардейский районы) уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Башҡорт совет шағиры, әҙәбиәт һәм фольклор белгесе, йәмәғәт эшмәкәре. Башҡорт филологияһы фәненә нигеҙ һалған шәхестәрҙең береһе. Башҡорт теле һүҙлектәрен, дәреслектәрен төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша. Уның ғилми хеҙмәттәре милли әҙәбиәтте билдәләү принциптарына, башҡорт фольклорын һәм әҙәби телде өйрәнеү мәсьәләләренә арналған. Шиғырҙары 15 йәштән баҫыла башлай. Тәүге шиғирҙар йыйынтығы 1927 йылда баҫылып сыға, ул "Көрәш йырҙары" тип атала. Үҙ ғүмере эсендә 9 китап баҫтырып өлгөрә.

1926-1928 йылдарҙа "Йәш юҡһыл", "Башҡортостан йәштәре" гәзиттәре мөхәррире. Ленинградта Тарих, философия һәм лингвистика институтының консығыш телдәре факультетында уҡып, 1933 йылда шунда уҡ аспирантураны тамамлағас, Башҡортостанға эшкә ҡайта. 1933 йылдан Милли мәҙәниәт ғилми тикшеренеү институты (хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты) директоры, "Октябрь" журналы мөхәррире. СССР яҙыусыларының Беренсе съезы делегаты. БашЦИК ағзаһы.

1937 йылда "милли баш күтәреүселәр ойошмаһы" составында хөкөм ителгән һәм атылған шәхестәр араһында Ғабдулла Амантай ҙа була. Ғилми тикшеренеү институты директоры булараҡ, билдәле тарихсы, 70 йәшлек академик Матвей Любавскийҙы эшкә алыуы үҙен ҡулға алыуға сәбәпсе булып тора. Бындай "сәйәси күрәғарашлыҡ" Амантайға ҡимmәткә төшә. Ялған донос буйынса ҡулға алынғанда уға бары 30 йәш була. СССР Юғары суды Хәрби коллегияһының 1938 йылдың 10 июлендә Өфөлә үткән күсмә ултырышында Амантай РСФСР Енәйәт кодексының 58-2, 58-8 һәм 58-11 статьялары буйынса ғәйепләнә. Исеме 1957 йылда аҡлана.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!




# "ТУҒАНЛЫҠ" ФЕСТИВАЛЕ...

## Өфөгә дуҫтарын йыя

**"Туғанлыҡ" VII Халыҡ-ара төрки телле театрҙарҙың фестивале 23 майҙан 30 майға тиклем үтәсәк. Фестиваль афишаһына Башҡортостандан, Татарстан, Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тыванан, Ҡырымдан, Хакасия, Төркиә, Үзбәкстан, Алтайҙан, Ғағаузиянан 13 спектакль ингән. Был турала фестивалде ойоштороусылар журналистар менән осрашыуҙа белдерҙе.**

Фестивалде ойоштороу йәһәтенән быйыл яңылыҡтар етерлек. Мәҫәлән, быға тиклем ике баһалама төркөмө - театр тәнҡитселәре һәм жюри айырым эшләй ҙә, аҙаҡтан фекер алышыу һөҙөмтәһендә еңеүселәр билдәләнә ине. Быйылдан улар эксперттар советына берләшә. Шулай уҡ фестивалдең үҙенең президенты буласаҡ. Абруйлы был вазифа "Туғанлыҡ" фестиваленең башланғысында торған Рифҡәт Исрафиловҡа тәҡдим ителгән. Президент үҙенең махсус призын да булдырған. Башҡорт театры үҙенең бер быуатлыҡ юбилейын билдәләгән йылда арабыҙҙан киткән СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Арыҫлан ҡыҙы Мөбәрәкованың исемен мәңгеләштереү маҡсатынан "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһы хәҙер бөйөк шәхестең исеме менән аталасаҡ.

Тағы ла бер мөһим үҙгәреш: быйылдан фестивалдең бер дәүләттән - бер төп дәүләт театры, тигән пункты киңәйтелгән. Фестивалдең художество етәксеһе Олег Ханов билдәләүенсә, положениеның ошо пункты арҡаһында VI фестивалдә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының "Калигула" трагедияһы конкурстан тыш программаға ғына эләгә һәм был баһалама ағзаларында бәхәстәр тыуҙыра. Һөҙөмтәлә, хәҙер республиканың башҡа милли театрҙары ла, дөрөҫөрәге, "Театр яҙы" республика фестивалендә еңеү яулаған спектакль конкурста ҡатнаша аласаҡ. VII фестивалдә Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының "Өс таған"ын конкурс программаһында күрергә була. Республиканың тағы бер театрының - салауаттарҙың да конкурстан тыш булһа ла был фестивалгә мөнәсәбәте буласаҡ. Программа директоры Айһылыу Сәғитова әйтеүенсә, Олжас Жанайдаров әҫәре буйынса сәхнәләштерелгән "Бер, ике, өс..." спектакле миҫалында милли театрҙарҙың барыһын да борсоған туған тел, милли мәҙәниәт мәсьәләләрен уртаға һалып һөйләшеү көтөлә.

Әйткәндәй, фестивалдең программа директоры вазифаһын булдырыуҙың да үҙенең мәғәнәһе бар. Быға тиклем БР Мәҙәниәт министрлығы саҡырыуына ҡатнашыусы яҡ ебәргән спектаклдәр конкурсҡа тиклем айырым һайлап алыу туры үтмәй ине. Быйыл программа директоры спектаклдәрҙе ҡарап, һайлап алыу мөмкинлегенә эйә булған. Шуға ла бәйге бик ҡыҙыу барыр, тип фаразлай белгестәр. Сөнки "Туғанлыҡ" репертуарына инәсәк спектаклдәргә ижади ғына түгел, мәғәнәүи йәһәттән ҙур талаптар ҡуйылған һәм улар үтәлгән дә. Дәүләт театрҙары менән бер рәттән, шәхси театрҙар ҙа ҡатнаша. Мәҫәлән, Әзербайжандың dOM бойондороһоҙ театры, Төркиәнең Bostanci ART Хәсән Аджар продюсер компанияһы шундайҙар рәтенән.

Айһылыу Сынтимер ҡыҙы билдәләүенсә, абруйлы режиссерҙар менән бер рәттән, йәш режиссерҙар ҙа күп ҡатнаша фестивалдә. Ә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрын режиссер Айрат Абушахмановтың "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле күрһәтәсәк. Башҡорт артистары фестивалдең тәүге көнөндә сығыш яһаясаҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ошо көндәрҙә генә "Алтын битлек" театр премияһына лайыҡ булған "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле "Туғанлыҡ" фестиваленән һуң Ҡаҙанда үткән "Науруз" Халыҡ-ара төрки телле халыҡтарҙың театр фестиваленә юллана. Июндә уны Ырымбурҙың "Гостиный двор" фестивале, октябрҙә Санкт-Петербургта Театр олимпиадаһында көтәләр. Ноябрҙә иһә артистар "Алтын битлек"тең Ижевскиҙағы төбәк фествилендә ҡатнашасаҡ. Грозный, Иркутск - был спектаклде үҙҙәрендәге фестивалдә күрергә теләүсе төбәктәр байтаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠЫЛЫС КҮТӘРГӘН...

## ҡылыстан үлер

Ҡырҡҡа тиклем донъяны ҡырырмын, ҡырҡтан һуң бары менән торормон.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартайыу сәнғәте шунда: йәштәргә кәртә түгел, таяныс бул; дошманы түгел, уҡытыусыһы бул; вайымһыҙ түгел, аңлаусы бул.

**(А. Моруа).**

Аҡыллы кеше ғүмеренең икенсе өлөшөн беренсе өлөшөндәге яңылыш ғәҙәттәр һәм хата ҡараштар менән көрәшеүгә арнай.

**(Д. Свифт).**

Насар идара ителгән ил өсөн беренсе ҡотолоу сараһы - инфляция, икенсеһе - һуғыш. Икеһе лә ваҡытлыса сәскә атыу һәм ваҡытлыса һәләкәт алып килә.

**(Э. Хемингуэй).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ҡарт вафаты алдынан улын саҡырып алған да былай тигән: "Улым, мин һинең бәхетле булыуыңды теләйем. Бәхетле булыу өсөн ил гиҙ, хыялыңды нисек тормошҡа ашырырға икәнен әйтерҙәр", - тигән. Атаһы үлгәс, улы донъя гиҙеп сығып киткән. Бына ул бер йылғаға етә һәм яр буйында ябыҡ, ас, ҡарт ҡына бер ат йөрөгәнен күрә. "Һин ҡайҙа китеп бараһың, егет кеше?" тип һорай ат. "Бәхет эҙләп китеп барам, - ти егет. - Бәлки, һин уның ҡайҙалығын беләһеңдер?" "Йәш сағымда мине барыһы ла иркәләне, ашатты, эсерҙе, эшләтмәне, башҡалар хаҡында уйлап та бирмәнем, - ти ат. - Бына хәҙер ҡартайҙым, башҡаларҙың миндә бер эше лә юҡ. Шуға ла һиңә кәңәшем шул: йәшлегеңде һаҡла. Бөтә эште лә эшлә. Башҡаларҙың шатлығы менән шатлан. Хәстәрлектәрҙән ҡурҡма. Шул саҡта бар бәхет тик һинең эргәңдә булыр". Егет артабан китә һәм юл буйында бер йыланды күрә. "Ҡайҙа киттең, егет?" тип һорай йылан. "Бәхет эҙләп китеп барам". "Бына мин дә үҙемдең ағыуым менән ғүмер буйы ғорурландым, - ти йылан. - Минән барыһы ла ҡурҡа, тип уйланым. Юҡ, ҡурҡмайҙар, ә күрә алмайҙар. Һәр береһе мине үлтерергә теләй. Шуға ла мин хәҙер барыһынан да ҡасам. Һиндә лә бар ундай ағыу - ул һинең телең. Ҡара, телең берәүҙе лә сәбәпһеҙгә саҡмаһын. Ул саҡта һиңә берәүҙән дә ҡасырға тура килмәҫ һәм һин бәхетле булырһың... "Егет артабан китә һәм ҙур ҡошҡа тап була. Ҡош уның ҡайҙа китеп барыуы менән ҡыҙыҡһына. Егеттең яуабына ҡаршы ул ҡош шулай ти: "Һин күптән ил гиҙәһеңдер. Йөҙөңдө саң баҫҡан, кейемдәрең һәләмәгә әйләнгән. Кешеләр һинән йөҙ бора. Бәхет тә һинең эргәңдә туҡтап торорға теләмәҫ. Шуның өсөн һинең тирәңдә бар нәмәнең матур булыуына өлгәш. Ул саҡта бәхетеңде лә күрерһең".**

**Шул һөйләшеүҙән һуң егет кеше өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Хәҙер инде ул бәхет эҙләп ҡайҙалыр ситтә йөрөргә түгел икәнен ныҡлап аңлаған".**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танытҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 26 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары —
**50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 340